ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

27-2 май - июнь (һабанай - һөтәй)

2017

№21 (751)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Юрматылар ҡор йыйҙы



7,11

Тыуған ерендә...

кеше кәрәгерәк була



8

Шиғриәтебеҙ...

үҙ асылына ҡайта



9

Диндең асылы...

тиңлектә, тигеҙлектә



12-13

ТВ-программа 14

*Намыҫлы йәшәйем тиһәң, әлләкүпме өҙгөләнергә, бәргеләнергә, хаталанырға, башларға һәм ташларға, тағы башларға кәрәк. Тынысланыу - ул рухи әшәкелек.*

*(Лев Толстой).*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Телевидениела, видео һәм кинопрограммаларҙа, документаль һәм художестволы фильмдарҙа алкоголь ҡулланыуҙы тыйырға кәрәк, тигән тәкдим менән килешәһегеҙме?

**Вилурә ИҪӘНДӘУЛӘТОВА, режиссер, Рәсәй кинематографтар союзы ағзаһы, Халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй кинофестивалдәре һәм "Тәфи-Төбәк 2007" ТВ конкурсы лауреаты:** Килешәм. Эскелекте, тәмәке тартыуҙы, башҡа алама ғәҙәттәрҙе күрһәтер өсөн ҙур аҡыл, талант кәрәкмәй. Былар бөтә кеше лә булдыра ала торған яман сифаттар, фильм геройҙары характерын асыуҙа, унын кисерештәрен - ҡайғыһын йә шатлығын күрһәтеүҙә бик еңел алым, шуға ла уны, ҡайһы берәүҙәр раҫлауынса, художестволы алым, тип тә атағы килмәй. Образды асыуҙа бик еңел, тапалған юл был. Хәйер, был күренештең әхлаҡи принциптарҙан тайпылған икенсе яғы ла бар, йәғни бер нигә ҡарамаҫтан, матди файҙа ҡайғыртыу, ҡомһоҙлоҡ, табыш алыу маҡсаты. Йәшерен реклама тип атала ул. Телевидение тапшырыуҙарында, кинофильмдарҙа эскелек күренештәрен тыйыу тураһында был тәкдим ижад кешеләре араһында төрлөсә бәхәстәр килтереп тыуҙырҙы. Билдәле һәм ихтирамға лайыҡ ҡайһы бер артистар был сараны файҙаһыҙ ғәмәл, хатта аҡылһыҙлыҡ тип атаны, үҙҙәренең дә бындай ғәҙәттәрҙән азат булмауын дәлил итеп килтерҙе: уны күрһәтеүҙән тыйылып ҡына йәштәрҙе алкоголь, тәмәке шауҡымынан һаҡлап ҡалып булмаясаҡ, йәнәһе. Һәр кем үҙенсә уйларға хаҡлы, әлбиттә, ләкин минең фекерем шул: актер йә режиссерҙың кеше кисерешен асып биреүҙә башҡа алымдар табырлыҡ һәләте юҡ икән, ул мотлаҡ тәмәке йә шешәгә тотона. Ә беҙгә, ижад кешеләренә, киреһенсә, ана шул эскелек, тәмәке ҡоллоғонан сығыу, ҡотолоу юлын күрһәтергә кәрәк. Сәнғәттең, ижадтың төп бурысы шунда түгелме ни?

(Дауамы 2-се биттә).

ИҒТИБАР!



## ҺОРАУЫҢ БАРМЫ?

**31 майҙа 19 сәғәттән Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Вся Уфа" телеканалында тура эфирҙа телевизор ҡараусылар менән әңгәмә ҡорасаҡ.**

Мәрға һорауҙарығыҙ булһа, рәхим итегеҙ, (347) 255-90-27 телефоны буйынса мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Һорауҙарығыҙҙы шулай уҡ www.allufa.ru сайтында ҡалдырырға мөмкин. Йә булмаһа, 31 майҙа 18 сәғәт 30 минуттан алып Ирек Ишмөхәмәт улына һорау бирергә теләгәндәр өсөн "Ете ҡыҙ" фонтаны эргәһендә телеканалдың күсмә студияһы ла эшләйәсәк.

... ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

## СЫҒАРЫЛЫШ УҠЫУСЫҺЫНЫҢ...

### маҡсатлы сағылышы

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың ун беренсе синыф уҡыусылары өсөн "Яҙғы бал - 2017" сараһы ойошторолдо. "Уфанет" компанияһы тарафынан алтынсы тапҡыр үткәрелгән был сарала белем усаҡтарының биш меңгә яҡын сығарылыш уҡыусыһы ҡатнашты. Сығарылыш уҡыусыларын Федерация Советының комитет рәйесе урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова, Өфө ҡалаһы округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, БР Башлығы Рөстәм Хәмитов исеменән Республика Хөкүмәтенең эске сәйәсәт буйынса етәксеһе урынбаҫары Максим Михайлов тәбрикләне. Улар уҡыусыларға Берҙәм дәүләт имтихандарын уңышлы тапшырып, юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеп, республикаға һәм баш ҡалаға кәрәкле белгестәр булып ҡайтыуын теләне.**



(Дауамы 4-се биттә).

12+

✓ Телевидение, киностудияларға сәләмәт тормош өлгөһөн  раҫлаусы, махсус фильмдар төшөрөүгә дәүләт заказдары биреп, уларҙы финанслап эшләтергә кәрәктер? Маҡсат ҡуйыла икән, маҡсатлы эш алып барыу ҙа мотлаҡ.



ИШАРА

# БЕЛЕМЕҢ МЕНӘН БҮЛЕШ...



**Һуңғы ике-өс йылда башҡорт теленән диктант яҙыу матур күренешкә әүерелде. Был туған телебеҙгә иғтибар арттырыуҙың бер ысулы ла, тиергә мөмкин булыр ине, әгәр диктант яҙып, уның баһаларын белгәндән һуң, был акция киләһе йылға тиклем онотолмаһа.**

Шуның өсөн, диктант яҙыусыларҙың белеме ошо ғәмәл менән генә сикләнеп ҡалмаһын ине, тип теләге килә. Аллаһы Тәғәлә һәр кемгә үҙенә тейеш миссия биреп тыуҙырған икән, тимәк, Ерҙә ул ошо миссияны тормошҡа ашырырға тейеш. Шул миссияларҙың береһе - Ер йөҙөндә булған барлыҡ белемде барлыҡ халыҡтарға еткереү, уның менән бүлешеү. Әлеге ваҡытта белем менән бүлешеү һәм туған телеңде бар донъяға таратыу юлдарының береһе - ул Википедия. Моғайын, диктант яҙыусыларҙың күпселеге уның нимә икәнен белмәйҙер ҙә. Белгәндәре иһә үҙенә кәрәкле мәғлүмәт эҙләү өсөн файҙалана. Ғәмәлдә, Википедияла һүҙлектәр ҙә, вики-дәреслек тә, Вики-китапхана ла - барыһы ла бар. Ул ғына ла түгел, Википедияла булған мәғлүмәт донъяның барлыҡ телдәрендә яҙыла һәм тулылана. Ләкин уны тулыландырыу менән бары тик энтузиастар, төрлө тармаҡ хеҙмәткәрҙәре шөғөлләнә. Уларҙың эше диктант яҙыуға ҡарағанда мөһимерәктер, моғайын, сөнки улар белемдәрен үҙҙәрендә генә бикләп тотмай, бөтөн донъя халыҡтары менән бүлешә. Унан һуң, Википедия Башҡорт бүлеге менән генә бөтмәй. Әле күптән түгел генә Мәскәүҙә йыл һайын бирелгән Вики-премия тапшырыу тантанаһы булды. Унда теркәлеүселәрҙе ҡарай башлаһаң - ниндәй генә тармаҡ буйынса фән кандидаттары юҡ!

Шулай уҡ рәсми сайттар ҙа ирекле лицензияға күсә бара, яҙыусылар китаптарын йәки әҫәрҙәрен, ғалимдар ғилми хеҙмәттәрен  Википедияға ирекле лицензия менән ҡуя. Ә ғалимдар булған, тупланған ғилемдәрен китап йәки диссертация итеп яҙып бөтмәй тороп, киң йәмәғәтселеккә сығарырға ашыҡмай, сөнки Рәсәйҙә интеллектуаль милекте һаҡлау тураһында, йәғни авторлыҡ хоҡуҡтары тураһында ҡанун булһа ла, ул бары тик ҡағыҙҙа ғына ҡала.  Бөгөнгәсә интеллектуаль милеген һаҡлап судлашыусылар бик аҙ, һөҙөмтәлә урлашыуҙар, плагиат көсәйә. Википедия, киреһенсә, ошо урлашыуҙарға кәртә ҡуясаҡ, сөнки унда урынлаштырылған ғилми эш булһынмы ул, әҙәби әҫәрме, мәҡәләме, фотомы, донъяның барлыҡ мөйөштәренә таралыуына ҡарамаҫтан, уны ҡулланғанда мотлаҡ автор һәм ирекле лицензия күрһәтелергә тейеш. Башҡортостан, Рәсәй өсөн интеллектуаль милек йәки авторлыҡ хоҡуғы бик һанға һуғылмаһа ла, донъя күләмендә был йәһәттән ҡанун аныҡ тормошҡа ашырыла.

Эйе, диктантты бишкә йәки түбән баһаға яҙыусыларҙың белем кимәле - ул уларҙың интеллектуаль милке. Уның менән улар үҙҙәре теләгәнсә идара итергә хоҡуҡлы. Ләкин ошо тоталь диктант яҙыуҙа ҡатнашыусы һәр кем Башҡорт Википедияһына бер генә сифатлы мәҡәлә эшләгәндә лә күрһәткестәр тағы ла юғарыраҡ булыр ине...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Телевидениела, видео һәм кинопрограммаларҙа, документаль һәм художестволы фильмдарҙа алкоголь ҡулланыуҙы тыйырға кәрәк, тигән тәкдим менән килешәһегеҙме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Азамат ҠАШҠАРОВ, табип, Баймаҡ районы наркологы:*** Әгәр был юҫыҡта һүҙ яман ғәҙәттәрҙең балаларға, үҫмерҙәр һәм йәштәргә йоғонтоһо хаҡында бара икән, улар әллә ни телевизор ҡарап та ултырмай,  хәҙер уларҙың ике күҙе, ике ҡолағы - фәҡәт компьютерҙа. Ә унда, үҙегеҙгә мәғлүм, эскелек кадрҙары булған кинофильмдар ғына түгел... Күпкә хәүефлерәк донъяла гиҙә улар бөгөн. Шуға күрә минең өсөн телевидение тапшырыуҙарында һәм сериалдарҙа эскелек күренештәрен тыйыу мәсьәләһе принципиаль булып тормай. Әлбиттә, сикләү ҙә кәрәктер, сөнки, ысынлап та, ҡайһы ғына фильмды алма - унда мотлаҡ әлеге күренешкә урынды йәлләмәй режиссерҙар. Тормошта ла - шул, кинола ла, тигәндәй, артыҡ та булып китә шул ундай нәмә. Әлеге лә баяғы реклама маҡсатын да ҡыуалыр фильм авторҙары. Ә нишләп фәҡәт алкоголь дә тәмәкене рекламаларға? Арыу ғына  түләйҙәр, күрәһең. Юғиһә, беҙҙә яҡшы, файҙалы миҫалдар ҙа күп бит. Ниңә, мәҫәлән, сәләмәт тормош күренештәрен рекламаламаҫҡа? Араҡы эскән кадрҙарҙы спорт менән шөғөлләнеү күренештәренә алмаштырыуҙан фильм, әгәр ул шәп картина икән, бер ни ҙә юғалтмаҫ ине, моғайын. Донъяға билдәле спортсы егеттәребеҙ бар: Олимпия чемпионы Ирек Зарипов, Рәсәйҙең  иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллин, Американы шаулатҡан боксер, кикбоксинг буйынса донъя чемпионы Хәбир Сөләймәнов  һәм башҡалар. Йәштәргә һәм балаларға күберәк ана шундай көслө шәхестәрҙең тормош өлгөһөн күрһәтергә, ыңғай геройҙар миҫалында тәрбиәләргә  кәрәк уларҙы. Эскелек, тәмәке тартыу ғәҙәте ҡанына һалынғандары былай ҙа күп уйлап тормаҫ, юғиһә. Миңә ҡалһа, эскелекте сикләүҙәрҙең элеккерәк, совет осорондағы ҡайһы бер саралары һөҙөмтәлерәк булып тойола ине. Мәҫәлән, сауҙа нөктәләрендә спиртлы эсемлектәр һатыу ваҡытын  14-тән алып 19 сәғәткә тиклем ҡалдырыу, көмөшкәселәргә ҡарата аяуһыҙ көрәш саралары, "айыҡлыҡ биләмәләре" иғлан итеүҙәр, йәмәғәт урындарында эскән һәм иҫерек килеш йөрөгән кешеләргә йоғонто саралары һәм башҡалар. Ил етәкселеге бер мәл, М.Горбачев заманындағы эскелеккә ҡаршы көрәш кампанияһы осоронда, алкоголь продукцияһы етештереүҙе сикләүҙән дә ҡурҡып торманы, бюджетҡа килем килмәй, тип ҡараманылар бер ҙә был мәсьәләгә.

Ә, ғөмүмән, минең күҙәтеүҙәрем буйынса, йәштәр хәҙер әллә ни эсергә ынтылып та бармай. Медосмотр үтергә киләләр, улар менән әңгәмәләшеп тә алырға тура килә - күпселеге аҡса эшләү теләге менән Себергә сығып китә. Был аңлашыла ла: машина алырға, йорт һалып инергә, башлы-күҙле булырға маҡсаттары. Шулай ҙа уларға ҡарата бик иғтибарлы булырға кәрәк, сөнки икенсе бер хәүеф - наркомания һағалай. Бына шул ауға килеп эләкмәһен йәштәр.

***Зөлфирә ИСКӘНДӘРОВА, уҡытыусы:*** Беҙҙә берәй яҡшы эш башларға ниәтләһәләр, ул мотлаҡ булыр-булмаҫ, ярты-йорто килеш тормошҡа ашырыла ла, аҙаҡ "тоҙлана", шунлыҡтан сараның йоғонтоһо ла булмай, әһәмиәте лә ҡалмай.  Яртылаш сараларҙың булғанынан булмағаны яҡшы, дөрөҫөн әйткәндә.  Әлеге бына телевидениенан күрһәтелгән фильмдарҙа эскелекте пропагандалау күренештәрен тыйыу күптән һәм бик кәрәк сара ине.  Ысынлап та, ниндәй генә фильмды алма - бөтәһендә лә эскелек күрһәтелә.  Айырыуса НТВ-ла ныҡ күҙгә бәрелә, сөнки был канал детективтар күрһәтеүгә күп ваҡыт бүлә. Полиция, "крутой" тәфтишселәрҙең көсөргәнешле эшмәкәрлектәре мотлаҡ араҡы  эсеү, тәмәке тартыу күренештәре менән тығыҙ бәйләп алып барыла. Әйтерһең дә, шунһыҙ эш бармай,  нервыларҙы  йомшартып алырға, көсөргәнештән  бына шулай ғына арынырға була, тигәнде аңлата был, йәнәһе лә. Шуныһы үкенесле: "Ватыҡ шәмдәлдәр урамы" ("Улицы разбитых фонарей"), "Менттар һуғышы" ("Ментовские войны"), "Үлтергес көс" ("Убойная сила"), "Каменская" һәм башҡа шундай популяр сериалдарҙа эскелек һәм туҡтауһыҙ тәмәке быҫҡытыу ыңғай геройҙар тарафынан башҡарыла. Йәнәһе, улар шундай көсөргәнешле аҡыл эшмәкәрлегенә дусарҙар - араҡы йә тәмәкеһеҙ мәсьәләне йырып, еңеп сығыуы бик ауыр, бына ниндәй уй һалына тамашасы аңына.  Тимәк, ҡатмарлы, ауыр минуттарҙа шулай итеп еңеллек табырға була, тигән уй ҡалмаймы ни үҫмер аҡылында? Әлбиттә, ҡала! Ундай кадрҙарҙы тыйыу бик дөрөҫ, урынлы  буласаҡ, ләкин, башта әйтеүемсә, был ярты-йорто сара.Телевидениела тыйыла икән, хәҙер бит интернет бар, ә ундағы ғибрәттәр ТВ-лағы  ише генә түгел, үҙегеҙ беләһегеҙ. Тыйылған емеш татлы була, тигәндәй, шуның менән генә сикләнеү дөрөҫ булмаясаҡ. Телевидение каналдарына, киностудияларға сәләмәт тормош өлгөһөн  раҫлаған, шулай уҡ эскелек, наркоманияның кеше ғүмерҙәрен киҫә торған, хыялдарға тоҙаҡ ҡорған  ҡоротҡос асылын күрһәтеүсе махсус фильмдар төшөрөүгә дәүләт заказдары биреп, уларҙы финанслап эшләтергә кәрәктер? Маҡсат ҡуйыла икән, маҡсатлы эш алып барыу ҙа мотлаҡ. Юғиһә, тыйырға  һәм шуның менән вәссәләм генә булмай бит. Буш урынды ниндәйҙер файҙалы һәм әҙәми йөкмәтке менән тулыландырырға  кәрәк, бына шул саҡ һөҙөмтә булыр, бәлки.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**


ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе - үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

• Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**


## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Өфө" футбол клубының спорт объекттарында булды. Уҙған миҙгел дауамында фитнес-үҙәк һәм кафе биналары үҙгәртеп ҡоролған һәм йүнәтелгән, кәрәкле ҡорамалдар һатып алынған, тип хәбәр итте "Өфө" футбол клубының генераль директоры Шамил Ғәзизов.  Уның әйтеүенсә, хәҙер физкультура-һауыҡтырыу комплексында спорт майҙансыҡтарын яңыртыу һәм киңәйтеү хаҡында мәсьәлә ҡарала, ул бында яңы, шул иҫәптән балалар өсөн секциялар асырға, шөғөлләнергә килеүселәрҙең һанын арттырырға мөмкинлек бирәсәк.

✓Башҡортостанда Фән һәм техника өлкәһендә дәүләт премияһы лауреаттары яртышар миллион һум аласаҡ. Республика Башлығы ҡарамағындағы Дәүләт премиялары буйынса комиссия эштәрҙе ҡабул итеү ваҡытын 9 июнгәсә оҙайтты. Уның йомғаҡтары буйынса һәр ҡайһыһы 500 мең һум күләмендә өс премия тапшырыласаҡ. Документтар түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: Өфө ҡалаһы, Туҡай урамы, 46, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте, 328-се бүлмә. Белешмәләр өсөн телефон: 280-80-93.

✓Өфөлә Рудольф Нуриев исемендәге XXI Халыҡ-ара балет сәнғәте фестивале "Сыңрау торна" милли балетының премьераһы менән асылды. Лев Степанов һәм Заһир Исмәғилевтың балеты яңынан сәхнәгә ҡуйылды: декорацияларҙы театрҙың баш рәссамы Рифҡәт Арыҫланов эшләне. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов фестивалде асыу тантанаһында абруйлы ҡунаҡ булды. Спектаклдән һуң ул артистарҙы ихлас тәбрикләп, рәхмәт һүҙҙәрен әйтте. Билдәле балет тәнҡитселәре лә спектаклгә юғары баһа бирҙе.

✓Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев Федерация Советы спикеры Валентина Матвиенконың балиғ булмағандарға ҡаршылыҡ акцияларында ҡатнашыуҙы тыйыу тураһында тәҡдимен хупланы. "Дәүләт Йыйылышында балаларҙы партия билдәһе буйынса иртә сәйәсиләштереүҙе тыйған федераль закон өҫтөндә эш бара, - тип билдәләне БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. - Был йәштә илһөйәрлек кенә берҙән-бер идеология булыуы мөмкин. Балалар сәйәси лозунгтар менән мауығырға түгел, ә уҡырға тейеш".

✓ *Республикабыҙҙың төп символына әүерелгән киң билдәле шәхес иҫтәлегенә ҡағыла икән, был көндәр һәүетемсә, шым ғына үтеп китергә тейеш түгел, ә беҙҙең йоҡо баҫып барған аңыбыҙҙы дер һелкетергә тейеш, тип уйлайым.*



БЫЛ АЙҘА...

# ОЖМАХТЫҢ БЕР БОСМАҒЫЛЫР

**Тормошобоҙҙо ебәк кеүек наҙлы еле, ҡайнар ҡояшы, хуш еҫле үлән-сәскәләре, еләк-емеше менән ни бары өс ай ғына йәмләп, йылытып өлгөрә йәй мәле.**

Әсәйем "Йәй - ожмахтың бер босмағылыр", тип ҡабатларға ярата ине. Йәй ғүмере ҡыҫҡа шул беҙҙә, үкенескә күрә. Уның ҡарауы, әле генә тыуып, сәскә күҙҙәрен асҡан һөтай көн яҡтыһына кинәндерәсәк беҙҙе: Ҡояш апайыбыҙ был айҙа таңғы сәғәт 5-се яртыларҙа уҡ уянып, көнө буйы тир түгер ҙә, киске 10-дарға ғына саҡ барып ауышып китер. Шулай итеп, ошо айҙа көн яҡтыһының оҙайлығы 17 сәғәт тә 17 минутҡаса дауам итәсәк! Йәйҙең иң йәмле мәле: һабантуйҙар, ауылдаштар байрамдары гөрләп торор. Өҫтәүенә, быйыл изге Рамаҙандың тап ошо айға тап килеүе июндең бәҫен тағы арттыра төшөр. Ураҙа тоторға ниәттәрен башлап ебәреүселәргә Хоҙай Тәғәлә үҙе ярҙам итһен: сабырлыҡ, еңеллек килтерһен һәм күңелдәрен сафландырып, изге ғәмәлдәрен ҡабул ҡылһын, тип теләйек. Ай календарына күҙ һалып ҡына алыу ҙа уның байрамдарға, иҫтәлекле, тарихи һәм һөнәри даталарға бай булыуын күрһәтә. Бынан тыш, ошо илаһи, хозур мәл - йәй башында байтаҡ билдәле шәхестәр, талант эйәләре донъяға килгән икән. Бөтөн был мәғлүмәттәргә бер күҙәтеүҙә урын биреп бөтөүе лә мөмкин түгел. Шуға ла кемдер, ниҙер күҙ уңынан төшөп ҡалһа, беҙҙе хәтерһеҙлектә ғәйепләмәһен уҡыусыбыҙ.

Быйыл донъя күләмендә 67-се тапҡыр Балаларҙы яҡлау көнө (**1**) билдәләнә, ләкин был сараға ярты быуаттан ашыу ваҡыт үтһә лә, Ер йөҙөндә балалар һаман да яҡлауға мохтаж булып ҡала. Африка, Азия илдәрендә улар аслыҡтан, СПИД афәтенән яфа сикһә, туҡтауһыҙ рәүештә әле - ул, әле был ҡитғала барған һуғыштарҙа һәләк булыусы, имгәнеүсе балаларҙың булыуы, ғөмүмән, бер ниндәй сиктәргә һыйғыһыҙ. Миҫал эҙләп алыҫ йөрөргә түгел. Күршебеҙҙә генә - фашистик режимлы Украина властарының енәйәтсел яуапһыҙлығы арҡаһында хәҙер нисә йыл үҙ халҡына ҡаршы алып барылған һуғышта ЛНР менән ДНР республикаларында 50-нән ашыу бала һәләк булһа, 140-тан ашыуы ауыр яраланған; уларҙың хатта мәктәптәре, дауаханаларына тиклем утҡа тотола, шартлатыла. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, халыҡ-ара кимәлдә бындай ҡанһыҙлыҡҡа сик ҡуйыусы сара юҡ - шуныһы ҡурҡыныс. **Балалар тәү ҡарашҡа күҙгә күренерлек бер ниндәй хәүеф-хәтәр булмаған беҙҙең бөгөнгө тыныс тормошобоҙҙа ла бит хатта яҡлауға һәм күҙ ҡараһылай һаҡлауға мохтаж.** Яуапһыҙ һәм намыҫһын юйған берәҙәк, эскесе йә булмаһа яман ғәҙәтле әҙәмдәрҙән һаҡлау кәрәк сабыйҙарҙы. Юғиһә, күпме бала эҙһеҙ юғала, үлтерелә, тереләй сүп-сар һауытына ырғытыла, туҡмала, ата-әсәле көйө балалар йорттарында тилмерә ... Балалар көнө менән бер осорҙа билдәләнеүсе Ата-әсәләр (**1**) һәм Атайҙар (**18**) көндәре үҙ алдарына ниндәйҙер маҡсат ҡуйған икән, ул фәҡәт



әлеге иң беренсел бурыс - балаларҙы яҡлау, уларҙы һау-сәләмәт, ата-әсәле итеп үҫтереү мәсьәләһен алға ҡуйырға тейеш.

Июнь көн тәртибенә ҡуйған икенсе мөһим тема - тирә-яҡ мөхитте һаҡлау (күрәһегеҙме: бөтөн нәмә һаҡлауға мохтаж бөгөн). Эколог көнө (**5**) менән Бөтөн донъя тирә-яҡ мөхит көнө (**5**) бер юлы билдәләнә. Экологияға ҡарата һаҡсыллыҡ күп яҡлы бурыс ул, әммә июндә урмандарыбыҙҙы янғындан һаҡлау иң беренсе мәсьәлә булып тора. Тәбиғәт ҡосағына сығыусылар, туристар уйһыҙ-ниһеҙ төпсөк ырғытып китеүҙән, усаҡ яғып, шешлек ҡыҙҙырыу кеүек эгоистик ниәттәрҙән тыйылып торһон ине.

Рус теле көнө (**6**) менән Пушкин көнөнөң дә тап килеүе осраҡлы түгелдер: рус телен яҡшы үҙләштерәм, тиһәң, Пушкинды уҡы! Ай календарының артабанғы теҙмәһенән Социаль хеҙмәткәр (**8**), Халыҡ-ара архив (**9**) көндәренең үҙ объекты, мәғәнәһе бар, ә бына Тукыу һәм еңел сәнәғәт көнөн (**11**) кем билдәләй икән беҙҙә? Үзбәк-ҡырғыҙ, төрөк тә ҡытайға төҫтөр, тимен, был датаны. Беҙ бит хәҙер рәхәткә сыҡтыҡ: бер ни етештермәй, ситтән килгәнде генә кейәбеҙ, төрөктөкө - ҡиммәт, ҡытайҙыҡы - сифаһыҙ, үзбәктеке зауыҡһыҙ булыуға ла ҡарап тормайбыҙ хатта...

Һуңғы йылдарҙа **11-20 июнь** Башҡортостаныбыҙҙа Салауат көндәре тип иғлан ителә, тик эш шуның менән сикләнә лә, буғай. Ил батырының тыуған төйәгендә үткәрелгән байрамды иҫәпкә алмағанда. Ун көнлөк иғлан ителгән икән, өҫтәүенә, ул **республикабыҙҙың төп символына әүерелгән киң билдәле шәхес иҫтәлегенә ҡағыла икән, был көндәр һәүетемсә, шым ғына үтеп китергә тейеш түгел, ә беҙҙең йоҡо баҫып барған аңыбыҙҙы дер һелкетергә тейеш, тип уйлайым.** Үткәндә-ә-ә, 2004 йылда милли батырыбыҙҙың 250 йыллыҡ юбилейын билдәләгән ваҡиға кеүек. 2010 йыл Торатауҙа үткәрелгән Салауат йыйыны ла хәтерҙә ҡалырлыҡ булды, тик башҡа йылдарҙа был иҫтәлекле датаға республика кимәлендә иғтибар кәмей төштө, ул ни бары Салауат районы сараһына ғына әйләнеп барғандай. Декаданың республика кимәлендә ойоштороу кәңәшмәһе, режиссерҙары, сценарий авторҙары һәм башҡа яуаплы кешеләре билдәләнеп, байрам сценарийы йыл һайын төрләндерелеп торорға тейештер. Әйткәндәй, был көндәр тантанаһын артабанғы саралар, йәғни Рәсәй көнө (**12**), шул уҡ көндә билдәләнеүсе Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы - Өфө көнө (**12**) менән дә бәйләп, берләштереп алып барырға ла була. Ғөмүмән, йәшәйеш кимәле ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, халҡыбыҙ байрамдарҙы ярата, сөнки ул бер аҙға ғына булһа ла тормош проблемаларынан арындыра, күңелдәрҙе сафландыра, кәйефте күтәрә. **Тик шуныһы йәл: элегерәк гөрләп үткән ҡайһы бер сараларыбыҙ бөтә халыҡ байрамы булыуҙан туҡтап, уның ҡайһы бер өлөшөнөң күңел ихтыяжын сағылдырмай башланы, даирәһе сиктәре тарайып ҡалды. Былай тигәндә мин Башҡортостан матбуғат һәм мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре көнөн (14) күҙҙә тотам. Күптәребеҙ гәзит тә, китап та уҡымай хәҙер, донъя ысынбарлығын фәҡәт телевидение менән интернет "көҙгөһө" аша күҙәтә йә булмаһа, ғөмүмән, был темаға "һуҡыр-һаңрау" булып ҡалдылар. Ҡайҙа булып бөттө икән беҙҙең элекке әүҙем ҡарашлы, тура һүҙле гәзит уҡыусыларыбыҙ? Йәштәребеҙ ниңә матбуғат баҫмаларын үҙ итмәй?** Башҡорт телендә сыҡҡан гәзит-журналдарыбыҙға тоғро ҡалған бөгөнгө барлыҡ уҡыусыларыбыҙҙы ла уртаҡ байрамыбыҙ менән ихлас ҡотлайбыҙ! Һәм уларға һаулыҡ, оҙон ғүмер теләйбеҙ, сөнки улар үҙ ғүмерҙәре, илһөйәрлек һәм телһөйәрлек сифаттары менән туған телебеҙ ғүмерен дә оҙайта бит. Шул уҡ ваҡытта бик күп журналистар өсөн оҫталыҡ һәм тормош мәктәбе булған оһолло баҫмабыҙ - "Башҡортостан" гәзитенең 1917 йылдың **14 июнендә** "Башҡорт иттифағы бюроһының мөхбире" тигән исем менән тәүге һаны сығыуға 100 йыл тулыу айҡанлы ла бөтөн ҡәләмдәштәребеҙҙе ихлас ҡотлайбыҙ! Замана ниндәй ҡиәфәткә инһә лә, гәзит-журналдарыбыҙ һәм китаптарыбыҙ йәшәне, йәшәйәсәк, тигән өмөттә ҡалайыҡ, фәҡәт донъялар имен булһын. Кешелек тарихындағы иң фажиғәле, иң хәсрәтле ҡара көн - **22 июнь** иртәһе башҡаса ҡабатланмаһын.

Изге рамаҙан көндәрендә, ай ахырын теүәлләп ҡуйыусы Ураҙа байрамында (**25**) илебеҙгә - именлек, еребеҙгә - бәрәкәт, йән-тәнебеҙгә көс-ҡеүәт теләйек, шул саҡ беҙгә бер ниндәй хәүеф тә янамаҫ. Әммә шуныһы: хәүеф тигәнде ситтән көтөп һағайғанда, ул арабыҙҙан, үҙебеҙҙең хилафлыҡтарҙан пәйҙә була күрмәһен. Шул хәүефтәрҙең иң яманы - битарафлыҡ, хәтер ҡыҫҡалығы. Уның бер дауаһы - үткәндәребеҙҙе онотмау, тарихыбыҙҙы, зыялыларыбыҙҙы хөрмәтләү. Һүҙҙе башлағанда, был айҙа билдәле һәм талантлы шәхестәребеҙ донъяға килгән, тип әйтелгәйне. Ана шуларҙан бейеүсе, балетмейстер, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Йәүҙәт Бикбирҙин (тыуыуына - 65 йыл), яҙыусы Фазыл Туйкин (130 йыл), дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1931-1937 йылдарҙа ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары Әхмәт Иҫәнсурин (120), шағир, "Йәш көс"гәзите мөхәррире Шамун Фидаи (115 йыл), ҡурайсы, фольклорсы, педагог, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты Ғата Сөләймәнов (105 йыл), педагог, методист, педагогика фәндәре кандидаты, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Төхвәт Аслаев (95 йыл), яҙыусы, әҙәбиәт белгесе, фольклорсы, филология фәндәре докторы, профессор Кирәй Мәргән (105 йыл) беҙҙең арала инде булмаһалар ҙа, изге эштәре менән халҡыбыҙ күңелендә йәшәйҙәр. Иҫкә алайыҡ уларҙы.

**Һөтай юбилярҙары:**

**1 -** хирург, 1994-2011 йылдарҙа БДМУ ректоры, академик, медицина фәндәре докторы, профессор, БР Хирургтар ассоциацияһы президенты, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Вил Тимербулатовҡа** - 65 йәш (1952).

**10 -** яҙыусы, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Гүзәл Ситдиҡоваға** - 65 йәш (1952).

**23 -** М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Сара Буранбаеваға** - 50 йәш (1967).

**24 -** шағир, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт **хеҙмәткәре Әсхәл Әхмәт-Хужаға** - 75 йәш.

**25 -** композитор, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Роза Сәхәүетдиноваға** - 80 йәш (1937).

**30 -** юрист, дәүләт эшмәкәре, РФ Дәүләт думаһы депутаты Зариф Байғусҡаровҡа - 50 йәш (1967).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2017 йылдың 2 июлендә "Башҡортостан һауа юлдары" самолеты пассажирҙарының Боден күле өҫтөндәге һауала һәләк булыуына 15 йыл тула. Ошо ҡот оСҡос фажиғәлә 71 кеше - 69 пассажир һәм Ту-154М экипажы ағзаларының ғүмере өҙөлдө, шуларҙың 52-һе - балалар һәм "Боинг-757"-нең ике пилоты. Матәм датаһына бәйле 1-3 июлдә Башҡортостан һәләк булғандарҙың туғандарының Германияға сәфәрен ойоштора.

✓Өфөлә 1 июндә, Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөндә, "Kids Rock Fest" тигән балалар рок-фестивале ойоштора. Ул "Ғаилә һәм ҡала - бергәләп үҫәбеҙ" байрамы барышында уҙғарыла. Сараны Салауат Юлаев исемендәге майҙанда үткәреү планлаштырыла. Сара иртәнге сәғәт 11-ҙән киске 8-гә тикем барасаҡ.

✓Синоптиктар йәйгеһен Рәсәйҙең Европа өлөшөндә һауа температураһының нормаға яҡын һәм унан юғарыраҡ булыуын көтә. Аномаль ямғырҙар яуыу ихтималлығы аҙ. Башҡортостан Гидрометеорология үҙәгенең бүлек етәксеһе Гөлназ Заһитова: "Рәсәй Гидрометеорология үҙәгенең оҙаҡ ваҡытҡа бирелгән фараздары буйынса, республика биләмәһендә йәйҙең йылы, яуым-төшөмдөң нормаға ярашлы, июль айының йылы һәм ҡоро булыуы көтөлә", - тип һөйләне.

✓Дүшәмбе, 29 майҙа, Өфөләге Салауат Юлаев майҙанында (Зәки Вәлиди урамы, 2) күсмә ҡан биреү станцияһы эшләйәсәк. Башҡортостандың IV Граждандар форумы барышында иртәнге сәғәт 9-ҙан көндөҙгө 3-кә тиклем "Беҙ һинең менән бер ҡандан" акцияһы уҙғарыла. Сараның төп маҡсаты - Өфөлә донорлыҡ хәрәкәтен популярлаштырыу һәм үҫтереү. Өҫтәмә мәғлүмәтте (347) 282-99-97 телефоны буйынса Ҡаланы үҫтереү йәмәғәт фондында алырға мөмкин.

✓2016 йылдың авгусында Халыҡ-ара паралимпия комитеты тәүге тапҡыр рәсәйҙәрҙе Рио-де-Жанейролағы Паралимпиаданан ситләштереү тураһында ҡарар ҡабул иткәйне. Барселоналағы ултырышта Халыҡ-ара паралимпия комитетының Башҡарма комитеты бер тауыштан Рәсәйҙең Паралимпия комитетын ситләштереүҙе оҙайтты. Был Рәсәй спортсыларына 2018 йылғы Паралимпиадаға һайлап алыу ярыштарында сығыш яһарға мөмкинлек бирмәйәсәк.

**✓ "Һуңғы ҡыңғырау" сараһы үткәрелгән көндә республикала алкоголле продукцияны ваҡлап һатыу тыйылды. 27 июндә лә ошондай уҡ саралар күреләсәк.**



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҠЫҢҒЫРАУ СЫҢЫ...

## аҡ юл теләй



**Уҡыу йылы тамамланып, өлгәшкән уңыштар һәм алған белемдәргә йомғаҡ яһалған "Һуңғы ҡыңғырау" сараһы быйыл Өфө уҡыусылары өсөн 25 май көнө ойошторолдо.**

Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова әйтеүенсә, "Һуңғы ҡыңғырау" һәм сығарылыш кисәләрен уҡыусылар мәктәптәрҙә, ә ун өс белем усағы театр һәм мәҙәниәт һарайҙары залдарында ойоштorҙо. "Бына бер нисә йыл инде мәктәптәр сығарылыш кисәләрен кафе һәм ресторандарҙа билдәләмәй", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Елена Роберт ҡыҙы. Әйткәндәй, быйыл "БР-ҙа этил спирты, алкоголь һәм спирт ҡушылған продукцияны етештереү һәм һатыуға сығарыу эшен тәртипкә килтереү, алкоголле эсемлектәрҙе ҡулланыуҙы (эсеүҙе) сикләү" тураһындағы законға ярашлы, "Һуңғы ҡыңғырау" сараһы үткәрелгән көндә республикала алкоголле продукцияны ваҡлап һатыу тыйылды. Ғәзиз балаһы менән бер-бер хәл булып ҡуймаһын, тип йөрәген ҡулына тотоп ултырырға әҙерләнгән ата-әсәләр был хәбәрҙе бик ыңғай ҡабул итте. Өҫтәүенә, Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һорауы буйынса, хоҡуҡ һаҡлау органдары, Өфөнөң йәмәғәт именлеге үҙәге, район хакимиәттәре 25 май көнө күпер, йылға буйҙарын айырыуса ҡаты контролдә тотто, юл хәүефһеҙлегенә ҙур иғтибар бүлде. Әйткәндәй, урта дөйөм белем биреү учреждениеларын тамамлаусы йәштәргә таныҡлыҡ тапшырыласаҡ көн - 27 июндә лә ошондай уҡ саралар күреләсәк.

"Һуңғы ҡыңғырау"ҙан һуң Өфөлә 4800 кеше дәүләт имтихандарын тапшыра башлаясаҡ. Беренсе имтихан география һәм информатика предметтары буйынса 29 май көндө ойоштorола. Мәғлүмәттәр буйынса, быйыл Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһын 46 уҡыусы тамамлай, уларҙың күбеһе техник һөнәрҙәр үҙләштерергә теләй һәм башлыса БДИ-ны теүәл фәндәр буйынса тапшырасаҡ. З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһында быйыл 17 сығарылыш уҡыусыһы, улар "Һуңғы ҡыңғырау" сараһы ваҡытында белем усағы территорияһындағы "Сығарылыш уҡыусылары аллеяһы"на беренсе булып шыршы ағастары ултыртты. Гимназия етәкселеге киләсәктә ағас ултыртыу изге йолаға әйләнер, тип өмөт итә.

Ә бына М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһын 58 ун беренсе синыф һәм 73 туғыҙынсы синыф уҡыусылары тамамлай. "Уҡыусыларыбыҙ араһында республика һәм Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттарына персональ саҡырыу ҡағыҙҙары алғандар бар, бик көслө физиктар, буласаҡ табиптар, телселәр һәм әүҙем волонтерҙар тамамлай гимназияны. Маҡсатлы балаларыбыҙ тормошта юғалып ҡалмаç, хыялдарын мотлаҡ бойомға ашырырҙар, тип ышанам. Бөтә сығарылыш уҡыусыларына яратҡан һөнәренең нескәлектәренә төшөнөп, алмаштырғыһыҙ белгес булһындар, эшләгән эшенән һәм яҡын кешеләре менән аралашыуҙан йәм, тәм табып йәшәһендәр, тип теләйем", - тине гимназия директоры Гөлназ Әхмәҙиева. Был теләктәргә беҙ ҙә ҡушылабыҙ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# СЫҒАРЫЛЫШ УҠЫУСЫҺЫНЫҢ...

## маҡсатлы сағылышы



*Сығарылыш уҡыусыларын Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов сәләмләй*

(Башы 1-се биттә).

Өфөләге "Яҙғы бал" байрамы Ленин, Пушкин урамдары буйлап урынлашҡан ете майҙансыҡта төрлө бейеү коллективтарының концерт номерҙарынан башланып китте. Был майҙансыҡтарҙа халыҡ бейеүҙәре, брейк-данс, бал бейеүҙәрен оҫта башҡарыусы уҡыусылар сығыш яһаны. Пушкин һәм Ленин урамдары буйлап теҙелгән "Сығарылыш уҡыусылары аллеяһы - 2017" бөтәһе өсөн дә ҡыҙыҡлы күргәҙмә булып сыҡты. Унда баш ҡаланың белем усаҡтарында уҡыған балаларҙың фотолары аҫтында һәр кемдең киләсәктә үҙләштерәсәк һөнәре тураһында мәғлүмәт бирелгәйне. Ойоштороусылар ҙур плакаттарҙа статистик мәғлүмәттәр ҙә килтерергә онотмаған. Шулай итеп, баш ҡала сығарылыш уҡыусылары араһында 257 кеше - инженер, 171 кеше - табиб, 166 кеше - программист, 101 кеше юрист булырға хыяллана икән. Тағы ла киләсәктә Башҡортостанда 69 космонавт, 87 архитектор, 11 тату оҫтаһы, 10 министр, 7 биоинженер һәм генетик, 6 продюсер, иретеп йәбештереүсе һәм һалым инспекторы, 5 шағир һәм утын ҡырҡыусы һөнәрле йәштәр үҫеп етеүе бар. Һөнәрҙәр исемлеге менән танышҡанда балаларҙың күбеһе үҙ киләсәген аныҡ күҙ алдына килтерә, маҡсатлы икәненә инанаһың. Сөнки ҡайһы берәүҙәр хатта ҡайһы ойошмала, ниндәй вазифала эшләйәсәгенә тиклем билдәләгән. Әлбиттә, беҙҙең балалар аҡыллы ғына түгел, уғата шаян да һәм араларында инквизиция судьяһы, кардинал йә күрәҙәсе булам тип яуап биреүселәре лә бар ине.

Синыф менән төшкән фотолар конкурсына ла ошо "Яҙғы бал" байрамы үткәрелгән көндә йомғаҡ яһалды. Унда Өфө ҡалаһы 23-сө һанлы мәктәбенең 11 "А" синыфы уҡыусылары беренсе урын алды. Күргәҙмәлә был конкурста ҡатнашыусы синыфтарҙың үҙенсәлекле, сағыу һәм күңелле фотолары ла бар ине.

"Яҙғы бал" байрамының иң күркәм өлөшө - аҡ алъяпҡыслы ҡыҙҙар һәм бөхтә костюмдар кейгән егеттәрҙең парлашып вальс бейеүе иç киткес бер күренеш булды. Уны ситтән күҙәтеүсе оло йәштәрҙәге тамашасылар "Эх, беҙҙең "Һуңғы ҡыңғырау" шулай үткәрелгән булһа!" - тип һоҡланып, бер аҙ көнләшеп тә баҡһа, өлкән ағай-апайҙарын күрергә килгән балалар киләсәктә ошо майҙанда үҙе бейеп йөрөйәсәген күҙ алдына килтереп торҙо. Ә быйыл Совет майҙанында үткәрелгән байрамдың уртаһында ҡайнап йөрөгән сығарылыш уҡыусылары иң шатлыҡлы минуттарының береһен кисерҙе. Республика инженерҙар лицей-интернатының ун беренсе синыф уҡыусыһы Сыңғыҙ Нәҙерғолов әйтеүенсә, ғүмерҙә бер тапҡыр ғына була торған был сарала ҡатнашыу мәңгелеккә иҫтә ҡаласаҡ. Уның синыфташы Азат Хоҙайғолов: "Өфөләге бөтә ун беренсе синыф уҡыусыларын берләштергән "Яҙғы бал" сараһы меңләгән кешене бергә йыйыуы менән генә түгел, бейеү флешмобында төрлө халыҡ бейеүҙәрен башҡарыу һәм вальс бейеү менән хәтерҙә ҡаласаҡ", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Яҙғы бал" сараһы сығарылыш синыф уҡыусыларының ғына түгел, ата-әсәләр һәм педагогтарҙың да яратҡан байрамына әүерелде. Ойоштороусылар әйтеүенсә, былтыр ни бары һигеҙ уҡытыусы ғына вальс бейеһә, быйыл һикһәнгә яҡын педагог һәм ата-әсәләр балалар менән бергә майҙанға сыҡҡан.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СИТТӘРҘЕ ЫЛЫҠТЫРЫУ КӨСӨ

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡала халҡына, предприятие һәм ойошмалар етәкселәренә Инвестицион мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Документта Башҡортостандың баш ҡалаһы территорияһында алып барылған инвестиция сәйәсәте, өлгәшелгән уңыштар тураһында мәғлүмәт бирелде, шулай уҡ ошо йүнәлештәге эшмәкәрлектә төп өҫтөнлөктәр билдәләнде.

Атап әйткәндә, мөрәжәғәтнамәлә баш ҡалала 2013 - 2018 йылдарҙа ҡаланың инвестицион климатын булдырыу һәм инвестицион ҡеүәтен күтәреү маҡсатында ҡабул ителгән саралар комплексын тормошҡа ашырыуҙы күҙаллаған стратегия тураһында һүҙ бара. 2010 - 2016 йылдарҙа Өфөлә инвестициялар күләме 2,5 тапҡырға артып, 63,8 миллиардтан 155,2 миллиард һумға еткән. Барлыҡ финанс сығанаҡтары иҫәбенән төп капиталға инвестициялар күләме былтыр йән башына 138 мең һум тура килгән.

Өфөнөң имиджын һәм брендын нығытыу, уны донъя, Рәсәй һәм төбәк әһәмиәтендәге ҙур спорт, эшлекле һәм сәйәси саралар үткәреү буйынса Рәсәйҙең Конгресс үҙәге итеп күрһәтеү йүнәлеше буйынса ҡала хакимиәте республика менән бергә ҙур эш алып бара. Алда торған донъя кимәлендәге саралар тураһында һүҙ йөрөткәндә, Өфөнөң 2019 йылда Халыҡ-ара Йәйге балалар уйындары, 2020 йылда үтәсәк Бөтөн донъя фольклориадаһы баш ҡалаһы тип һайла-

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәй һәм Төркиә сауҙала булған сикләүҙәрҙе бөтөрҙө, тип хәбәр итә "Известия" гәзите. Ике дәүләт вице-премьерҙары Аркадий Дворкович һәм Мехмет Шимшек Рәсәй һәм Төркиә араһында санкцияларҙы бөтөрөү хаҡындағы уртаҡ белдереүгә ҡул ҡуйҙы. Документҡа ҡул ҡуйыу тантанаһында Рәсәй хөкүмәте премьер-министры Дмитрий Медведев һәм Төркиә хакимиәте башлығы Бинали Йылдырым булды.

✓Ҡала көнөндә, 12 июндә, Өфөлә "Ҡалала пикник" исемле ғаилә байрамы ойошторола. Уны үткәреү урыны итеп Башҡортостандың Урмансылар паркында барбекю зонаһы һайланған. Сара барышында шашлыҡ ҡыҙҙырыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре, балалар кейемдәре йәрминкәһен уҙғарыу ҡаралған. Шулай уҡ спорт майҙансығы, акустик сәхнә, hand made изделиелары йәрминкәһе эшләйәсәк, тип хәбәр иттеләр Өфөнөң Совет районы хакимиәтендә. Байрам көндөҙгө сәғәт 12-лә башлана.

✓Башҡортостандан "Страдл" халыҡ коллективы спорт-аэробика шоуы "Рәсәй студент яҙы" фестивалендә беренсе урынды яуланы. Гала-концерт Дәүләт Кремль һарайында үтте. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетынан сығыш яһаусы "Страдл" төркөмө "Үҙенсәлекле жанр"/ "Пластика" йүнәлешендә иң яҡшыһы булды.

✓Мәскәүҙә Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының мәҙәниәте менән таныштырыу сараһы үтте. Ижади программа Халыҡ-ара Ғаилә көнөнә арналды. Ижади осрашыуҙың ҡунаҡтары - славяндар, алтайҙар, ҡалмыҡтар, башҡорттар һәм тывалар "Башҡортостан халҡы" видеофильмын ҡараны. Уларҙы хәҙерге башҡорт ғаиләһендә ата-бабаларыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре көслө булыуы хайран ҡалдырҙы. Программаның фольклор өлөшөндә "Аҡ тирмә" ансамбле сығыш яһаны.

✓Йәй аҙағында "Ирәмәл" тәбиғәт паркы һәм "Шүлгәнташ" биләмәһендә мобиль бәйләнеш барлыҡҡа киләсәк. "Башҡортостан юлдаш телекоммуникациялары" акционерҙар йәмғиәте махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләрендә радиобашнялар төҙөй, ошо маҡсатҡа 9 миллион һум йүнәлтелгән. Артабан элемтә операторҙары төҙөлгән объекттарҙа үҙҙәренең ҡорамалдарын урынлаштырасаҡ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

**Ошо көндәрҙә бер әсәй "Бәйләнештә"ге стенаһына алты йәшлек Тамсыҡай исемле ҡыҙы менән булған һөйләшеүен яҙып элгән. Биш-алты йыллыҡ ҡына был аңғәмә тирә-яҡ мөхитебеҙ торошон бер ниндәй һандарһыҙ, тасуирлауһыҙ ҙа асыҡ итеп күҙ алдына баҫтырҙы ла ҡуйҙы! Бала телендә - хәҡиҡәт, тип юҡҡа әйтмәгәндәр бит инде. Бына ул диалог, һеҙ ҙә уҡығыҙ, ғибрәт алығыҙ унан:**



# ТАМСЫҠАЙ НИҢӘ КӨЙӨНӘ?

"Урамда китеп барабыҙ.

- Әсәй, мин ҙурайғас, урам һепереүсе булам! - тип хәбәр һалмаһынмы ҡыҙым.

- Нишләп? Ю- ю-юҡ, балам, һин йылы, таҙа, матур, аҡсалы урында эшләрһең, йәме?

- Еребеҙҙе бигерәк ныҡ ҡыйлайҙар, бысраталар бит...

- Ярай, ҡыҙым, мин һиңә ярҙам итермен, ҡыйламаҫтар.

- Ура! Икәүләп йыйыштырырбыҙмы, әсәй?

- Юҡ, мин мәктәптә балаларға өйрәтермен, сүпләмәгеҙ, тип әйтермен.

...Хәҙер Тамсыҡай, мин эштән ҡайтҡан һайын: "Уҡыусыларыңа әйттеңме, уларҙы өйрәттеңме?" тип, көн дә һорашып тора..."

Бына бит, әйләнә-тирәләге мөхитебеҙ күренеше шул дәрәжәгә етте ки, хатта алты йәшлек сабый күңеле лә уға битараф түгел: үҙгәрткеһе, йыйыштырғыһы, матурлағыһы килә донъябыҙҙы. Киләсәгебеҙ шандауы булып ишетелмәйме һеҙгә, уҡыусылар, Тамсыҡайҙың был тауышы? Ысынында иһә, сабыйҙың үҙенә күрә протест белдереүе лә бит был: ниңә ошондай бысраҡ мөхиттә, сүп-сар араһында йәшәргә тейеш һуң әле ул? Бөгөндән ең һыҙғанып, Ер шарын таҙарта башларға тонор ине лә... үҫергә кәрәк шул әле... Оят булып китте... Ә беҙ, өлкәндәр, сабыйҙарыбыҙҙың үҫкәнен көтөп ултырайыҡмы? Үҙебеҙҙең ҡул-аяҡтарыбыҙ юҡмы? Ҡурҡыныс та булып китте. Сабый күргәнде бит хатта күҙгә лә элмәйбеҙ, шул тиклем күнегелгән, күрәһең, бысраҡлыҡҡа: күҙҙәрҙе битарафлыҡ шекәрәһе ҡаплаған.

Ярай әле, барыбыҙҙы ла ғәфләт баҫмаған, ялыу яуҙырырға булһа ла булдыра ҡайһы берәүҙәр. Рәхмәт инде Өфө ҡала округы хакимиәтенә: баш ҡалабыҙҙың әле был, әле теге урындарында тау шикелле ҡалҡып сығып ҡына торған сүп-сар өйөмдәрен иҫәпкә алып, артабан уларҙы юҡ итеү буйынса "Өфө ҡалаһының экологик картаһы" тигән махсус интерактив ресурс ойоштороп ебәрҙе. Хәҙер, әлеге Тамсыҡайыбыҙ кеүек, ҡалабыҙ таҙалығы өсөн көйөнгән һәр кем рөхсәт ителмәгән урындарҙа хасил булған сүп-сар өйөмдәрен, оятһыҙ рәүештә еребеҙҙе ҡыйлаған, машинаһынан бушатып киткән айырым кешеләрҙе лә хатта фото йә видеоға төшөрөп алып, ҡалабыҙ хакимиәтенең рәсми сайтындағы www.ufacity.info/ecology исемле махсус картаһына урынлаштыра ала.

"Әлеге көндә әүҙем ҡарашлы кешеләрҙең хәбәр итеүе буйынса был картаға 28 сүп-сар өйөмө индерелгән, заявкаларҙың ҡайһылары үтәлгән дә инде, йәғни ул урындар таҙартылған. Тәртип боҙоусыларға ҡаршы бергәләп көрәшәсәкбеҙ. Ҡала халҡына, баҡсасыларға сүп-сар сығарыу тәртибен аңлатабыҙ, ҡаланы бысратыусы предприятиелар етәкселәренә ҡарата саралар күрәсәкбеҙ",- тине был аҙнала муниципалитетта булып үткән сираттағы оператив ултырыш барышында Өфө мэры Ирек Ялалов.

Әйткәндәй, әлеге проект сиктәрендә тирә-йүнде йыйыштырыу, йәшелләндереү кеүек экологик акциялар хаҡында ла заявкалар ҡалдырырға мөмкин. Йәмғәт ойошмалары, ҡала халҡы акция үткәреү урыны-ваҡытын алдан хәәбәр итһә, баш ҡаланың район һәм ҡала хеҙмәттәре уны үткәреүҙә булышлыҡ күрһәтеп, эш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итәсәк, сүп-сарҙы ташып түгәсәк.

Бынан 15 йыл элек ҡала биләмәһендә рөхсәт ителмәгән 400-ләп урында яҙ һайын сүп-сар өйөмө ҡалҡып сығыр ине. Хәҙер улар байтаҡҡа кәмене, шулай ҙа күрелгән сараларға өҫтәмә рәүештә йәмғәт контроле лә барлыҡҡа килһә, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса закон боҙоусыларға ҡарата ҡәтғи саралар ҙа күрелер ине. Шуға ла ҡала хеҙмәттәре әүҙем ҡарашлы кешеләргә тейешһеҙ урындарға сүп-сар түгеү факттары хаҡында хәбәр итеп торорға саҡырып мөрәжәғәт итә.

Шулай итеп, Тамсыҡайҙың борсолоуҙары башҡалар күңеленә лә күсһен ине лә, ижтимағи әүҙемлегебеҙ күлдәй, диңгеҙҙәй сикһеҙ йәйелеп, бөтөн бысраҡ һәм ҡый-һайҙы йыуҙырып алып китһен ине...

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

ныуын ғына килтерергә лә була. Шулай уҡ Өфө 2021 йылда - "Апимондия" Халыҡ-ара, 2023 йылда - Бөтә донъя философтары, 2025 йылда Көнсығыш һәм Үҙәк Европаны тикшереү Халыҡ-ара советының Бөтөн донъя конгрестарын үткәреүгә дәғүә итә. Бынан тыш, 2025 йылда Бөтөн донъя уйындарын үткәреүгә лә ғариза биреү планлаштырыла.

# ҮҘЕБЕҘҘЕКЕ!

Ошо көндәрҙә "Өфө ҡалаһы ҡала округы электр транспорты идаралығы" муниципаль предприятиеһы һәм "Өфө трамвай-троллейбус заводының "НефАЗ" асыҡ акционерҙар йәмғиәте менән хеҙмәттәшлеге һөҙөмтәһендә эшләнгән беренсе троллейбустың презентацияһы булды. Ул 112 кешене һыйҙыра, ултырыусылар өсөн урындар - 26.

Инженерҙарҙың эшен һәм яңы троллейбустың техник характеристикаларын баһалап, ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов: "Бөгөн трамвайҙарҙы һәм троллейбустарҙы туранан-тура һатып алыу ҡатмарлы. Был троллейбусты финанс ресурстарын экономиялау өлгөһө тиергә мөмкин. Рәсәй баҙарына сығарылған техника менән сифат йәһәтенән сағыштырып ҡарағанда ла, бер нисә миллион һумға арзаныраҡ".

Икенсе троллейбусты үҙ аллы йөрөш йыһазы менән комплектлау планлаштырыла. Былдай машина электр энергияһын ҡулланыуҙы 40 процентҡа тиклем экономиялаясаҡ. Беренсе троллейбус быға тиклемгеләренән 20 процентҡа экономиялыраҡ. Бөгөн Өфө трамвай-троллейбус заводының йылына 100 троллейбус етештереү ҡеүәте бар.

БАШ ҠАЛАМ

# ӘЙҘӘ, ВЕЛОСИПЕДТА ЙӨРӨЙӨК!

**19 майҙа Бөтә Рәсәй "Эшкә - велосипедта" акцияһы үтте. Уға, башҡа ҡалалар менән бер рәттән, Өфө лә ҡушылды. Сараның маҡсаты велосипедта йөрөү үҙенде формала тотоуҙың бер ысулы икәнен һәм уның автомобилдәргә альтернатива булыуын күрһәтеү ине. Баш ҡалала һуңғы ваҡытта был төр транспортҡа ҙур иғтибар бирелә һәм велосипедсылар өсөн уңайлыҡтар булдырылыуы тураһында күп һөйләнә. Был ысынлап та шулаймы икән? Ошо һорауға асыҡлыҡ индерергә бөгөн Башҡортостан Республикаһы Стратегик тикшеренеүҙәр институтының матбуғат секретары Ғәзиз ЙОСОПОВ ярҙам итә.**



**➔ Эшкә даими рәүештә велосипедта йөрөйһөгөҙмө, әллә акция булған көндә генә транспорт төрөн алмаштырҙығыҙмы? Ғөмүмән, ғаилә ағзаларығыҙ велосипедта йөрөүегеҙгә нисек ҡарай?**

- Йылы матур көндә ваҡытым булғанда велосипедҡа ултырырға тырышам һәм эшкә шулай йөрөйөм. Балаларымды ла ошо төр "техникаға" ылыҡтырҙым. Диләфрүз биш йәшендә "1000 велосипедсы көнө"ндә бөтөн маршрутты минең менән бергә үтте һәм артабан һәр йыл ҡатнашты. Улым быйыл ҙур велосипедта йөрөргә өйрәнде һәм дуҫтары араһында ҙур велосипедта йөрөй алған берҙән-бер малай әле.

Өйрәткәндә мин уларға баштан уҡ: "Балам, ҡолауҙар буласаҡ. Дөрөҫ йөрөргә өйрәнгәнсе, 100 тапҡыр ҡолаясаҡһығыҙ - шул һанды кәметеү һеҙҙең ҡулда. Әгәр биш ҡолауҙа өйрәнһәгеҙ, 95 мөмкинлекте отаһығыҙ!"- тинем. Нисә тапҡыр ҡолағандарҙыр, һанаманыҡ, әммә икеһе лә йөрөргә өйрәнде.

**➔ Баш ҡалала велосипедсылар өсөн барлыҡ уңайлыҡтар булдырылғанмы, әллә етешһеҙлектәр бармы, булһа, ниндәй?**

- Өфөлә бөгөн, ысынлап та, велосипедсылар өсөн күп эшләнә, тротуарҙарҙа уларҙың махсус һыҙаты бар - велоюлдар эшләнгән. Ләкин проблемалар ҙа юҡ түгел. Шуларҙың иң мөһиме - велопарковкаларҙың булмауы. Шулай уҡ велосипедсылар ҙа юлда этик ҡағиҙәләрҙе үҙләштермәгән - башҡаларға ҡамасаулыҡ тыуҙырыусылар ҙа бар. Мәскәү бер көндә төҙөлмәгән, тигәндәй, башланғыс бар, эш дауам итә - шуныһы ҡыуандыра.

**➔ Ҙур мегаполиста велосипед менән хәрәкәт итеүҙең ниндәй ыңғай яҡтарын билдәләп китер инегеҙ?**

- Велосипед, теләйһеңме, юҡмы, хәрәкәтләнергә мәжбүр итә. Йәмғәт транспорты менән йөрөһәң, туҡталышҡа тиклем сығаһың да, автобус көтәһең дә тораһың. Ә бында көтөп тормайһың, үҙеңдең "тимер атыңа" атланаһың да хәрәкәтләнәһең. Кире яҡтары ла бар, әлбиттә: машинаға ҡарағанда яйыраҡ һәм ямғырлы көндә уңайһыҙ. Ыңғай яғы - гиподинамиянан ҡотҡара, "тығын"дарҙа ултырмайһың, кәйефең һәр саҡ күтәренке була, теләгән ереңә теләгән ваҡытыңда барып етәһең.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

**Әйткәндәй, был йәкшәмбелә, йәғни 28 майҙа, Өфөлә "I bike Ufa" фестивале үтәсәк. "Ул беренсе тапҡыр "Асыҡ урамдар" форматында үтәсәк, йәғни ҡаланың үҙәге машиналар өсөн ябылып, бары тик велосипедсылар һәм йәйәүлеләр өсөн генә асыҡ буласаҡ", - тип билдәләне сираттағы оператив кәңәшмәлә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов. Билдәләнеүенсә, Зәки Вәлиди - Ғафури - Пушкин - Гоголь - Свердлов - Карл Маркс - Достоевский - Ленин - Октябрь революцияһы - Совет - Зәки Вәлиди урамдары юлдары көндөҙгө 12-нән 18 сәғәткә тиклем өлөшләтә ябыласаҡ.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сөйәл

❖ Ҡулға ҡаты сөйәл сыҡҡанда ҡулдарҙы эҫе һыуға тығып ултырып, һөртөп ҡороҡҡас, лимон ҡабығын сөйәлгә ябып бәйләргә. 4-5 көн дауаланған һуң сөйәлдең эҙе лә ҡалмаҫ.

❖ Һуған ҡабығын 2 аҙна аш һеркәһендә тотоп, шуны ҡалын итеп төнгөләккә сөйәлгә бәйләргә. Дауаны бер нисә мәртәбә ҡабатларға.

### Бит нервыһы шешһә

❖ Энәне утта ҡыҙҙырырға, тәүҙә биттең - сәләмәт, һуңынан ауырыу тиреһенә сәнскеләргә. Тире еңелсә бешеүе ихтимал, улар тиҙ үтә.

### Теш һыҙлаһа

❖ Һуған һутын һығып алырға һәм теш щеткаһы менән теш эргәһендә уртҡа һөртөргә. Көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

### Йәнегеҙ көйһә

❖ Үтә асыуланып киткәндә һаҙ еләге (клюква), лимон, ҡыяр ашағыҙ, улар тиҙ генә тынысландыра.

### Йөҙөм

❖ Кипкән йөҙөм шул тиклем файҙалы. Ул ауыҙҙан килгән еҫте лә бөтөрә, үт ҡыуығы эшмәкәрлеген дә яҡшырта.

### Быума йүтәл

❖ Тын юлдары ауыртһа, быума йүтәл булғанда 500 грамм әрселгән һәм ваҡлап туралған һуған, 50 грамм бал, 40 грамм шәкәрҙе 1 литр һыуға һалырға һәм 3 сәғәт һүрән утта тоторға. Һыуынғас, быяла шешәгә һалып ҡуйырға. Көнөнә 4-6 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Тырнаҡтарҙы нығытыу

❖ Аҙнаһына 2 мәртәбә 3 тамсы йод һәм 5 тамсы глицерин майы ҡушылған ҡатнашманы һөрөтөргә, күберәк аҡһым, тоҙ, витаминдарға бай ризыҡ ашарға кәрәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Тик Баһира Мөхәммәтте лә саҡырып индерергә ҡуша. Сөнки уны каруан түгел, ә фәҡәт Мөхәммәт кенә ҡыҙыҡһындыра. Донъяға яңы бәйғәмбәр килергә тейешлеген белә ул.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Үҫмер осоро

Мөхәммәт ун ике йәштәр тирәһендә тәү тапҡыр сәфәргә сыға. Абу Талиб олатаһы уны үҙе менән Сүриә иленә алып бара.

Уларҙың каруаны бер монастырь янына ял итергә туҡтай. Монастырҙан Баһира исемле монах сыға ла, бөтөнөһөн дә эскә инеп, ашап, ял итеп алырға саҡыра. Был күренеш ғәжәп тойола, сөнки Абу Талибтың каруандары был тирәнән үткән һайын ошо урында туҡтар булған, әммә бер монах та бер ҡасан да ғәрәптәрҙе ҡунаҡҡа саҡырмаған. Абу Талиб менән уның юлдаштары, Мөхәммәтте каруанды һаҡларға ҡалдырып, эскә үтә. Тик Баһира Мөхәммәтте лә саҡырып индерергә ҡуша. Сөнки уны каруан түгел, ә фәҡәт Мөхәммәт кенә ҡыҙыҡһындыра. Донъяға яңы бәйғәмбәр килергә тейешлеген белә ул.

Юлсыларҙы ашатып, эсергәндән һуң, Баһира Мөхәммәттән тормошо тураһында һораша башлай. Төштәрен дә һөйләргә ҡуша. Шунан һуң Абу Талиб янына килә лә, Мөхәммәтте бөйөк эҙмыш көтөүе, уны һаҡларға кәрәклеге һәм улар мөмкин тиклем тиҙерәк Мәккәгә ҡайтып китергә тейеш булыуҙарын әйтә. Абу Талиб, Баһираның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, Сүриәләге эштәрен тамамлай һала ла, юлсыларын алып, Мәккәгә ашыға.

Ун биш йәшендә Мөхәммәт оло яуҙа ҡатнаша. Һуғыш изге айҙарҙа бара һәм уны ҡинан ырыуы - ҡөрәйштәрҙең дуҫтары - башлап ебәрә. Мәккәне урап үтеп, Евфрат яғына китеп барған Йемен каруанына һөжүм итә улар. Был каруанды иһә ҡайс айлан ырыуы кешеләре һаҡлай. Каруанға һөжүм иткәндә бер нисә ғәрәп кешеһе һәләк була, ҡарымта башлана. Ҡайһы бер ырыуҙар ҡайс айландарҙы яҡлай, ҡайһылары, шул иҫәптән, ҡөрәйштәр ҙә, ҡинан ырыуын яҡлап сыға. Ҡарымта ысын һуғышҡа әйләнә.

Ул заманда ғәрәптәр сафта һуғышырға яратмаған. Дошмандар менән йөҙгә-йөҙ алышҡандар. Бындай яуҙарҙа кем кемде үлтереүе, яралауы, әсиргә алыуы, һәр кешенең батырлығы йә инде ҡурҡҡанлығы асыҡ күренгән.

Һәр ғәрәп һуғышта үҙ ирке менән ҡатнашҡан, алда әйтеп үтеүебеҙсә, бер кемдең дә ирекле һәм ғорур ғәрәпте бер нәмәгә лә мәжбүр итергә хоҡуғы булмаған. Ләкин шул уҡ ваҡытта сәбәпһеҙ көйө һуғыштан тороп ҡалғандарға хурлыҡ хәүефе янаған. Хурлыҡ иһә ғәрәптең үҙен генә түгел, ата-бабаларына ла, тоҡомдарына ла, туғандарына ла, хатта ырыуына ла ҡағылған. Шуға ла ырыуҙаштар ундайҙарҙан баш тартҡан, ситкә типкән осраҡтар ваҡыты-ваҡыты менән булғылап торған.

Һуғышҡа бай ғәрәптәр һыбай барған, еңгәндән һуңғы хәрби табышты ла ябай яугирҙарға ҡарағанда ос-дүрт тапҡыр күберәк алған. Хәрби етәксегә бөтөн табыштың дүрттән бер өлөшө тейеш булған. Яуҙа айырыуса батырлыҡ күрһәткән яугирҙарға ла өлөш башҡаларға ҡарағанда мулыраҡ бирелгән.

Мөхәммәт ҡатнашҡан яуҙа Мәккә халҡы еңә. Шул яу менән һуғыш та тамамлана. Хәрби табышты бүлешәләр, ҡайс айлан кешеләре менән, Йемен каруандары башҡаса уларҙың ерҙәре аша йөрөргә тейеш түгел, тигән килешеү төҙөлә.

Егерме йәштәр тирәһендә Мөхәммәт үҙаллы тормош башлай. Ул инде сауҙа эштәренең бар нескәлектәрен белә, ләкин үҙенең каруанын булдырырға аҡсаһы етмәй. Шуға ла ул башҡа сауҙагәрҙәргә ялланып эшләй. Уның эштәре һәйбәт бара, абруйы артҡандан-арта. Сөнки ул эшен яратып, ихлас башҡара, һүҙенә тоғро һәм бик намыҫлы кеше була.

**(Дауамы бар).**

ӨФӨ БАШҠОРТО

**Бөгөн баш ҡалала ғына түгел, хатта ауылдарҙа ла балаларҙың русса һөйләшеүе бер кемгә лә сер түгел. Күптәр быны телевизор, интернет бәләһе итеп күрә. Шул уҡ ваҡытта, баш ҡалала тыуып, тыуған теленә, мәҙәниәтенә, әҙәбиәтенә тоғро ҡалған замандаштарыбыҙ ҙа юҡ түгел. Шуларҙың береһе - журналист, музыка белгесе, ТӨРКСОЙ халыҡ-ара премияһы лауреаты Ләйлә АРАЛБАЕВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# ӨЛКӘНДӘРГӘ ҠАРАҒАНДА...

## йәштәребеҙ ойошҡаныраҡ



➔ **Әхмәр Үтәбай заманында ҡалалар тураһында "Милләттәрҙән яһай винегреттар" тип яҙғайны. Ошондай шарттарҙа нисек итеп башҡорт рухын, башҡорт телен һаҡлап ҡала алдығыҙ, ул ғына ла түгел, ике телдә лә таҙа һөйләшәһегеҙ, мәҡәләләр яҙаһығыҙ...**

- Мин Клара Ғүмәр ҡыҙы менән Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Әбделғәлим улы Аралбаевтар ғаиләһендә донъяға килгәнмен. Баш ҡаланың М. Горький исемендәге 3-сө, Н. Сабитов исемендәге 1-се балалар музыка мәктәптәрендә уҡыным. Русса ғына уҡыһам да, өйҙә бала саҡтан башҡортса һөйләштек, китаптар уҡый торғайныҡ. Атайымдың яңы яҙылған шиғырҙарының беренсе тыңлаусылары булдыҡ. Әсәйем өй эштәрен эшләгәндә башҡорт халыҡ йырҙарын йырлай торғайны. Студент саҡта милли рухты үҫтергән сараларға - "Аҡ тирмә" клубы концерттарына, байрамдарға - Башҡорт йәштәре көндәре, "Һылыуҡай" конкурсы, "Йәшлек-шоу", "Урал моңо" фестивалдәренә даими йөрөнөк.

Башҡорт әҙәби телен яҡшыраҡ өйрәнеү маҡсатынан сәнғәт училищеһында, сәнғәт институтында белем алғанда күберәк башҡортса китаптар уҡырға тырыштым, 1997 йылда музыкаль терминдар һүҙлеген башҡортсаға тәржемә иттем. Студент саҡтан уҡ "Башҡортостан", "Йәшлек" гәзиттәре, "Башҡортостан ҡыҙы", "Шоңҡар", "Тамаша" журналдары менән хеҙмәттәшлек иттем, уларҙа мәҡәләләремә баҫыла башланы. БСТ телеканалында "Музыка" бүлегендә эшләгән осорҙа ике телдә тапшырыуҙар әҙерләнем. Башҡорт телендә "Мәҙәниәт баҡсаһы", "Моңъяҙма", "Династиялар" проекттары, билдәле шәхестәр - композиторҙар Нур Даутов, Тәлғәт Шәрипов, Мөфтәдин Ғиләжев, йырсылар Асия Смакова, Вәкил Йәләлетдинов, Тәнзилә Үҙәнбаева, Флүрә Ноғоманова һ.б. тураһында телепортреттар эфирға сыҡты. Әле "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында мәҙәниәт бүлегендә эшләйем, республикалағы мәҙәни, сәнғәт, әҙәби сараларҙың уртаһында ҡайнайым, сәнғәтебеҙҙең мәшһүр шәхестәре менән аралашам.

➔ **Өфө башҡорто: уның төп сифаттары, башҡа башҡорттарҙан айырылып торған һыҙаттары нимәлә?**

- Өфө башҡорттарының уңған, тырыш, мәҙәниәтле кешеләр булыуын, балаларына белем бирергә, яҡшы кешеләр итеп үҫтерергә тырышыуҙарын билдәләгем килә. Тик беҙҙең халыҡҡа берҙәмлек, ойошҡанлыҡ етеңкерәмәй кеүек. Беҙ үҙебеҙ башҡорт яҙыусыларының, сәнғәт әһелдәренең балалары менән дуҫбыҙ, бер-беребеҙгә ярҙам итергә тырышабыҙ.

Тағы бер нәмәне әйтеп үткем килә. Яңыраҡ ике тапҡыр Ҡаҙағстанда йөрөп ҡайтырға тура килде. Унда йәшәүсе кешеләрҙең маҡсатлыраҡ, амбициялары юғарыраҡ икәненә иғтибар иттем. Улар алдарына "бөйөк" пландар, юғары маҡсаттар ҡуйып йәшәй, ә беҙҙекеләрҙең амбициялары әлегә уянып бөтмәгән кеүек. Рухлы башҡорттар араһында техник белемле белгестәр, бизнес менән шөғөлләнеүселәр әҙерәк.

➔ **Башҡортостан Республикаһы - уға исем биргән халыҡтың тыуған ере, берҙән-бер аҫаба төйөгө. Уның баш ҡалаһы ла берәү генә һәм унда ла милли рух, милли үҙенсәлек күҙгә салынып торһон өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- Баш ҡалабыҙ Өфөлә башҡорт халҡының мәшһүр шәхестәренә, халҡыбыҙҙың тарихи ваҡиғаларына бәйле ял итеү урындары, туристик объекттар күберәк булһын ине. Ҡыҙҙарым менән урамға һауа һуларға сыҡҡан саҡта бер юлы уларға халҡыбыҙҙың данлы улдары һәм ҡыҙҙары тураһында һөйләргә ятатам. Мәҫәлән, ҡала үҙәгендәге башҡорт легендаһына нигеҙләнгән "Ете ҡыҙ" фонтанына йөрөргә яратабыҙ. Шундай матур урындарҙы күберәк булдырып, Башҡортостандың баш ҡалаһына арналған яңы туристик атлас эшләргә кәрәк.

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры репертуарында - башҡорт опера һәм балеттары, кинотеатрҙарҙа - башҡорт фильмдары, симфоник оркестрҙа башҡорт әҫәрҙәре даими күрһәтелергә, яңғырарға тейеш. Был йүнәлештә эш алып барылмай түгел, алып барыла. Опера театрында "Салауат Юлаев операһы", "Сынрау торна балеты"ның яңыртылған версияларын репертуарҙың сағыу биҙәге булып тора. Әле бына бер юлы ике башҡорт режиссеры Булат Йосопов менән Айнур Аҫкаровтың яңы фильмдарын ҡарап, ҡайһылай кинәндек. Бигерәк тә "Бабич" киноһы тарихыбыҙҙы, әҙәбиәтебеҙҙе өйрәнергә, рухлы балалар тәрбиәләргә булышлыҡ итә.

Башҡорт мәҙәниәтен үҫтереү өсөн Мәскәү, Санкт-Петербург һәм сит ил вуздарында йәштәрҙе уҡытыу тәжрибәһен артабан да дауам итергә кәрәк. Заманында Мәскәү консерваторияһында уҡып сыҡҡан Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов кеүек композиторҙар, Рәми Ғарипов кеүек шағирҙар үҫеп сығыуға булышлыҡ итер ине был.

Ҡала башҡорттарының үҙ телендә әҙ һөйләшеүе йәки бөтөнләй һөйләшмәүе борсой. Өфөгә ауылдарҙан килеп төпләнгән башҡорттарҙың балалары телде белһә лә, ейәндәре онота башлай. Минең ҡыҙым әле рус мәктәбендә уҡый, өйҙә башҡортса һөйләшергә, башҡортса китаптар уҡырға тырышабыҙ.

➔ **Бөгөн ҡала башҡорт мәҙәниәте ниндәй кимәлдә?**

- Ҡалала башҡорт мәҙәниәте бигүк юғары кимәлдә түгел. Башҡорт концерттарына, башҡорт фильмдарына халыҡ аҙ йөрөй. Милли баҫмаларҙы аҙ уҡыйҙар.

Урта быуын кешеләренә ҡарағанда йәштәр ойошҡаныраҡ күренә. Йәш йырсыларҙың, диджейҙарҙың концерттарына ҡыҙҙарегеттәр әүҙем йыйыла. Йәштәр милли сәйәсәте бик яуаплы эш, улар беҙҙең киләсәгебеҙ, уларҙың тыңлаған йырҙарына, уҡыған китаптарына иғтибар итергә кәрәк. Йәштәр араһында башҡорт лидерҙарын, башҡорт телендә яҙыусы блогерҙарҙы үҫтерергә баҫым яһау зарур. Ҡараш офоҡтарын киңәйтеү өсөн йәштәрҙе күберәк халыҡ-ара форумдарға, конференцияларға делегат итеп йөрөтөргә, ҙур ваҡиғаларҙы ойоштороу эшен ышанып тапшырырға кәрәк.

➔ **Өфө башҡорттарында милли үҙаң үҫтереүҙә интернет-ресурстарҙың әһәмиәтен нисек баһалайһығыҙ?**

- Интернет-ресурстарының әһәмиәте бөгөнгө көндә ҙур, әлбиттә. Тиҙ арала социаль селтәрҙәрҙә барлыҡҡа килгән "Сит ил башҡорттары" интернет-проекты популярлыҡ яуланы, уға башҡорттар ғына түгел, башҡа милләт вәкилдәре лә ҡушылды. Ошондай проекттарҙы төрлө өлкәләрҙә эшләргә, уларға әүҙем йәштәрҙе йәлеп итергә кәрәк. Элекке заманда идеология яҙыусылар ҡулында булһа, бөгөнгә көндә идеология - социаль селтәрҙәрҙә, иң мөһим идеяларҙы улар аша таратыу мотлаҡ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА яҙып алды.**

✓ Юрматылар Ырыуҙар ташы һәйкәлен мотлаҡ ҡуйыу, Торатау тирәләй туристик комплекс объекттары төҙөү тураһындағы тәкдимде резолюцияға индереп, уны тормошҡа ашырыу хәстәрлеген күрергә тейешлектәрен билдәләнә.



ХАҠ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ

# ЮРМАТЫЛАР ҠОР ЙЫЙҘЫ

**Ағас - тамырһыҙ, халыҡ тарихһыҙ булмай. Беҙ халҡыбыҙҙың сал быуаттарға барып тоташҡан меңәрләгән йыллыҡ тарихы менән ғорурланабыҙ. Тамырҙарын, ырыуы тарихын белеү кешегә үҙен ошо ерҙең хужаһы итеп тойоу хоҡуғын бирә икәнен тойоп йәшәйбеҙ. Шуны иҫәпкә алып һәм Башҡортостандың 100 йыллығы айҡанлы үткәрелә торған саралар планына ярашлы, үткән шәмбелә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Ишембай муниципаль район хакимиәте, Башҡортостан Республикаһы Юрматы башҡорттарының төбәк йәмәғәт ойошмаһы Юрматы ырыуы йыйынын үткәрҙе.**



Билдәле булыуынса, юрматылар - башҡорттарҙың иң ҙур һәм иң боронғо ҡәбиләләренең береһе. Был ҡәбиләгә тәлтим, тәтегәс, ҡармыш, юрматы, нуғай-юрматы, мишәр-юрматы ырыуҙары ҡараған. Ҡәбиләнең тамғаһы - һәнәк, ҡошо - әтәлге, ағасы- өйәңке, ораны- Аҡтайлаҡ. Юрматы этнонимының килеп сығышы ла бик үҙенсәлекле. Билдәле этнограф Раил Кузеев юрматыларҙы төркиләшкән уғырҙар йәки боронғо мадъярҙар тип билдәләнә, икенсе гипотеза юрматылар - нигеҙҙә, боронғо төркиҙәр, улар бары уғырҙар менән аралашыу һәм ҡатнашыу этабын үткән йәки уғырлашҡан тип билдәләй. Ә өсөнсө гипотеза авторы, башҡорт һинд-герман философияһына нигеҙ һалыусы Салауат Ғәлләмов юрматыларҙы сарматтар тип билдәләй. Тимәк, юрматылар тарихы Геродот заманына уҡ барып тоташа. Бөгөн юрматылар Ишембай, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Федоровка, Мәләүез, Ауырғазы, Ғафури, Бәҡалы райондарында, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез ҡалаларында, Ырымбур өлкәһендә, Татарстанда, Венгрияла йәшәй.

Ырыуҙаштарҙы, туғандарҙы барлау, үҙ тарихын, шәжәрәләрен, батырҙарын хәтергә алыу, йәшәйешкә, уның ҡануындарына хилаф килтергән проблемаларға күҙ һалыу, аралашыу, хәл белешеү маҡсатын күҙҙә тотҡан йыйындың тәүге өлөшө Ишембай ҡала мәҙәниәт йортонда асылды. 500-ләп делегат йыйылған ҡорҙо ҡунаҡтар - Будапешт ҡалаһының Петер Пазманя университеты уҡытыусыһы, тарихсы-археолог Аттила Тюрк, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Руфина Шаһапова сәләмләне. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Вельмир Аҙнаев Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына арналған саралар тураһында мәғлүмәт еткерҙе. Тарих фәндәре кандидаты Юлдаш Йосопов Юрматы ырыуы тарихы тураһында бик ентекләп һөйләп үтте һәм: "Халыҡ үҙ тарихын мотлаҡ белергә тейеш. Тарихты юғалтыу үҙеңде, үҙеңдең асылыңды, милли йөҙөңдө юғалтыу менән бер. Үткәндәр беҙгә үткән өсөн генә түгел, бөгөнгө һәм киләсәк өсөн кәрәк", - тигән кәңәш-аҡылды тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрҙө. Мәләүез районы Үрге Юлдаш ауылы фермеры Эдуард Байсуриндың, Федоровка районы "Маяҡ" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт етәксеһе Сәғит Дәүләтбаевтың, Стәрлебаш районы Ҡабыҡҡыуыш ауылы эшҡыуары Дамир Ишембәтовтарҙың глобаллашеү, урбанизация шарттарында ауылдарҙы, ерҙәрҙе һаҡлау проблемалары тураһындағы сығыштары ла фәһемле булды.

Юрматы башҡорттарының төбәк йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Риф Иҫәнов йыйынды халҡыбыҙҙың милли идеяһы өлгөһө тип нарыҡлап, тарихҡа байҡау яһаны, 1-се һәм 2-се Юрматы ырыуы йыйыны ошо уҡ Ишембай ҡалаһында 1992 йылда оло байрам итеп үткәрелеүен телгә алды. Билдәләнеүенсә, Юрматы ырыуын ғына түгел, ғөмүмән, башҡорт халҡының ырыуҙар хәрәкәтен ойошторуусы кеше - ул күренекле яҙыусы Булат ағай Рафиҡов булды. Тап Булат ағай ырыуҙар хәрәкәтен юрматылар йыйыны менән башлап ебәреп, башҡаларға өлгө, юл күрһәтте. Әйткәндәй, хөрмәтле Булат ағай Рафиҡовҡа Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы исемен биреүҙе һорап, республикабыҙ Хөкүмәтенә мөрәжәғәт итеү тураһындағы тәкдим йыйын резолюцияһына индерелде.

Булат ағай Рафиҡов донъя ҡуйғандан һуң да был күркәм традиция - Юрматы ырыуы вәкилдәренең йыйындары дауам итте. 2006 йылдың 22 апрелендә Өфөлә үткән ҡорҙа ырыу башлығы вазифаһы Риф Иҫәновҡа йөкмәтелде. Йәмәғәт ойошмаһы вәкилдәре Юрматы ырыуына ҡараған ауылдарҙы, төбәктәрҙе барлауҙы, уларҙың бер-береһе менән аралашыуына, ырыу, ара, ғаилә шәжәрәләрен тергеҙеүгә, ерҙәребеҙҙе һаҡлауға булышлыҡ итеүҙе, ҡалаларҙа һәм алыҫ төбәктәрҙә йәшәгән юрматыларҙың тыуған яҡтар менән бәйләнешен нығытыуҙы төп бурыс итеп ҡуйҙы. Иң мөһиме, әлбиттә, йыл һайын Торатау буйына килеп, ҡорбандар салып, унда бәләкәй йыйындар үткәреп, шихандарҙы һаҡлап ҡалыу буйынса халыҡ ихтыярын белдерә йөрөү булғандыр. 2010 йылда үткән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында Торатау итәгенә Ырыуҙар ташы ҡуйырға тигән ҡарар ҡабул ителгәйне, монументаль һәйкәл торасаҡ урынға символик таш та ултыртылғайны. Әлегәсә ул проект тормошҡа ашырылмаған. Юрматылар Ырыуҙар ташы һәйкәлен мотлаҡ ҡуйыу, Торатау тирәләй туристик комплекс объекттары төҙөү тураһындағы тәкдимде шулай уҡ резолюцияға индереп, уны тормошҡа ашырыу хәстәрлеген күрергә тейешлектәрен билдәләне.




Йыйындың тәүге өлөшө Юрматы башҡорттары төбәк йәмәғәт ойошмаһының уставын, резолюцияһын ҡабул итеү, гербын, гимнын, маршын раҫлау менән тамамланды. Ойошманың етәксеһе итеп тағы ла йәмәғәт эшмәкәре, танылған эшҡыуар Риф Иҫәнов һайланды. Ырыуҙар йыйынының артабанғы йыйынды ойоштороу хоҡуғын раҫлаған ҡүсмә вымпелы мең ырыуы аҡһаҡалы, оло ғалим, яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре Рәшит Шәкүргә тапшырылды.

(Дауамы 11-се биттә).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Йәдкәр БӘШИРОВ

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### V. Бөйөк Башҡорт иле халыҡтары тураһында

Боронғо башҡорт ҡәбиләләре көнсығыштағы һәм көнбайыштағы һәм башҡа йүнәлештәрҙәге ҡәбиләләр менән ҡатмарлы этномәҙәни бәйләнешкә инә. Һундар баҫып ингәндән һуң төрөктәрҙең, болғарҙарҙың, бәшәнәктәрҙең, һары ҡыпсаҡтарҙың, монголдарҙың күп өлөшө уларҙың йөғонтоһона бирелгән саҡта башҡорттар үҙҙәренең мәҙәни һәм социаль-сәйәси тормошон һаҡлап ҡала. Бер үк ваҡытта башҡорттар үҙҙәре ҡайһы бер төньяҡ халыҡтарын йота. Башҡорт мөхитенә ҡыпсаҡтар, ҡоман-ҡыпсаҡ ырыу-ҡәбиләләре ҡушыла. Күп һанлы ҡәбиләләр башҡорт теленә етди йөғонто яһай, тел бер аҙ үҙгәреш кисереп, күпкә ҡыпсаҡлаша. Антропологик планда монголоид һыҙаттары көсәйә. Әммә башҡорттарҙың беҙҙең эраның 1-се меңйыллығына барып тоташҡан европеоид раса тибы һаҡланып ҡала, башҡорттар яҡын күршеләре ҡаҙаҡтарҙан шул яғы менән айырылып тора.

Яңы эраның 1-се меңйыллығында башҡорттарҙың Евразияның төньяғында һәм урта өлөшөндә йәшәүе башҡорттарҙың этногенезын билдәләүҙә ифрат ҙур роль уйнай. Бында этнографик материалдарҙы башҡа сығанаҡтар менән сағыштырып ҡарау мөһим. Мәҫәлән, Р.Ғ. Кузеев, көньяҡ-көнсығыш башҡорттары ҡәбиләләре ата-бабаларының беҙҙең эраның 1-се меңйыллығында Урта Азияла, дөрөҫөрәге, Һырдарья һәм Арал буйында йәшәгән, тип иҫбатлай. Гардизиның хеҙмәттәренә ярашлы, "Башҡорт хазарҙарҙың юғары ҡатламынан, ул хазарҙар менән ҡимаҡтар араһында йәшәгән, 2 мең кешелек яугиры (дружинаһы, тәнһаҡсылары - **Й.Б.**) булған..." Бында Кузеевтың Гардизи яҙмаларын нығ ҡына үҙгәрткәне асыҡлана. Артабан Р.Ғ.Кузеев шулай яҙа: "...Әммә XI быуатта башҡорттар ҡыпсаҡтарҙың төньяғында йәшәгән, шуға күрә улар бер нисек тә хазарҙар менән ҡыпсаҡтар араһында булыуы мөмкин түгел". Әммә был ваҡытта хазарҙарҙың бер өлөшө урта Волгала йәшәгән, улар Каспий һәм Арал буйы далаларынан башҡорттар еренә - урта Волгаға күсеп, хазар ханы мөрәжәғәт иткән Башҡорт ҡәбиләләре менән күрше торған. Кузеевтың боронғо башҡорт ҡәбиләләренең яңы эраның IV-VIII быуаттарында Ҡаҙағстандың көнсығышында һәм урта өлөшөндә, аҙаҡ Һырдарья, Арал буйында йәшәп, башҡорт-бөрйән этник берләшмәһен барлыҡҡа килтергән, тигән принципиаль һығымтаһы күп кенә башҡорт ғалимдарында бәхәс тыуҙыра (Р.Кузеев, 2010, 133,425-432-се биттәр). Әммә Әл Бируниҙың, Әл Мәҡсүдиҙең һәм Гардизиның мәғлүмәттәренә ярашлы, башҡорт ҡәбиләләре йәшәгән территориялар Евразияның төньяғы буйлап көнсығыштан көнбайышҡа яйлап күсенгән. Боронғо башҡорт ҡәбиләләре Себерҙә, Обь бассейнында, көнсығыш Европаның төньяғында йәшәүсе күп һанлы боронғо ырыу-ҡәбиләләрҙе ташкил иткән.

Мәҫәлән, Д.Ғ. Кейекбаевтың фекеренсә, көньяҡ Уралда иң боронғоларҙың береһе һаналған таҙлар ырыуы ерҙәре, б.э.т. V быуатта уҡ билдәле булған (Д.Кейекбаев, "Башҡорт һәм татар диалекттарын өйрәнеүҙең ҡайһы бер мәсьәләләре", 9-сы бит). Башҡорт ҡәбиләләре араһында иң боронғоһо һәм күп һанлыһы бөрйәндәр һаналған. Аҡташ батша хаҡындағы легендаға ярашлы, бөрйән башҡорттары б.э.т. 356-323 йылдарҙа Александр Македонский заманында уҡ йәшәгән. "Әрмән географияһы"нда VII быуаттың аҙағында башҡорттар "бутки", "бушки" атамаһы менән билдәле булған, тип иҫәпләй төрки халыҡтар тарихын өйрәнеүсе М.И. Артамонов.

(Дауамы бар).

***✓ Балаларҙы ситкә ебәрмәнек. Аталары, мал тотоғоҙ, донъя көтөгөҙ, ситкә йөрөмәгеҙ, тине. Тыуған ерендә кеше кәрәгерәк була. Күҙ алдындалар, ғаиләләрендәге тын алышты ла һиҙеп тораһың, кәрәк саҡта кәңәш итәһең.***



# ТЫУҒАН ЕРЕНДӘ...

## кеше кәрәгерәк була



***Ҡатын-ҡыҙ иң тәүҙә сабыр, унан һуң аҡыллы булырға тейеш. Ғаиләнең усағы ҡатын ҡулында, утын һүндермәй тотоу уның бурысы. Ир кеше лә үҙенең ғаилә башлығы икәнен белеп торһон. Бына минең бабайым кеүек. Аҡса тапты, кеше шикелле эсеп йөрөмәне, эшләне. Балаларға яҡшы тәрбиә бирә белде. Эштән арып ҡайтһа ла, атай, ҡурай уйна, тип торған балаларҙың теләгенә ҡаршы килмәй ине. Уларҙы ҡурай уйнарға ла өйрәтте. Үҙем уларҙы бейеттем, йырлаттым.***

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тәҡдиме менән Өфөлә быйыл беренсе тапҡыр Башҡорт ғаиләһе көнө үткәйне. Унда республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән матур ғаиләләр ҡатнашты. Бөгөнгө геройҙарыбыҙҙы ла унда тап иткәйнек. Йыр-моңға, бейеүгә ғашиҡ ғаилә тип, бөтөн Башҡортостан танып тора уларҙы. Баймаҡ районы Буранбай ауылынан килгән Аралбаевтарҙың иң өлкән вәкилдәре - Таңһылыу Хәбир ҡыҙы һәм Фәррәх Насип улы менән әңгәмәбеҙ ҙә ғаилә ҡиммәттәре, тәрбиә үҙенсәлектәре тураһында булыр.**

**Һеҙҙең бергә татыу ғүмер итеүегеҙгә быйыл 60 йыл тулған. Тәүге тапҡыр осрашҡан мәлегеҙҙә тоҡанған хистәр бөгөн дә йөрәкте йылытамы әле?**

**Фәррәх Насип улы:** Беҙ икебеҙ ҙә Таулыҡай ауылында тыуғанбыҙ. Мин бик иртә, өс йәшемдә генә етем ҡалғанмын. Атайымдың Буранбайҙа йәшәүсе һеңлеһе мине үҙенә тәрбиәгә алған. Апайым менән еҙнәмдең тәрбиәһендә үҫтем мин. Ҙурайып, Таулыҡайға йөрөп эшләй башлағас, апайығыҙҙы күреп ҡалдым. Уларҙың күршеләрендә беҙгә туған тейешле әбей йәшәй ине. Шул туғаныма барған булам да, велосипедым боҙолмаһа ла, шуны йүнәткән булып, ҡойма аша ҡарай ҙа ултыра инем. Үҙең өлкәнәйһәң дә, тойғолар үҙгәрмәй бит ул. Әбейем йәш сағында ла бөгөнгөләй һәйбәт, сибәр ине. Бер үкенесем дә юҡ, һәйбәт йәшәнек, балалар үҫтерҙек.

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Миңә ул саҡта 16 ғына йәш ине. Ул заманда еңгәйҙәр шәп ине бит. Ағайығыҙҙың да еңгәләре бер йыл буйына мине уға димләп йонсотто. 17 йәш тулғас, октябрь айында әйттерҙеләр. Шулай Буранбайға килен булып төштөм. Ул мәлдә апайы менән еҙнәһе өлкәнәйгәйне, уларҙы ҡараныҡ, һуңғы юлға тәрбиәләп оҙаттыҡ. Улар беренсе балабыҙҙы - ҡыҙыбыҙҙы ғына күреп ҡалдылар. Унан һуң биш улыбыҙ тыуҙы. Донъя көтөп, йәшәп алдыҡ та киттек. Бабай минән ете йәшкә өлкән, быйыл уға - 85 йәш. Бергә йәшәгәнебеҙгә лә 60 йыл тулды. Татыу йәшәнек, бабайым һәйбәт булды.

**Аралбаевтар ғаиләһендә бала тәрбиәләүҙә ниндәй алымдар төп урынға ҡуйыла?**

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Һәр кем үҙенсә тәрбиәләй инде балаһын. Беҙ балаларҙы гел иғтибар үҙәгендә тоттоҡ, бер ҡасан да колхоз эшен дә, донъя мәшәҡәттәрен дә уларҙан өҫтөн ҡуйманыҡ. Бабай үҙе эшлекле булды, йорт-ихаталағы ир-ат эшен үҙе эшләне, малайҙарға ла өйрәтте. Беҙҙең уландар, аталарына оҡшап, нимәгә тотонһа ла, эшләй белә, шөкөр.

**Фәррәх Насип улы:** Эйе, балалар эштең рәтен белә. Йәй булһа, бесән эшләйбеҙ, мал тотҡас, башҡа мәшәҡәттәр ҙә байтаҡ була. Эшләп үҫкән бала бөтөнләй башҡа инде, ул тормошта үҙ урынын да тиҙ таба. Ҡулына эш тейҙермәй тәрбиәләнгәндәр ҙә бар бит, был дөрөҫ түгел, тип иҫәпләйем. Бар балаларыбыҙға ла өй һалдыҡ, был эштәрҙе лә бергәләп атҡарҙыҡ.

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Хәҙер заман еңелләште, элекке кеүек, ҡул менән эшләмәйҙәр. Элек электр бысҡылар булманы, үҙебеҙҙең өйҙө һалғанда төнгө икегә тиклем арҡыры бысҡы менән ишектәр уйғаныбыҙ хәтерҙә һаман да. Хәләл көсөбөҙ менән тапҡанға донъябыҙҙың ҡәҙерен дә беләбеҙ. Фәйезем, бишенсе балам ете айлыҡ ҡына ине ул мәлдә, шулай булһа ла бала ҡосаҡлап ҡына ултырманыҡ беҙ, бар эштә лә ярҙамлашырға тырыша инем. Малайҙарҙы ла эшләттем. Бабай башта колхозда балта оҫтаһы булып йөрөнө, һуңынан 13 йыл Буранбайҙа оператор булды, машина менән һыйыр һауҙырҙы. Балалар күберәк минең ҡарамаҡта булды. Малайбыҙ, тип торманылар, иҙән дә йыуҙылар, мунсаһын да яҡтылар. Ныҡ ышанғанмын инде, эшләгән эштәренә ҡыҫылып йөрөмәнем. "Әсәй, мунса төшөрлөкмө икән, барып ҡара", - тип әйткәс кенә барып ҡарай торғайным. Үҙем шәл бәйләй инем һатыуға, балаларҙы күтәрергә аҡсаһы ла кәрәк бит. Һыйыр ҙа һауҙылар, тик кешегә әйтмә, ти инеләр, ауыл ерендә халыҡ һөйләй һалып бара бит кешене. Көйәнтәләп һыу ҙа ташынылар. Иң мөһиме, аталары менән бер һүҙле булдыҡ. Балалар үҙҙәре лә ғәләмәт иплеле булдылар, Аллаға шөкөр, быны бөтөн ауыл күреп тора.

**Һеҙҙең балаларығыҙ башлыса үҙегеҙҙең эргәгеҙҙә, бер ауылда йәшәйҙәр, бының да үҙенә күрә берәй әтнәкәһе бармы?**

**Фәррәх Насип улы:** Буранбайҙа өс улыбыҙ йәшәй: Фәнүр, Фәттәх, Фәрит. Ике улыбыҙ, ҡыҙыбыҙ Шүлкә ауылында мәктәптә уҡытты. Улар уҡып ҡайтҡас та Шүлкәгә эшкә барғайнылар, шунда нигеҙләнделәр, шул мәктәптән хаҡлы ялға сыҡтылар.

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Балаларҙы ситкә ебәрмәнек. Аталары, мал тотоғоҙ, донъя көтөгөҙ, ситкә йөрөмәгеҙ, тине. Фәттәх уҡып сыҡҡас, һөнәре буйынса Баймаҡта интернатта эшләне бер мәл, ҡурайҙан уҡытты. Бер ваҡыт Баймаҡҡа быларҙың йәшәп ятҡан еренә килһәм, өйҙәре һыуыҡ, эштән бушамайҙар, донъя көтөү ҡайғыһы юҡ. Эсем бошоп ҡайттым да, балаларҙы ҡайтарырға кәрәк, тинем бабайға. Эшләгән ерҙәре бар, йөрөһөндәр, тигәйне лә аталары, уның һүҙенә ҡарамай, ҡайтарып алдым ауылыбыҙға. Сумкалап тамаҡ ташып ашау арыумыни? Өй һалыштыҡ, ситкә ебәрмәнек береһен дә.

**Фәррәх Насип улы:** Тыуған ерендә кеше кәрәгерәк була. Күҙ алдындалар, ғаиләләрендәге тын алышты ла һиҙеп тораһың, кәрәк саҡта кәңәш итәһең. Балаларҙы өйләндереп сығарып ебәреү менән эш бөтмәй, уларға гел терәк булырға кәрәк. Биш улыбыҙ ҙа әрмелә хеҙмәт итте, бөтәһе лә уҡыу йорттары тамамланы. Үҙебеҙ уҡый алмағас, уҡыттыҡ, икәүһе техникум, дүртәүһе университет бөттө. Тик йәшәргә үҙ ерҙәренә ҡайттылар.

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Килендәр ҙә һәйбәт, берәүһе - Силәбе өлкәһенән, берәүһе - Күгәрсен, береһе - Ауырғазы, икәүһе Баймаҡ районынан. Аллаға шөкөр, бер ниндәй тауыш-тын сығармай, матур йәшәйҙәр. Килендәрҙе үҙ ҡыҙыңдай, хатта унан да яҡыныраҡ күрергә кәрәк. Егеттең ата-әсәһе - ҡайны менән ҡәйнә киленде тартып торһа, дөрөҫө шул була. Әйткәнде тыңлайҙар, ҡайным-ҡәйнәм тип кенә торалар. Тыңлағанға ла шулай һәйбәттәр.

**Ғаиләлә ир һәм ҡатын-ҡыҙҙың урыны нисек бүленә, тип уйлайһығыҙ?**

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Ҡатын-ҡыҙ иң тәүҙә сабыр, унан һуң аҡыллы булырға тейеш. Ғаиләнең усағы ҡатын ҡулында, утын һүндермәй тотоу уның бурысы. Ир кеше лә үҙенең ғаилә башлығы икәнен белеп торһон. Бына минең бабайым кеүек. Аҡса тапты, кеше шикелле эсеп йөрөмәне, эшләне. Балаларға яҡшы тәрбиә бирә белде. Эштән арып ҡайтһа ла, атай, ҡурай уйна, тип торған балаларҙың теләгенә ҡаршы килмәй ине. Уларҙы ҡурай уйнарға ла өйрәтте. Үҙем уларҙы бейеттем, йырлаттым. Яңы йыл байрамына өйгә шыршы ҡуябыҙ. Балалар менән уның тирәләй йырлап өйөрөләбеҙ, һинән оялалар, тип, аталарын да бергә төшөрәм. Байрам һайын йырлатып, маҡтап, күңелдәрен үҫтерә инем. Өлкән малай фото төшөрөү менән мауыҡты. Фәнүрҙе бәләкәй сағында Артекка ебәрҙек. Аҡса наҡыҫ, шулай ҙа күңелен һүрмәнек баланың. Ейән-ейәнсәрҙәрҙе лә ҡараштым. Фәттәхтәр Германия менән Италияға гастролдәр менән барҙы, уларҙың 8 айлыҡ ҡына сабыйҙарын алып ҡалдым. Ике өйҙөң һыйырын һауып, 20 көн көттөм шул баланы. Бер йылы йәй 12 баланы алып ҡалып, үҙҙәрен Шүлгәнгә ебәрҙем. 2 көн йөрөп килделәр ял итеп. Икенсе йылына беҙ үҙебеҙ йөрөп килдек.

**Йыр-моңға ғашиҡ ғаилә тип тә беләбеҙ һеҙҙе. Был һәләт балаларға кемдән күскән?**

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Мин үҙем янғыҙ бейеүҙәр башҡара инем. Бабай инде тотош ил буйлап ҡурай уйнап йөрөнө, йырланы ла. Мин 6 бала менән донъя көтөп ҡалам, ул тәүҙә 1 ай буйына Өфөлә әҙерләнеп ята, һуңынан 1-әр айға Ленинградҡа, Мәскәүгә китәләр ине.

**Фәррәх Насип улы:** 1969 йылда Ленинградҡа, унан һуң Кронштадҡа барҙыҡ, Мәскәүҙә лә булдыҡ. Күршелә бер бабай булды, ул Буранбай сәсәндең нигеҙендә йәшәне. Ҡурайсы ине, атаһы ла ҡурайсы булған. Бергә эшкә йөрөй инек. Кис етһә, усаҡ яғып ебәрәбеҙ ҙә, бабайҙар кем уҙарҙан ҡурай уйнай инеләр. Беҙ тыңлап ултырабыҙ. Шулай ҡурай уйнарға өйрәнеп киттем. Бер мәл, БАССР-ҙың 50 йыллығына Мәскәүҙән Үҙәк Комитеттан Кириенко тигән кеше килгәйне, шул ваҡытта ҡурай моңон оҡшатҡан һәм ҡурайсыларҙы Ленинградҡа саҡырып ҡайтты. Арыҫлан Мөбәрәков, Хөсәйен Әхмәтов кеүек билдәле шәхестәр, Хеҙмәт, Советтар Союзы Геройҙары, әртистәр тотош бер эшалон булып барҙыҡ. Тәртип көслө ине, ай-һай! Финляндия менән сиктәр асыҡ, гәзиттәрҙә яҙылғандарҙан тыш, башҡа бер нәмә лә һөйләргә ярамай, тип төндәр буйы өйрәтеп сығалар ине. Хатта, тәрилкәгеҙҙе ҡырып ултырмағыҙ, төбөндә ике ҡалаҡ аш ҡалһын, тип, этикетҡа ла өйрәтә инеләр. Әүәле дәүләт концерттары Башҡорт опера һәм балет театрында үтер ине, пропуск менән генә, ер аҫтынан алып барып индерәләр ине. Бөгөн был театрҙа ейәнебеҙ Иҙел Аралбаев эшләп йөрөй. Бына бит ул быуындар бәйләнеше нисек!

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Ата-әсәһе булмағас, бала сағында бер нәмә лә күрмәгән, тип, бер үҙемә донъя көтөүе ауыр булһа ла, бабайҙы ҡайҙа саҡырһалар ҙа ебәрә инем. Туғандарым, атай-әсәйем ярҙам итте.

**Бөгөн сәхнәгә ғаиләгеҙҙән бер юлы нисә кеше сығара алаһығыҙ икән, һанағанығыҙ юҡмы?**

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Балаларым бөтәһе лә әртис, аяҡҡа баҫҡанынан, имгәкләп йөрөгәненә тиклем. Бәләкәстән өйрәтеп, башҡортса йырлатып-бейетеп үҫтерәбеҙ бит беҙ ула-

✓ *Мәүлит Ямалетдиндың Ҡөрьәнгә был шиғри аңлатмаһы бер үк ваҡытта телебеҙҙең барлыҡҡа килеүе, унын бай йөкмәткеле стилистикаһының формалашыуы тураһындағы ғилми хеҙмәт тә булып тора.*

рҙы. Икебеҙ ҙә дәртле булдыҡ, ҡандан да күсәләр. Баланы иҫ-һеҙ сағында өйрәтеп ҡалырға кәрәк, иҫ инһә, сәхнәгә сығырға ояла бит ул.

**Фәррәх Насип улы:** 18 ейән-ейәнсәребеҙ бар - 9 ҡыҙ, 9 малай. Бөтәһе лә эшкинде, кәләш алып, кейәүгә бирергә генә кәрәк. 5-һе Өфөлә әртис булып йөрөй. Әртис һөнәр түгел ул, тимәйбеҙ. Үҙҙәренең бәхете булһа, намыҫлы булһалар, юғалып ҡалмаҫтар. Иң тәүҙә тәртип кәрәк. Уҡыуға киткәндәрендә, тәртипле йөрөгөҙ, сәңгелдәк күтәреп ҡайтып ҡуймағыҙ, тип әйтеп ебәрә инем. Тәптипле булдылар, шөкөр.

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Баланы тыйыу кәрәк. Ейәндәргә гел ҡабатлап ултырам, буласаҡ килендәрҙе һайлап ҡына алығыҙ, уларҙы мотлаҡ беҙгә килтереп күрһәтегеҙ, тип. Ҡартаталары ла шуны уҡ ҡабатлай. Ҡыҫылмағыҙ, тимәйҙәр, тыңларҙар, тип ышанам. Ейәндәрем сер йәшермәй минән. Башҡа милләттән килен ала күрмәгеҙ, ҡара башҡорттан алығыҙ, тием. Һау саҡта быны ныҡлап әйтеп ҡалырға кәрәк. Башҡа милләткә барыһығыҙ ҙа, үкенерһегеҙ, ғүмер буйы иларһығыҙ, тип ныҡ итеп әйтәм. Кешене ҡәҙер итегеҙ, фатиха, рәхмәт алып йөрөгөҙ, ярҙамсыл булығыҙ, тип тә тыҡыйым. Бәпәйҙәрем тыңлай беҙҙе. Нисекһегеҙ, тип йүгереп килеп етәләр. Өфөгә китергә булһалар, һөрлөгөшөп килеп инеп, хушлашып китәләр.

**Заман да, ата-әсәләр ҙә үҙгәрә, тамағы туҡ, өҫтө бөтөн булһа, шул еткән, тигән фекерҙә булыусылар ҙа, балаларына ҡырыҫыраҡ булғандар ҙа бар. Һеҙ был йәһәттән ниндәй ҡараштa?**

**Таңһылыу Хәбир ҡыҙы:** Мин наҙ йәлләмәйем, ҙурҙарын да арҡаһынан шапылдатып һөйөп, битенән үбеп алам. Берелһен дә ситкә типмәйем. Бер юлы дүртәүләп килеп инәләр икән, ҡайһыныһын башлап ҡосаҡлап һөйөргә белмәйем. Хәҙер инде мал көтмәйбеҙ, балаларыбыҙ эргәбеҙҙә генә. Аҡтан өҙмәйҙәр. Ауылда халыҡ шул мал көтөп йән аҫырай инде. Эш эҙләп, Себер киткәндәре лә бар, бына был насар хәл, тип иҫәпләйем. Сөнки ир ҡулы теймәгәнлектән, донъя туҙа, ялына ҡайтҡас, аҡсаһын эсеп бөтөп, кире китергә кешенән юллыҡ аҡса һораусылар ҙа юҡ түгел. Атай кеше баланың эргәһендә булырға тейеш. Бала атайҙан үрнәк тә, аҡыл да ала...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына шулай халҡыбыҙҙың боронғо йолаларына һәм ҡиммәттәренә таянып йәшәй Аралбаевтарҙың ғаиләһе. Бигерәк тә уларҙың, кеше тыуған еренә кәрәк, тигән аҡылы күптәргә фәһем булһын ине. Төпкөл тигән төшөнсә юҡ ул, теләк булғанда, ҡайҙа ла гөрләтеп донъя көтөргә була. Аралбаевтарҙың күркәм ғаиләһе быныӊ асыҡ миҫалы.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# ШИҒРИӘТЕБЕҘ...

## үҙ асылына ҡайта

**Үткән йомала М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында күренекле шағир, прозаик, тәржемәсе, йыраусы Мәүлит Ямалетдиндың "Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма" китабының исем туйына арналған "Рухи хазина" исемле кисә булып үтте. Кисәне Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты театр коллективы менән берлектә ойоштороҙо. Тамашаның режиссеры - Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев.**





Кисә Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты вәкиле Әхмәт Әхмәровтың сәләмләү һүҙе һәм фатихаһы менән башланып китте. Артабан драма театры актерҙары берәмләп, икешәрләп, дүртәүләшеп сәхнәгә сығып, Мәүлит Ямалетдиндың Ҡөрьән сүрәләренә яҙған шиғри аңлатмаларынан өҙөктәр һөйләне. Һәр сығыштың аҙағынан дин, Аллаһы Тәғәлә тураһында йырҙар, темаға ярашлы концерт номерҙары яңғыраны.

Ҡөрьәндең төрлө йөкмәткеләге һәм формалағы аңлатмалары, тәфсирҙәре бихисап. Ә бына Изге китабыбыҙ был рәүешендәге аңлатмала тәүге тапҡыр яңғыраны һәм, әйтергә кәрәк, тамашасының күңеленә хуш килде. Ул аңлатма китапҡа һалынған дөйөм йөкмәткенең меңдән, миллиондан бер өлөшөн тәшкил иткән хәлдә лә, уның сикһеҙлеген асырға ынтылыу әсбабы булараҡ әһәмиәтле. Тап шуның өсөн дә Мәүлит Ямалетдин был хеҙмәтен "Ҡөрьәндең тәржемәһе" тип түгел, ә "аңлатмаһы" тип атаған да инде. Әгәр ҙә башҡорт уҡыусыһы Изге китаптың үҙ телендәге ошондай шиғри аңлатмаһын тыңлап хушлана, һөҙөмтәлә дин юлына килә икән, тәржемәсе үҙ маҡсатына өлгәште тигән һүҙ. Кисәгә килеүселәрҙең өс сәғәт һуҙымында шиғри аңлатмаларҙы тын да алмай тыңлауы һөҙөмтәнең тап шулай булырына шик ҡалдырмай.

Әгәр ҙә кешегә шағир һәләте бирелһә, был мотлаҡ Хоҙайҙың ғына хикмәтле бүләге һәм был һәләткә эйә булыусы иң беренсе нәүбәттә шул һәләтен Уға бағышларға, йәғни Аллаһҡа дан йырларға бурыслы. Тап шуның өсөн дә беҙҙең халыҡта шағирлыҡ менән диндарлыҡ икеһе бер бөтөн төшөнсә итеп ҡабул ителгән. Бының аныҡ миҫалы - күп һандағы суфый шағирҙарҙың булыуы. Бер Аҡмулла үҙе генә лә ни тора. Шуға күрә лә Мәүлит Ямалетдиндың шиғри аңлатмалары барлыҡҡа килеүен башҡорт шиғриәтенең үҙ асылына ҡайта башлауының гүзәл бер өлгөһө итеп нарыҡларға тейешбеҙ. Быға тиклем халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың хәҙистәрҙе шиғри юлға һалыуы ла тап шул күренеш тип аталырға хаҡлы.

Йәш быуын вәкилдәре Мәүлит Ямалетдиндың Ҡөрьәнгә шиғри аңлатмаһын уҡығанда китапты Ҡөрьәндең үҙе тип түгел, фәҡәт аңлатмаһы тип ҡабул итеүе мөһим. Мин иһә аңлатмаларҙы уҡығас, шундай һығымталарға килдем:

**Беренсенән.** Әгәр ҙә донъялағы барлыҡ ағастарҙы ҡырҡып, уларҙан ҡәләм яһап, барлыҡ һыуҙарҙы ҡара итеп манып яҙһаң да, Ҡөрьәндең йөкмәткеһен асып бөтөп булмаясаҡ, тип әйтелә бер ғилми китапта. Әгәр ҙә туған телебеҙ ошондай сикһеҙ мәғәнәгә һыйған йөкмәткене асыуға булышлыҡ итә икән, был башҡорт теленең һәм уны ижад иткән халыҡтың меңәрмеңәр йылдар һуҙылған тарихи тәжрибәһе барлығын, телебеҙҙә һәм халҡыбыҙҙа сикһеҙлеккә тиң мәғәнәүи көс булыуын аңлата. Беҙ Ҡөрьәндең туранан-тура тәржемәләрен уҡыған саҡта китапҡа һалынған тулы йөкмәткене күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Был Изге китаптың образлы теленән, һүҙҙәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең, һөйләмдәрҙең, ваҡиғаларҙың күп мәғәнәләргә эйә булыуынан да килә торғандыр. Аңлайышлыраҡ булһын өсөн "баҫма" һүҙен генә алайыҡ. Уның нигеҙендә бойороҡ һөйкәлешендәге "баҫ" тамыры ята. Әгәр ҙә беҙ ошо тамырҙан барлыҡҡа килгән исемдә, йәғни йылға аша һалынған "баҫма"ны һәм матбуғат "баҫма"һы мәғәнәләрен тикшерә башлаһаҡ, был һүҙҙәр этимологияһының һәм шул һүҙҙәрҙе ҡулланып һөйләшкән халыҡтың меңәр йыллыҡ тарихына шаһит булабыҙ.

**Икенсенән.** Халыҡтың тарихын аңлар өсөн иң тәүҙә уның туған телен өйрәнә, тиҙәр. Мәүлит Ямалетдиндың Ҡөрьәнгә был шиғри аңлатмаһы бер үк ваҡытта телебеҙҙең барлыҡҡа килеүе, уның бай йөкмәткеле стилистикаһының формалашыуы тураһындағы ғилми хеҙмәт тә булып тора. Унда быуаттар һуҙымында еребеҙҙе, динебеҙҙе, телебеҙҙе һаҡлап изге яуға күтәрелгән атай-олатайҙарыбыҙҙың ораны ла, аттар кешнәүе лә, сабыйҙар илауы ла, ҡатын-ҡыҙҙар сеңләүе лә, сәсәндәр һамағы ла, ҡурай моңо ла ишетелә. Ул тауыштар, ул моңдар кисәлә лә ишетелде.

**Өсөнсөнән.** Үҙ тәғлимәтен аңлатыуға, таратыуға һалған фиҙаҡәрлеге өсөн Аллаһы Тәғәлә үҙенең сикһеҙ ҡөҙрәте менән башҡорт теленә, уны ижад иткән халыҡҡа мәңгелек ғүмер һәм мәрхәмәт итеп сауабын ҡайтарыр. Быйыл үҙенең елле юбилейын билдәләгән күренекле шағирыбыҙ, сәсәнебеҙ Мәүлит Ямалетдин да шундай уҡ сауапҡа эйә. Иншалла!

Шулай уҡ ошо китапты донъяға сығарыуҙа оло фиҙаҡәрлек күрһәткән Ҡадурий һәм Минзәлә Фазлетдиновтарға ла был сауап. Иншалла!

Мин уларға ошо шиғырымды бағышланым:

*Һеҙгә ҡарап ҡына белеү мөһим*
*Үтер ғүмерҙәрҙең ҡәҙерен.*
*Егәрле лә еңгәйебеҙ менән*
*Мәшһүр ағайыбыҙ Ҡадурий.*
*Матур эштәр эшләнә ул, беләм,*
*Күңелдәрҙә тыуһа матур уй.*
*Матурҙарҙан-матур Минзәлә лә,*
*Батырҙарҙан-батыр Ҡадурий.*
*Йә, әйтегеҙ, ерҙә мәсеттән дә,*
*Күркәм йорттар бармы, матур өй?*
*Хоҙайға өй һалып, сауап алған*
*Минзәлә лә менән Ҡадурий.*
*Илебеҙҙә әле күпме ирҙәр*
*Эшһеҙлектән йонсоп "ауырый"...*
*Күпме йәнде эшле-ашлы иткән*
*Минзәлә лә менән Ҡадурий.*
*Әлдә барһың әле, Аллам, тиеп*
*Яҙыр ине мәгәр Ғафури.*
*"Ететау"ҙа күрһә йөрәгәнен*
*Минзәлә лә менән Ҡадурий.*
*Был уларға мәдхиә лә түгел*
*Һәм түгел дә мәгәр попурри.*
*Исемдәре - халыҡ йөрәгендә:*
*Минзәлә лә менән Ҡадурий.*

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Кисәнең аҙағында быйыл 70 йәшен тултырған күренекле шағирыбыҙ, шиғри аңлатмалар авторы Мәүлит Ямалетдинды тәбрикләү һүҙҙәре әйтелде. Башҡортостан Яҙыусылар союзы исеменән Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәҙим Аралбаев, яҡташтары исеменән Мансур хәҙрәт Әлтәпов ҡотлау һүҙҙәре әйтте. Әхмәт хәҙрәт Әхмәров Рәсәй мосолмандары Диниә назараты баш мөфтөйө исеменән ҡотлап, юбилярға "Әбү Бәкер разыяллаһу әнһү" дәрәжәһендәге "Әл-Иғтисам"-"Берҙәмлек" миҙалы тапшырҙы. Китапты сығарыуҙа, мәсеттәр төҙөүҙә фиҙаҡәрлек күрһәткән Ҡадурий менән Минзәлә Фазлетдиновтар ҙа шундай уҡ миҙалға лайыҡ булды. Театр актерҙарына, кисәнең режиссерҙарына "Ҡөрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма" китабы бүләк ителде.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

Ишек тауышына ул башын ҡалҡытты, ауыҙ-тирәһен һөртөп алды:

- Ҡалай оҙаҡланың, - тип мығырланы асыуыҡ ғына.

Ҡатын ауыр итеп көрһөндө:

- Алты фуфайкы тулмай, дядя Костя, ней булыр - аптырайым...

Шофер яңы уянды:

- Нисек тулмай?! Ҡайҙа булған?

- Белмәйем. Юҡ, тулмай.

Йәш ҡатын менән ҡарт урыҫ текәлешеп ҡалды. Шунан бер ауыҙҙан ҡысҡырып ебәрҙеләр:

- Симешкә һатыусылар!

- Вәт, мискәләр! Суҡынғандар! Мин аларҙың... - тип ҡатлап-ҡатлап һүгенде ҡарт.

Хәтирә иһә бөтөнләй бәлшәйеп төштө. Өс биҙрә симешкәгә алданып, ҡандай хурлыҡҡа төштө!

Ҡалған юлда икеһе лә ҡаты уйҙа булды. Иптәше ни кисергәндәр, Хәтирә ҡайтып еткәс, директорға бөтәһен дә аңлатып, асыҡлыҡ индереренә ышанды. Хәҙер ул барыһын да түкмәй-сәсмәй һөйләп бирер, уны тыңларҙар.

Детдом территорияһына килеп ингән машинаны хәрби кейемдәгеләр ҡаршы алды. Һаман да әле хәүеф тоймаған ҡатын кабинанан сығып баҫыуға, йүгерешеп килеүсе директор менән бернисә тәрбиәсе күренде. Хәтирә лә уларға уҡталғайны ла, ҡаршыһына килгән хәрбиҙәр уға урынында ҡалырға ишараланы. Был ни хәл? Нимә булып киткән бында? Шулай уйлап өлгөрмәне, бер хәрби килеп йөҙөнә туп-тура ҡарап сатнатып һалды:

- Гражданка Ишмөхәмәтова, совет власы милкен юғалтҡан өсөн һеҙ ҡулға алынаһығыҙ! Ҡағыҙҙарығыҙҙы тапшырығыҙ ҙа, беҙҙең машинаға үтегеҙ! - тип ҡойма буйында ултырған ҡара УАЗ-икка эйәк ҡаҡты.

Ишеткәндәренән баҫҡан ерендә таш булып ҡатты ла ҡуйҙы ҡатын. Ней һүҙ әйтә, ней ҡыбырлай алманы. Уның хәлен күреп торған НКВД-шник директорға ҡулын иҙәне, йәнәһе, кил, ал. Директор ҙа ҡамыр хәленә ингәйне. Яй ғына атлап килеп, Хәтирәнән ҡағыҙҙарҙы алды. Икеһенең шаңҡыған ҡараштары осрашты. Оло ҡатын ҡағыҙҙарҙы алғанда иплəп кенә йәшенең ҡулын ныйпаны. Йәлләүе лә, сараһыҙлығы ла, ҡурҡыуы ла ошо бер ҡағылышта ине уның.

Хәтирәне алып киттеләр. Ике яҡтан ике конвой менән. Бар ғәм алдында. Хас та халыҡ дошманы кеүек итеп. Уның шул иң ҡото осҡаны ла ихатала аңшайышып ҡарап ҡалғандарҙың уны халыҡ дошманы тип уйлап ҡуйыуы ине. Эстән: "Юҡ! Марина Григорьевна! Файза апай! Галя! Сания! Мин халыҡ дошманы түгел!" - тип асырғанып ҡысҡырҙы ла, тик ауыҙын ғына аса алманы.

Уны шулай күҙҙәрен киң асып ҡатҡан хәлендә бер һаҡтан икенсеһенә, унан өсөнсөһөнә тапшырҙылар. Һәр бер һаҡ шатыр-шотор килтереп тимер ишектәрҙе асып индерҙе. "Стой! Иди! Стой! Иди!" тигән бойороҡтар мейеһенә үтеп инеп, аңын томаланы. Инде уйлай ҙа алмай ине ҡатын. Һуңғы һаҡсы уны халыҡ менән шығырым тулы булған камераға төртөп индерҙе лә, артынан шалтыратып йоҙаҡ һалып та ҡуйҙы. Ишек тупһаһынан ары китә алмай, устарын күкрәгенә ҡаушырып ҡыҫҡан килеш, ҡарашын күтәрә лә алмай тора бирҙе һаман шунда. Эстәгеләрҙең барыһы ла уға төбәлгән һымаҡ ине. Уны тикшереп, баһалап ҡарап торалар, һәр берәһе ниндәй ғәйеп менән килеүен беләләрҙер кеүек тойолдо. Ояттан үлеп булһа икән! Ниңә шунда, теге мәл, трамплиндан һикергәндә, балаһы менән ҡуша үҙе лә үлеп кенә ҡуймаған? Тора торғас аяҡтары талды, ҡурҡыу ҙа хәлен ныҡ алған. Ни булһа ла булыр, тип, иплəп кенә күҙен күтәрһә... уны күргән дә әҙәм юҡ әллә? Оло камерала шығырым булған ҡатын-ҡыҙ һәр кем үҙ мәшәкәте менән мәшғүл. Берәүҙәре оҙон өҫтәл артында тимер көрәшкәләрҙән нимәләр эсеп, тын ғына үҙ-ара гәпләшә, икенселәре өйкөм-өйкөм булып иҙәндә ултырып, баш тәрәшеп тигәндәй серләшә, өсөнсөләр үҙ уйҙарына батҡан, кемдәрелер алам-һаламға төрөнөп ятып тора. Ишеккә яҡыныраҡ ултырған бер ҡарасман ҡатын шулай ҙа иғтибар иткән икән. Хәтирә уның яғына башын бороға эргәһенә әйҙәп күрһәтте: кил, ултыр. Аяҡтарын саңғы шылдырған кеүек итеп саҡ шылдырып килеп ҡоланы тегенең янына.

Күңеле килгәндән түгел, ә шулай һендерелгәнгә көсәнеп сырайын яҙып шыбырланы:

- Һаумыһығыҙ...

Сикәләре эскә батып, күҙҙәре өңөрәйгән ҡатын унан ун-ун биш йәштәр тирәһенә өлкәндер. Ирендәре ярғыланып ҡанап, шул һыҙыҡтарында ҡандары уҡмашып тора.

Ҡатын сәләмде ҡабул итеп яуапламаны, бары тик баш ҡына ҡаҡты. Унан яйлап ҡына Хәтирәнең йөҙөн, кейемен, ҡулдарын текәлеп ҡарап сыҡты. Шул ҡәҙәр ҙә зарлы ҡарашты күргәне юҡ ине әле уның. Ҡаҡса йөҙөнә һап-һары һағыш уйылған да ҡуйған. Ул күҙ алмаларынан түгелеп, эргә-тирәне тулыһынса хәсрәткә күмгәндәй. Хәле минекенән дә ауырыраҡ кеше бармы икән ни, тип уйланы Хәтирә.

- Исемең нисек? - ниһайәт, яңы танышы телгә килде.

- Хәтирә...

- Мин - Сара. Нимә өсөн?

- Өфөнән алып ҡайтҡан тауарым тулманы. Уларҙы минән симешкә һата барған мәрйәләр урланы, беҙ...

- Кәрәкмәй. Һөйләмә уныһын. Берәүгә лә һөйләмә. Допроста бигерәк тә.




Хәтирә аңлай алманы, Сараға эйелә биреп шыбырланы:

- Нисек инде? Алайһа ҡалайтып аҡланам?

Сара әсенеп кенә йылмайғандай иткәйне, бөтөшә барған яраһы йыртылып, тағы ла ҡаны күренде:

- Бында эләккәс һине берәү ҙә аҡламаясаҡ. Улар һинең ғәйепле булыуыңды иҫбат итәсәк кенә. Һәм ни тиклем тиҙерәк улар теләгәнсә һөйләй башлаясаҡһың, шул тиклем ыҙаларың йәнәтерәк үтәсәк.

- Ҡалай ул? - Хәтирәгә Сараның һөйләгәндәре ҡатмарлашҡандан ҡатмарлаша барғандай тойола.

- Аңларһың. Мәле етһә... аңлатырҙар.

Артабан һөйләшмәнеләр. Һәр кем үҙ уйына сумып, шул урындарында һеңгәҙәп ултырып энерҙе ҡаршыланы. Ҡараңғылыҡ ҡуйырып, күҙгә төртһәң дә күренмәй башлағас, "зың-ң" иткән тауыш ҡолаҡтарҙы сыйып үтте лә, камерала бер-бер артлы лампочкалар тоҡанды. Тоноҡ ҡына, әммә ҡалай ҙа ут, яҡтылыҡ. Свет тоҡана башлау менән үк камера буйлап ыңғырашыуға оҡшаған ауаз үтте. Ошондағы йөҙләгән кешенең ауыҙынан, юҡ, төптәнерәк, күкрәгенән сыҡҡан кеүек. Был аһтан Хәтирә, ул да өндәште микән, тип, Сараға һирпелгәйне, уның шул ҡәҙәр тетрәнеп ишеккә ҡарап ҡалғанынан ҡото осто. Ҡырағайланған шикелле булып төбәлгәйне тегеһе ишеккә. Ҡайҙа ҡасырға, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәгән... бала ише. Хәтирә ни итергә белмәй интылып Сараның ҡулына ҡағылды, тегеһе тейендәй тертләп ситкә тартылды ла, шул аларған күҙҙәре менән күршеһенә баҡты.

- Сара, ни булды? Сара...

- Шым!.. Шым хәҙер үк... - Сара ике ҡолағын баҫып, эйелеп үк ултырҙы, иҙәнгә ята яҙып боҫто.

Тирә-яғына ҡараһа, эргә-тирәләге бар ҡатындар ҙа Сара хәлендә икән. Һәр береһе ишектән инер ғәзраилды көткәндәй булып шул тимер ҡапҡаға ҡарап ҡатҡан. Ә улары артыҡ көттөрмәй. Әсе сыйнап асылды ла, баяғы һаҡсы ҡатын менән алты конвой инде. Һаҡсы ҡулындағы ҡағыҙындағы исемлекте ҡысҡырып уҡыны:

- Захаренко! Максимова! Абдул..ах... Абдулхаева! Каримова! Бондарчук! Рахимова! На выход!

Сығыуға ыңғайлаусыларҙы күреп ҡалырға тырышып,муйынын һуҙа бирһә, эргәһендәге Сара ла ҡуҙғалды. Бына ул башын яурын эстәренә йәшергәндәй булып бөршәйеп, эйелә биреп тороп китте. Хәтирә был ябыҡ ҡатындың көмөрәйгән арҡаһына, тупаҫ ботинкаларын һөйрәп атлаған арыҡ балтырҙарына ҡарап ҡалды. Йыйылған ҡатындарҙы алып сығып киттеләр. Улар сығыуға бөтөн камера тынып ҡалды. Шул ҡәҙәр шымдылар, шыбырлашыу түгел, тын да алманылар. Алдарындағы бушлыҡҡа үтә текәлеп, нимәнелер ишетмәй ҡалмаҫҡа иткәндәй һағайҙылар. Хәтирә лә көттө, тимәк, нимәләр булырға, тойолорға тейештер бит. Бынсама ғәм шулай һағайғас.

- А-а-аһ! А-а-а-а! - Ауаз алыҫтан, ҡайҙандыр төптән, баҙҙан килгәндәй булһа ла, уның аһәңе ҡот осҡос ине. Ултырған урынында һикереп китте ҡатын. Кемдәрҙер ҡушылып ыңғырашты, икенселәр шундуҡ сеңләп ҡушылды, ҡолаҡтарын томалағандар ҙа бар, тик берәү ҙә битараф ҡала алмай. Унан был тауыштар йышайғандан йышайып, камералағы һауа тик шул михнәттән генә тора кеүек була башланы:

- Ы-ы-ы! А-а-ау!

- А-а-а-а! А-а-аһ!

Күпмелер ваҡыттан һуң ҡапыл барыһы ла тынды. Тағы һағайҙылар, тағы ишеккә текәлделәр. Һәм бына ул асылып китте лә, баяғы бисараларҙы кемеһен үҙ аяғында, кемеһен ҡултыҡ аҫтарынан әләктереп алып һөйрәтеп килтереп индерҙеләр. Уларҙы эстәгеләр өлтөрәп килеп ҡаршылап ярҙамлашты. Берәүҙәрен ҡултыҡлап, икенселәрен шулай өҫтөрәп алып барып урынға һалды, өҫтәренә эйелделәр. Уның янына ла берәүҙе алып килеп һалғайнылар, ҡараһа - Сара! Танырлыҡ түгел, йөҙө, ҡул-беләктәре күм-күк.

Өндәшә лә, ҡыбырлай ҙа алмай ҡалды Хәтирә. Һөйрәп килтергәндәрҙең береһе бисараның башын тубыҡтарына һалды, икенсеһе ауыҙын астырып һыу тамыҙҙы, өсөнсөһө устарын, ҡул быуындарын ыуғыланы.

Һаҡсылар яңы исемлекте ҡысҡырҙы, тағы ла унлап ҡатынды алып сығып китте. Ҡабаттан аһтар ишетелә башлауға гөүләп киткән камералағылар ҙа, яңы язаланып килтерелеп һыҙланып ятҡандар ҙа шымды, һығылып тыңлауға, шым ғына илашыуға күсте. Унан шундай уҡ әхәзләнгән көүҙәләр индерелеп бырағтырылды ла, яңы төркөм сығып олаҡты... Күҙәтеп ултырып аҡылдан аҙырға була ине. Һәм аҡылдан яҙҙы ла шикелле Хәтирә. Һуң бындай хәл, бындай мәхшәр аҡылындағы кеше менән буламы ни? Әллә төшмө? Төш булһа, уянырға! Нишләп, нишләп уяна алмай һуң һаман?

Төнө буйы дауам итте ғәзраил мәжлесе. Таңғаса ғазаплы аһәңдәр тынманы. Унда, ҡайҙалыр, кемдер берәү, был бисараларҙы ни өсөндөр язалай, әллә йәндәрен алалмай, әллә ҡандарын һурып бөтә алмай ыҙалай ине. Таңға табан, ҡурҡыуҙан ҡаны ойоша башлағанда, ҡапыл үҙе лә ышанмаҫ бер асыш яһаны Хәтирә: тамуҡ бит был! Тамуҡҡа эләккән дә һуң ул! Уларҙа "Тамуҡ юҡ! Алла юҡ! Теге донъя юҡ!" тиҙәр ине, ә ул булған. Үҫмер сағында Иҫәнбикә инәһенә ҡуна барһалар, йоҡлап киткәндәренсә теге донъя ғазаптары хаҡында һөйләп ҡурҡыта торғайны. "Ошо йөрөгән ҡыҙып сепрәктәр барса тамуҡ киҫәүе була", тигәненә ике туған тиҫтере Сәйҙә менән юрған осон ауыҙҙарына тығып, быуылып көлөп хәлдәре бөтә ине. Ә ул тамуҡ булған икән дә! Тик ҡасан, ни рәүешле үлгән һуң? Уныһын белмәй икән әҙәм...

Күҙҙәрен асһа, яҡтырған. Барса тын. Ыңғырашыуҙар ҙа, илаусылар ҙа, ғазаплаусылар ҙа арығанмы? Таш иҙәндә ятып арҡаһы ҡатҡан. Шулай уҡ ағас кеүек булған муйынын борһа, янында ғына түбәгә текләп Сара ята. Керпеген дә ҡаҡмай, йөҙө балауыҙ һын һымаҡ - һап-һары. Ысынбарлыҡҡа ҡайтҡан Хәтирә ҡапыл ҡалҡынды ла күршеһенә өндәште:

- Сара...

Тегеһе яуап бирмәһә лә, тереләген белдереп, күҙ бәбәген елпелдәтте.

- Хәлең нисек? Сара?

Сара иплəп кенә ҡарашын күсереп, уның күҙҙәренә баҡты, унда ла бер килке төбәлгәс кенә ныҡ ҡыҫылыуҙан бер-береһенә йәбешеп уҡмашҡан ирендәрен сытырайып айырҙы:

-Бына бит... Йә үлеп булмай...

- Ни өсөн, Сара? Ниңә? Нишләтәләр ул һине? - Хәбирә уның йөҙ-төҫөнә күҙ йүгертте, туҡмалған кеүек түгел бит, ҡанағанҡүгәргәне тойолмай.

- Ток менән һуҡтыралар, эттәр...

- Ток менән? Нисек, ток менән? Ҡалайтып?

- Аяҡты...ныуға тыҡтыралар ҙа... ток ебәрәләр...

- Хоҙайым... Был ниткән хәл?.. Нимәгә улай этләйҙәр һине?

- Иремде... халыҡ дошманы тип әйттергеләре килә...

Хәтирә Сараға нығыраҡ эйелде, шыбырлауға күсте:

- Халыҡ дошманы? Һинең ирең халыҡ дошманымы ни?

Сара тағы уға төбәп ҡараны:

- Ул ниндәй халыҡ дошманы булһын... Ул - инженер... бронь менән заводта ҡалдырылған совет инженеры...

- Ул да... бындамы әллә?

- Эй-йе... Иң ғазаплыны шул... беҙҙе бергә язалайҙар... - ҡатындың күҙ ҡойроғонан йәше ағып төшөп, сәс араһына китте.

Хәтирә уға ҡарап ҡатты.

- Кемдер уға яла яҡты... Завод мәғлүмәттәрен ситкә ебәрә, тип... Ә ул...ул... йәне-тәне менән илегә тоғро кеше...

**(Дауамы бар).**

✓ *Ә бына халҡыбыҙҙың тағы бер иң популяр спорт уйыны - традицион йәйәнән уҡ атыуҙы тергеҙеүгә бер йыл самаһы ғына булыуға ҡарамаҫтан, ул хәҙер үҙ сафына бик күптәрҙе йәлеп итеп өлгөрҙө.*



*ХАҠ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ*

# ЮРМАТЫЛАР ҠОР ЙЫЙҘЫ





(Башы 7-се биттә).

Төштән һуң юрматылар йыйыны изге Торатау буйында дауам итте. Унда һәр райондың тирмәләре ҡоролдо, ҡорбан итенән ҡаҙандар аҫылды (ул көндө Торатау буйында 18 баш һарыҡ ҡорбан итеп салынды), шәжәрәләр, халыҡ һөнәрмәндәре эштәре һәм милли ризыҡтарҙан күргәҙмәләр ҡуйылды. Байрамға юрматылар ғына түгел, республиканың бар тарафтарынан мендән ашыу халыҡ йыйылғайны. Улар һәр райондың үҙешмәкәр артистары тарафынан ойошторолған концерт программаһын кинәнеп ҡараны. 1812 йылғы Ватан һуғышы геройы Ҡаһым Мырҙашев исеменә - милли көрәш, Юрматы ере батыры, 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәксеһе, Ҡырым ханлығында һәм Осман империяһында башҡорт илселеге ағзаһы булған Килмәк абыҙ Нөрөшев кубогына традицион йәйәнән уҡ атыу буйынса турнирҙар барған майҙанда ла байтаҡ халыҡ йыйылғайны. Әйткәндәй, һабантуйҙарҙа үҙе тирәләй әллә күпме тамашасыны йыйған милли көрәш майҙаны хәҙер берәүҙе лә аптыратмай. Ә бына халҡыбыҙҙың тағы бер иң популяр спорт уйыны - традицион йәйәнән уҡ атыуҙы тергеҙеүгә бер йыл самаһы ғына булыуға ҡарамаҫтан, ул хәҙер үҙ сафына бик күптәрҙе йәлеп итеп өлгөрҙө. Торатау буйындағы турнирҙа ла республика райондарынан 60-лап мәргән ҡатнашты. Улар юрматы егете Данир Ғәйнуллин ҡуйған приз фонды, Риф Иҫәнов, Радик Солтанов, "Киске Өфө" гәзите һәм башҡалар ҡуйған махсус приздар өсөн сәмләнеп алышты. Ҡырмыҫҡалы районынан Юныс Хәбибуллин - 1-се, Бөрйән районынан Салауат Юлбирҙин - 2-се, Ғафури районынан Алик Степанов 3-сө урын яуланы. Ҡатын-ҡыҙҙар араһынан Ләйсән Алламоратова, балалар араһынан Сергей Петровҡа етеүсе булманы.

Шулай итеп, Юрматы башҡорттары йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Риф Шәрифрахман улының түбәндәге һүҙҙәрен йомғаҡлау фекере итеп килтерәйек: "Йәмәғәт ойошмаһы ғына халыҡ алдында торған бар проблемаларҙы, мәҫәлән, бөгөн бик актуаль булған матди мәсьәләләрҙе, эш менән тәьмин итеүҙе, эш урындары булдырыуҙы, етештереү прозводстволары асыуҙы хәл итә алмай, - тине ул. - Әммә урындағы властарға был йәһәттән ярҙам итә ала. Беҙҙең ярҙам ниҙән ғибәрәт булырға тейеш? Иң тәүге сиратта, беҙ халҡыбыҙға күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫкә, төп бәләбеҙ булған эскелек кеүек насар ғәҙәттәрҙән арынырға, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ" тигән байраҡты юғары тоторға, рухи сәләмәтлеккә өлгәшергә ярҙам итергә тейешбеҙ. Рух сәләмәтлеге үҙендең кемлегеңде, ниндәй милләт балаһы булыуыңды, тамырҙарыңды белеүҙән башлана. Ырыуҙың зыялылары, интеллигенцияһы, битараф булмаған кешеләре тап ошо юҫыҡта эшләргә, халыҡ араһына йышыраҡ сығырға, рух күтәреүсе саралар үткәрергә бурыслылар. Ишембай районынан сыҡҡан, Өфөлә йәшәгән зыялыларҙың, мәҫәлән, йыл да районға ҡайтып, төркөмдәргә бүленеп, ауылдарҙа халыҡ менән осрашыуҙар үткәреү тәжрибәһе бар. Халыҡты тыңлай белеү, уларҙы борсоған мәсьәләләр менән хәбәрҙар булыу фарыз эш. Шуның өсөн ошондай осрашыуҙарҙы дауам итергә кәрәк..."

**Лена ӘХМӘРОВА.**

*ШУНДАЙ ҺӨНӘР БАР*

# КИТАПХАНАСЫ

**Элегерәк, яҙыусылыҡ менән шөғөлләнә башларҙан алда, китапханасы һөнәре тураһында бер нимә лә белмәгәнмен икән. Китапханаға инәһең, китап йә иһә берәй гәзит яҙҙырып алып, залда бер аҙ ултырып уҡып, сығып та китәһең. Китап биреп ултырған кешенең эше фәҡәт кешеләргә кәрәкле берәй нәмәне яҙып биреп, кире алып килгәндәрен ҡабул итеп алыу ғыналыр, тип, бер мин генә уйламағанмындыр, моғайын. Тыштан ҡарағанда, был ысынлап та шулай тойола.**



Беҙҙең Сибай ҡалаһын хеҙмәтләндергән китапханалар селтәре һәр төрлө һөнәр һәм социаль төркөмдәге халыҡ, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн мәҙәни һәм мәғлүмәти үҙәк булып тора. Ҙур ғына булған ошо ойошманы оҙаҡ йылдар тәжрибәле директор Минзәлә Мәғәсүм ҡыҙы Искакова етәкләй. Ошо селтәргә 10 китапхана ҡарай. Ана шуларҙың береһе хаҡында һүҙем. "Тыуған яҡты өйрәнеү модель китапханаһы" тип аталған был ойошмаға яҡын ғына йәшәйем мин. Минең унда инеп сыҡмаған көндәрем дә юҡ, тиерлек. Әллә нисәмә йылдар ошо йортҡа йөрөй торғас, әкренләп китапханасыларҙың эшенә иғтибар итә башланым. Етмәһә, китапхана залында ойошторолған сараларға һирәкләп үҙемдә лә саҡырғылай башлағас, китапхана хеҙмәткәрҙәренең ҡатмарлы, хатта тынысһыҙ тип атарлыҡ эшен ныҡлабыраҡ аңлай башланым. Ошо хаҡта яҙырға ниәт итеүем дә бына шул уйҙар менән бәйле инде.

- Рәйсә һылыу, мин бит элек китапханасылар хаҡында бөтөнләйгә хаталы уйҙа булғанмын, - тип юғарыла яҙылған фекеремде китапхана мөдире Рәйсә Кунаеваға әйтә ҡуйҙым.

- Эйе шул, Хәлил ағай, бер һеҙ генә түгел, күптәр был эштең нескәлектәре менән әллә ни таныш түгел. Ифрат та еңел эш, көнө буйы тик китап уҡып ҡына ултыралар, тип уйлай күптәр беҙҙең турала...

Артабан һөйләшеп киттек. Рәйсә Зәкир ҡыҙы Сибай ҡалаһында киң билдәле ошо китапханала китап уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһындырыу уятыу өсөн ниндәй саралар үткәрелеүе хаҡында һөйләп бирҙе. Хәҙерге компьютер, интернет дәүерендә халыҡты китап уҡырға йәлеп итеү, әлбиттә, еңелдән түгел. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, шул уҡ хәҙерге заман ысулдарын ҡулланып, һәр төрлө тематик кисәләр ойошторола бында. Танылған шәхестәр менән осрашыуҙар, китап байрамдары, яңы баҫылып сыҡҡан китап туйҙары үткәрелә. Мөмкинлек тыуған һайын халыҡты яҡташ яҙыусы һәм журналистар, шулай уҡ баш ҡаланан килгән әҙиптәребеҙ менән осраштырып, шатландырып ҡына тора китапхана хеҙмәткәрҙәре. Мәктәп уҡыусыларын йыйып, һәр төрлө һөнәр эйәләре, хәрби хеҙмәт ветерандары менән тематик осрашыуҙар ойоштороу ҙа уларҙы эшһөйәрлек һәм илһөйәрлек рухында тәрбиәләү процесына тос ҡына өлөш индерәләр, тигән инаныуҙамын.

Артабан да әңгәмәләшә торғас, китапханала элек мин күҙ алдына ла килтермәгән эштәр атҡарылыуы таң ҡалдырҙы. Мәҫәлән, бында "Рухи хазина" тип аталған әҙәби-музыкаль клуб, "Әҙәби тирмә"тигән әҙәбиәт һәм шиғриәт һөйөүселәр клубы, шулай уҡ "Серҙәш" ҡыҙҙар клубы эшләп килә. Китапханала 2004 йылда нигеҙ һалынған "Сәсән тирмәһе" исемле музей ҙа бар. Был фольклор музейы халҡыбыҙҙың быуаттар буйы тупланған мәҙәниәтен тергеҙеү, һаҡлау маҡсаты менән булдырылған. Ошо китапхана-музей эшмәкәрлеге хаҡында видеотаҫма төшөрөп, коллектив "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы китапханаһы 2013" VI республика конкурсында ҡатнашып, "Китапхана - музей" номинацияһы буйынса I урын яулаған. "Сәсән тирмәһе" музейында бай методик ҡулланмалар тупланған, башҡорт халҡының зауыҡлы кейеме, биҙәүестәре, семәрләп тегелгән камзул, алъяпҡыстар, һауыт-һаба, баҫылған кейеҙ, һуғылған балаҫ, "килен һандығы", бала сәңгелдәге һәм башҡа бик күп ҡыҙыҡлы нәмәләр ҡуйылған. Рухи мәҙәниәт буйынса, ауыҙ-тел ижады, шәжәрә, йолалар, йырмоң, бейеү, балалар уйыны буйынса бай методик папкалар йыйылған. Ошо музей янында йыш ҡына ҡыҙыҡлы осрашыуҙар, кисәләр, викториналар ойошторола. Бында хатта балалар баҡсаһы ла ситтә ҡалмай. Кескәй йәштәге балаларға, шулай уҡ башланғыс синыф уҡыусыларына "Өләсәйем һандығы" тип исемләнгән осрашыуҙар үткәрелеп тора.

"Китапханалағы был музейҙы бөгөн дә тулыландырыуҙы дауам итәбеҙ. Ошо арала әүҙем китап уҡыусы Зәлиә Ишморатова башҡорт милли кейемендәге ҡурсаҡтар бүләк итте. Күптән түгел "Китапханаға китаптар бүләк ит!" акцияһы иғлан ителгәйне. Фәнүрә Кәримова апай 49 һәйбәт торошло китап бүләк итте", - тип үҙенең шатлығы менән уртаҡлаша Рәйсә Зәкир ҡыҙы.

Китапханаға ҡасан ғына килһәң дә, алсаҡ, мөләйем йөҙ менән ҡаршы алыуҙары, ниндәй генә китап һораһаң да, тиҙ генә табып биреүҙәре халыҡты үҙенә йәлеп итеүҙең тағы бер мөһим факторылыр, тип һанайым. Китап фондының бай булыуы (8,9 мең дана), даими баҫмаларҙың күп төрлөлөгө (27 төр) һөйөндөрә. Минә, яҙыусы кеше буларaҡ, йыш ҡына китапхананың архивынан да гәзит-журналдар алғыларға тура килә. Хатта бына ошо йүнәлештәге эш тә бында юғары кимәлгә ҡуйылған. "Фәлән йылғы фәлән гәзит, йә иһә журнал кәрәк ине, ҡыҙҙар", тип мөрәжәғәт итеүең була, "һә" тигәнсе табып та килтерәләр.

"Китапханасы китап белгесе генә түгел, ихлас әңгәмәсе, мәғлүмәтле, ярҙамсыл, кешелекле һәм кеселекле булырға тейеш, - ти Рәйсә Зәкир ҡыҙы. - Был һөнәр эйәһе булыу өсөн, иң беренсе нәүбәттә, кешеләрҙе хөрмәт итеү, улар менән уртаҡ тел таба белеү, күңел биреп эшләү, әҙерлекле булыу кәрәк". Үҙ һөнәренә һәм шәхсән үҙенә ҡуйылған шундай юғары талапҡа Рәйсәнең һәм уның хеҙмәткәр ҡыҙҙарының тулыһынса тап килеүенә шигем юҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

**✓ Ниәте көслө булған кеше Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн тыйғанынан тыйылып, ҡушҡанын үтәп, ураҙа тотһа, төп ғәмәлдәрҙең береһе үтәлә. Ураҙа тотоу, иман нығынып, намаҙ уҡый башлауға ынтылыш булыр.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯБАЙ РИЗЫҠ...

## яҡшыраҡ

■ Һәйбәт итеп туҡланыу тигәндә күптәр сифаты буйынса уникаль, шул уҡ ваҡытта ҡиммәт ризыҡтарҙы күҙ алдына баҫтыра. Ғалимдар билдәләүенсә, өҫтәлдәрҙәге ябай ғына аҙыҡтар ҙа файҙалы, тик беҙ был турала уйланмайбыҙ ғына. Мәҫәлән, Британияла ҡыҙыл сөгөлдөрҙө тикшереп, уның һуты кешенең сыҙамлылығын 16 процентҡа арттыра тигән фекергә килгән ғалимдар. Баҡтиһәң, ҡыҙыл сөгөлдөрҙә организмды кислород менән байытыусы тоҙҙар бар икән. Шуға ла был йәшелсә спортсыларға, йөрәк-ҡан тамырҙары менән ауырығандарға ярҙам итә. Сөгөлдөр һуты юғары ҡан баҫымын түбәнәйтә, 24 сәғәт буйына был һөҙөмтә һаҡлана. Стресс мәлендә йоҡлай алмағандар, хәтере насарайыусылар сөгөлдөр һутын төнгөләккә эсһен.

■ Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары витаминдар ҡабул итеү менән өлкән йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы үлем осраҡтарының йышайыуы араһында бәйләнеш барлығын тикшереп ҡараған. Белгестәр билдәләүенсә, организмға ысынлап та витаминдар етешмәгәндә генә витаминдар эсеү файҙалы. Әгәр улар артыҡ икән, был ғүмер оҙайлығына йоғонто яһай. Һынауҙарҙа 50-60 йәшлек 38 мең ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙың барыһы ла һуңғы 20 йылда яҡшы туҡланған, витаминдар ҙа ҡабул иткән. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, мультивитаминдарҙы, фолий кислотаһын, В6 витаминын, магний, цинк, баҡыр һәм тимерҙе артыҡ ҡулланыу үлем хәүефен булдыра. Ғалимдар әйтеүенсә, кальций, киреһенсә, был хәүефте түбәнәйтә. Шулай ҙа табип менән кәңәшләшеү мотлаҡ.

■ Башланғыс кластарҙы тамамлап, урта мәктәпкә күскән балаларҙың психикаһында уҡыу йылының тәүге яртыһында тайпылыштар күҙәтелә. Әммә үҙен әүҙем тотҡан, кластан тыш сараларҙа ҡатнашҡан уҡыусылар был үҙгәреште еңел кисерә, ти Суссекс университеты ғалимдары. Улар 10 йәштән 13 йәшкә тиклемге 484 баланы тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. Бындай балалар тиҫтерҙәре менән дә күберәк аралаша, үҙбаһаһы ла юғары, үҙҙәренә ышаныуҙары ла тейешле кимәлдә. Спорт менән шөғөлләнеүселәр ҙә ошондай уҡ юғары баһаға лайыҡ булған.

■ Рочестер университеты ғалимдары иммунитетты нығытыуҙа яңы ысул уйлап тапҡан. Улар меланома менән яфаланған кимереүселәрҙең иммунитетын яҡтылыҡ ярҙамында яман шеш күҙәнәктәренә ҡаршы көрәшкә әүҙемләштерә алған. Иммунотерапия нур терапияһынан һәм химиотерапиянан айырыла. Ул яман шеш күҙәнәктәрен туранан-тура юҡҡа сығармай, ә иммун системаһының Т-күҙәнәктәрен уларға ҡаршы ҡуя. Әлеге мәлдә иммун терапияһының бер нисә ысулы билдәле. Уның бер генә кире яғы күҙәтелә: иммун системаһының реакцияһы йә нык көслө йә бөтөнләй көсһөҙ булыуы бар. Бынан тыш, яман шеш күҙәнәктәре Т-күҙәнәктәрҙән йәшеренә ала. Агрессив күҙәнәктәрҙең Т-күҙәнәктәргә шешкә үтеп инеүенә ҡаршылыҡ күрһәтеүе лә бар. Бындай осраҡта ғалимдар ауырыу организмына өҫтәмә рәүештә Т-күҙәнәктәр индерә.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

**Әҙәм балаһынан да ирекле зат юҡ был донъяла. Ул уйҙары, хыялдары менән ирекле. Шулай ҙа уның төп ирәге - азатлығын һайлауҙа. Ҡайһы юлдан барырға - изгелекме ул, яуызлыҡмы, ғәҙеллекме, әллә ялғанмы, хараммы, әллә хәләлме - кеше үҙе һайлай. Азатлыҡтың төп асылы - Хаҡ Тәғәлә тыйғандан тыйылып, ҡушҡанын үтәп йәшәүҙәләр. Әммә кеше күберәген күңеле ҡушмағанды башҡара, азатлығын онота. Әбйәлил районы Амангилде ауылынан Илшат хәҙрәт БАЙМЫРҘИНдың изге Рамаҙан айы тураһындағы фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

# ДИНДЕҢ АСЫЛЫ...

## тиңлектә, тигеҙлектә



### Һынау айы

Әлхәмдүлилләәһи, Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте менән Рамаҙан айы килеп етте. Беҙ уны көтөп алабыҙ. Ул үҙенә күрә һынау айы булып тора. Был ай хәрәм ғәмәлдәрҙән, хәрәм ризыҡтан ғына түгел, хатта үҙебеҙгә хәләл булған ризыҡтарҙан да, хәләл ғәмәлдәрҙән дә тыйылып тора алған ай. Ошо айҙы беҙ Аллаһы Тәғәләнең берлеген, барлығын танып, Уның ризалығына өмөт итеү ниәте менән башлайбыҙ. Ҡайһы бер кеше ябығып алыу өсөн тотам, ти, йә булмаһа, башҡа кешеләр тотҡас, мин дә тотоп ҡарайым әле, ти. Минең өсөн Рамаҙан айының иң төп мәғәнәһе шул: Аллаһы Тәғәлә фарыз иткән ғәмәлде тулылығынса үтәп, изге айҙы тулыландырып, иң һуңғы кисендә ауыҙ асып, "Әлхәмдүлилләәһи, Аллаһы Тәғәләнең ҙур бурысын үтәнем", тип ҡыуаныу тора. Шуға күрә лә был ай үҙемде һынап ҡарау һәм Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә ирешеү ниәте менән ҡаршы алған ай булып тора. Ошо айҙа беҙ изге ғәмәлдәр ҡылып, бар хәлебеҙсә үҙебеҙҙең етешһеҙлектәргә иғтибар итеп, уларҙы ҡабатламау ниәте менән йәшәргә тейешбеҙ.

### Фытыр-саҙаҡа

Үҙ ғүмеремдә иң беренсе ураҙаны әсәйем мәрхүмә менән бергә тоторға тура килде. Ураҙа тотоу ниәте менән йөрөгәнемде белгәс, ул: "Ураҙа тотоп ыҙалама, тота алмаҫһың", - тине. Мин эш менән булып йөрөп асығып, төшкә тиклем сыҙамай, тамаҡ ялғап нығынып ала торғайным. Әсәйем шуны күҙ уңында тотҡандыр. Ниәтем көслө булғас, Аллаһҡа тапшырҙым. Тәүге көндә үк хикмәтле хәл булды. Көнө буйы һин дә мин һәйбәт йөрөнөм дә, ауыҙ асҡас, быуындарым ҡалтыранып, хәлем бөттө лә ҡуйҙы. Шуны аңланым: ураҙа ваҡытында кеше Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте, Уның көсө, доға көсө менән йөрөй икән. Шуға күрә кеше дөрөҫ ниәт менән ураҙа тоторға тейеш. Ул саҡта яңы ғына намаҙға баҫҡан мәлем ине. Әлхәмдүлилләәһи, шунан алып 26 йыл дауамында ураҙаны ҡалдырғаным юҡ. Был айҙың ысынлап та рәхмәт айы икәненә төшөндөм һәм Рамаҙан айының изгелек айы икәнен аңланым. Беҙ үҙебеҙҙең яҡындарға, туғандарға иғтибарлы булып, фәҡирләнеп, меҫкен булған кешеләргә лә изгелек ҡылып йәшәргә тейешбеҙ. Тик ошо айҙа ғына фытыр-саҙаҡа биреү бурысы бар. Ул саҙаҡа меҫкендәрҙең өлөшө булырға тейеш. Абдуллаһ Ибн Ғәббәс р.ғ. әйткән: "Рәсүлебеҙ с.ғ.ү. ураҙаны буш һүҙҙәрҙән, төрлө әшәкелектәрҙән паҡлау өсөн һәм меҫкендәргә ризыҡ булһын өсөн фытыр-саҙаҡа биреүҙе вәжиб ҡылды". Саҙаҡаның миҡдары он, ярма кеүек ризыҡтан ярты сағ булырға тейеш. Бер сағ беҙҙең үлсәм менән дүрт килограмм булһа, ярты сағы ике килограмм бойҙай йәки ярма миҡдарына тура килә. Ярлыларға бер төрлө, урта хәлләргә күберәк, байҙар өсөн айырым миҡдар тәғәйен, тип, алдан билдәләү дөрөҫ түгелдер тип уйлайым, сөнки был диндең төп асылы - һәр кеше Аллаһы Тәғәлә алдында бер тигеҙ икәнде юҡҡа сығара. Кеше был донъяға бер тигеҙ булып, бер нәмәһеҙ килә, ахирәткә күскәндә лә бөтәһе лә бер тигеҙ булып, кәфенгә төрәлеп, был донъянан китә. Байҙарҙы ебәккә төрөргә, урта хәлләләрҙе кәфенгә, меҫкендәрҙе сепрәк-сапраҡҡа төрөп һалһаң да була, тигән һүҙ юҡ. Хаж ҡылған ваҡытта ла мосолмандар бөтәһе лә бер тигеҙ булып, ихрам кейемендә Мәккәгә баралар. Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙең Үҙенең алдында бөтәһе лә тигеҙ икәнен һәр саҡ иҫкәртә. Тәүлегенә биш тапҡыр намаҙ уҡыу ҙа һәр мосолманға берҙәй фарыҙ. Рамаҙан айында ярлыларға ун көн ураҙа тоторға, урта хәлләләргә егерме көн, байҙарға утыҙ көн тоторға, тигән төшөнсә лә юҡ. Шуға күрә һәр кем бер тигеҙ утыҙ көндө тултырып ураҙа тоторға тейеш. Байҙар ҙа, тулы тотоп, меҫкендәрҙең хәлен аңлап, саҙаҡаларын бирергә тейештәр. Фытыр-саҙаҡа миҡдары үҙгәрмәгән һәм дә байҙар саҙаҡаны күберәк бирә икән, уны фытыр-саҙаҡанан тыш үҙ ихтыяры менән бирелгән саҙаҡа тип аңларға кәрәк. Тигеҙлек бер Рамаҙан айында ғына булырға тейеш түгел. Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел, тиҙәр. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө кешеләр менән осраштырып, аралаштырып, һынап ҡарай. Тәкәбберлеккә һынай. Тәкәбберлек кешенең иң ҙур зәғифлеге. Тәкәббер булған кеше йәннәттең еҫен дә татымаҫ тигән хәҙис бар. Рамаҙан айындағы тәрәүих намаҙҙары мосолмандарҙы ойоштора. Башҡа айҙарҙа йөрөмәгән хәлдә лә Рамаҙан айында бар хәлебеҙсә мәсеткә йыйылырға тырышабыҙ. Зекерҙәр әйтеп, Аллаһы Тәғәләгә доғалар ҡылырға форсат сыға. Тәрәүих намаҙҙары ваҡытында мәхәлләнең эше лә күренә.

***"Рәжәп айы - сәсеү айы, шәғбән - шытымдарға һыу һибеү айы, ә рамазан - уңыш йыйыу айы", - тигән Әбү Бәкер әл-Бәлхи. Уның шундай һүҙҙәре лә еткерелә: "Рәжәп айы - ел сығыуына, шәғбән - болоттар ҡуйырыуына, рамаҙан ямғыр яуыуына тиң. Кем рәжәптә сәсмәй һәм ултыртмай, шәғбәндә һыу һипмәй, нисек ул рамаҙанда уңыш йыя алһын?.."***

### Фиҙиә саҙаҡаһы

Төрлө сәбәптәр арҡаһында ураҙа тота алмағандар фиҙиә түләп ҡаплай ала. Уның миҡдары бер меҫкенде бер көн туйҙырырлыҡ дәүмәл була. Йөклө ҡатындар йәки бала имеҙеүсе ҡатындар, балаһына зыян килеүҙән ҡурҡһалар, ураҙа тотмау рөхсәт ителәләр. Улар күпме көн ҡалдырған, шул хәтле ҡаза ҡылаларҙыр - бер көнгә бер көн. Шулай уҡ ҡарт кешегә ураҙа тотмау рөхсәт ителәләр. Улар ураҙалары өсөн фиҙиә саҙаҡаһы бирәләр. Фиҙиә саҙаҡаһы һәр көнгә бер меҫкенде ашатыу миҡдарылыр, йәки фытыр-саҙаҡаһы миҡдары саҡлы. Ул Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн эшләнгән ғәмәл, шуға күрә мәжбүри түгел, ирекле хәлдә башҡарыла. Кеше форсат табып, ураҙаһын аҙаҡ башҡарһа, уның үҙе өсөн һәйбәтерәктер.

### Төп ғәмәл

Ғибәҙәт намаҙ уҡыуҙан һәм башҡа төрлө ғәмәлдәрҙән тора, әммә уны ураҙа тотоуҙан башлау хәйерләрәктер, тим. Бер хәҙистә әйтелә: ғибәҙәтте ураҙанан башлағыҙ, сөнки унда бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡ юҡ. Ниәте көслө булған кеше Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн тыйғанынан тыйылып, ҡушҡанын үтәп, ураҙа тотһа, төп ғәмәлдәрҙең береһе үтәлә. Ураҙа тотоу, иман нығынып, намаҙ уҡый башлауға ынтылыш булыр. Бер ниндәй сүрә ятламай ҙа ураҙа тоторға була. Был һәр кемдең хәленән килгән эш. Ураҙа Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн генә үтәлгән ғәмәл икәнен оноторға ярамай. Ураҙа күрһәтеп йөрөй торған ғәмәл түгел. Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн үтәлгән йәшерен ғәмәл.

### Үҙе бер ғүмер

Күптәр ураҙаны ауыҙ асҡандан һуң төнө буйы туҡланып, көнө буйы ас йөрөйҙәр икән, тип күҙ алдына килтерә. Ысынында, улай түгел, сөнки ураҙа

✓ *Нимәгәлер күп энергия түгелһә лә, һөҙөмтә барыбер буласаҡ. Ғәмәлдә сарыф ителгән энергия үҙгәрештәргә килтерә, әммә улар шунда уҡ күренмәй. Әгәр тырышлыҡты туҡтатмағанда, тиҙҙән тормошоғоҙ тамырынан үҙгәрәсәк.*



тотҡан ваҡытта кешегә былай көндәргә ҡарағанда күпкә әҙерәк ашарға тура килә. Сәбәбе ябай ғына: артығын ашап булмай. Көнө буйы ашамай йөрөп, кис ауыҙ асҡанда ла күп итеп ашап булмай. Ураҙа үҙендә яйға һалырға, тәндең ихтыяжын көйләргә форсат бирә. Ураҙа киләсәкке тормошто ла яйға һала. Киләһе Рамаҙанға тиклем аккумулятор һымаҡ көс йыйып, йыл дауамында иман ныҡлығын һаҡлап, Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенә ынтылыу менән йәшәүҙе дауам итеү - үҙе бер матур ғүмер кисереше.

### Хәрәкәт һәм бәрәкәт

Кеше ураҙаны үҙ теләге менән тота. Һуңғы дүрт йылда ураҙабыҙ бесән мәленә тура килде. Физик эш ваҡыты, көндәрҙең эҫе ваҡыты, әммә мин ураҙала, тип, буш ятып булмай. Шуныһы ҡыҙыҡ: көндө бушҡа үткәргән һайын, ураҙа ауырыраҡ үтә. Эш менән булышып йөрөп, ураҙаның үтеп киткәнен дә белмәй ҡалаһың. Күберәк эш эшләргә тырышһаң, бәрәкәте лә күберәк була. Китаптар уҡырға ла форсат табыла. Теләгең булһа, тик файҙаға ғына, уның бер ниндәй ҡыйынлығы, ҡурҡынысы юҡ, Аллаһы Тәғәлә кешегә Үҙе еңеллек биреп тора. Шуға күрә ураҙаны йоҡлап үткәреүҙең файҙаһы юҡ, уны хәрәкәттә һәм бәрәкәттә үткәрергә кәрәк.

### Йән сәләмәтлеге - тән сәләмәтлеге

Аллаһы Тәғәлә тыйған ғәмәлдәрен кешегә зарар килтергән өсөн тыйған, ә бөтөн ҡушҡан ғәмәлдәре кешегә файҙа килтергән өсөн ҡушылған. Йылдың бер осоронда ашҡаҙанға ла ял кәрәк. Кеше үҙе отпускыға сығып ял итә. Ашҡаҙанға ла йыл буйына туҡтауһыҙ эшләгәндән һуң ял биреп, алдағы йылға әҙерлек алып барырға һәм уның сәләмәтлеген нығытырға мөмкинлек бирергә кәрәк. Кеше етештергән әйберҙәрҙең, мәҫәлән, машинаның инструкцияһы була. Күпмелер саҡрым үткәс, майын алмаштырырға, запас частарын яңыртырға кәрәк. Әгәр ҙә беҙ шул инструкцияны теүәл үтәһәк, машина беҙгә оҙаҡ йылдар хеҙмәт итә. Шуның кеүек, беҙҙең кәүҙәбеҙ ҙә ошо донъяла беҙҙең йәнебеҙҙе алып йөрөүсе транспорт сараһы. Тәнебеҙ оҙаҡ йылдар сәләмәт һәм лайыҡлы хеҙмәт итһен өсөн беҙ ҙә Аллаһы Тәғәлә Бәйғәмбәр аша биргән инструкцияны аңлап, ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылһаҡ, беҙҙең йәнебеҙ ҙә, тәнебеҙ ҙә үҙенән-үҙе сәләмәт булыр, иншаллаһ!

### Тамаҡ һәм тамуҡ

Ашаған ризығыбыҙ доғаларыбыҙҙың ҡабул булыуына иң төп шарт. Бер риүәйәттә әйтелә: Мөхәммәт с.ғ.ү. бер кешене күрҙем, тигән. Ул ике ҡулын күккә һоноп доға ҡыла ине. Уның йөҙөнә ҡарағанда, ул рәнйетелгән кеше ине. Кейеменә ҡарағанда, сәфәр кешеһе ине. Уның доғалары ҡабул булыуына бөтә мөмкинлектәре бар ине. Әммә ләкин улай түгел, сөнки уның ашаған ризығы харам ине. Беҙҙең ашаған ризығыбыҙ харам икән, ул беҙҙең доғаларыбыҙҙың ҡабул булыуын ҡаплап тора.

### Изгелек ҡыл

Изгелеккә мохтаж саҡта ғына кеше изгелектең мәғәнәһен нығыраҡ аңлай. Бер хәҙрәттең вәғәз һөйләгәндә килтергән миҫалы хәтергә уйылып ҡалған. Ул армияла булғанда әсәһе мәрхүмә була. Илай-илай ҡайтып еткән һалдат. Улай йүгереп, былай йүгереп, ерләү ығы-зығыһына бирелеп, мәрхүмәне ерләгәндәрен аңғармай ҙа ҡалған. Икенсе көндө туғандары таралышып бөткәс, өйҙә яңғыҙы ҡалған. Тып-тыныс, берәү ҙә юҡ. Армияла әҙергә-бәҙер өйрәнгән һалдаттың ашарына бер нәмә лә юҡ. Шул мәлдә күршеһе өс бөртөк йыуаса индереп биргән. "Эй, улым, минән һиңә бер ниндәй ҙә ярҙам юҡ, бына ошо өс йыуасаны ғына ҡабул итеп ал инде", - тигән әбей. Шул саҙаҡаның тәме ғүмер буйы телем осонда тора, тип һөйләне хәҙрәт. Изгелек изгелеккә мохтаж булған кешеләрҙең өлөшө булып тора һәм дә улар шул изгелекте татырға тейеш. Изгелектең тәғәйен кешегә адреслы барып етеүе фарыз. Уның миҡдарын матди үлсәм менән үлсәп тә булмай.

Әйткәндәй, былтырғы рамаҙан айында фытыр-саҙаҡаны бер апайға бирҙем. Ул яңғыҙы ғына йәшәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, хәленән килгәнсә балаларына ярҙам итергә тырыша. "Эй, Хоҙайым, быйыл көтөргә себеш тә ала алманым, тип ҡайғырғайным, бына бит теләгем тормошҡа ашты!" - тип ҡыуанды ул. Апайҙың эскерһеҙ ҡыуанысы миңә лә күсте...

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Донъяны киңәйтеүҙең беренсе ҡануны - тәртип. Үҫеш өсөн бөтөн нәмәгә система кәрәк. Сәскәгә ҡараһағыҙ ҙа, емеш теләһәгеҙ ҙә тәбиғәттең ни тиклем гармониялы булыуына иғтибар итегеҙ. Бал ҡорттары кәрәҙҙе нисек итеп эшләп ҡуя! Тәбиғәт кәрәкле нәмәне һаҡлап, кәрәкмәгәнен ташлай. Был - ойошма тип атала.Бизнеста барыһы ла яҡшы булһын тиһәгеҙ, билдәле методикалар буйынса эшләргә кәрәк. Тормошоғоҙҙоң алға барыуын теләһәгеҙ, унда ниндәйҙер тәртип булдырырға кәрәк. Һәр секунд, һәр минут иҫәптә саҡта, аныҡ структура һәм тулы тәртип булдырмайынса булмай. Янғын һүндереүселәр шлемдарының һәм һаҡлау кейемдәренең ҡайҙа ятҡанын аныҡ белә, тиҙ ярҙам машинаһы водителенә асҡыс эҙләп баш ватырға түгел, сөнки улар билдәле бер махсус урында һаҡлана. Тәртипһеҙлек яҡшыға алып килмәй. Шуға эш урынында ла, гаражда ла тәртип булдырығыҙ. Тағы шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: эсегеҙҙә нимә, тышығыҙҙа ла шул. Йәғни, беҙҙең йәшәү мөхите - фекерләү образының сағылышы ул. Әгәр өйөгөҙҙә бола икән, тормошоғоҙ ҙа, ҡағиҙә булараҡ, ыңғай бармай.

**Буш эш булмай.** Цельсий буйынса минус 50 градусҡаса туңдырылған боҙ киҫәген алып йылыта башлаһаҡ, бер ни тиклем ваҡыт бер үҙгәреш тә булмаясаҡ. Энергия сарыф ителә, һөҙөмтә юҡ. Әммә температура ноль градусҡаса күтәрелгәс, боҙ ирей башлай һәм һыу барлыҡҡа килә. Артабан инде һыуҙы йылытабыҙ. Шулай уҡ әллә күпме энергия сарыф ителә, ҡыҙыҡлы нәмә күренмәй. Температура 100 градус тирәһенә күтәрелә башлаһа, быу сыға һәм һыуҙа ҡыуыҡтар күренер, һыу ҡайнап сығыр. Бының менән ниндәй принципты аңлатырға теләйем? Нимәгәлер күп энергия түгелһә лә, һөҙөмтә барыбер буласаҡ. Ғәмәлдә сарыф ителгән энергия үҙгәрештәргә килтерә, әммә улар шунда уҡ күренмәй. Әгәр тырышлыҡты туҡтатмағанда, тиҙҙән тормошоғоҙ тамырынан үҙгәрәсәк. Был хәҡиҡәт тураһында онотмағыҙ һәм паникаға, күңел төшөнкөлөгөнә бирелергә сәбәп ҡалмаҫ. Мин тормошомдо уйын менән сағыштырам: өҫтәлемде йыйыштырһам да, сираттағы китабымды яҙһам да, дуҫыма ярҙам итһәм дә, һүрәт төшөрһәм дә, иҫәптәрҙе түләһәм дә, нимәнелер эшләргә тырышһам да үҙемә мәрәй туплайым. Барлыҡ ғәмәлдәр менән үҙемдең йыһан балансын тултырам. Тормоштан икенсе бонус алыр өсөн тағы күпме мәрәй йыйырға кәрәклеген белмәйем, ләкин был миңә шөғөлөмдән ҡыуаныс табырға ярҙам итә. Һуңынан, ваҡыты-ваҡыты менән, көтмәгәндә, тормош таблоһында "Приз уйыны!" тигән яҙыу барлыҡҡа килә, әллә ҡайҙан яңы мөмкинлектәр, ҡыҙыҡлы тәҡдимдәр килә башлай, йәиһә почта йәшнигендә гонорар өсөн чек ята.

**Тулҡындар.** Тормошта бөтөн нәмә тулҡын-тулҡын булып килә. Беҙ тулҡындарҙың нимә икәнен беләбеҙ - тауыш, яҡтылыҡ тулҡыны. Ябай тел менән әйткәндә, тулҡындар мөһим күренеште асыҡ күрһәтә: бөтөн ваҡиғалар бер ваҡытҡа өйөлә. Тимәк, проблемалар ҙа, ғаилә янъялдары ла, туйға саҡырыу ҙа, автомобиль ватылыуы ла бер үк ваҡытҡа тура килә. Был хаҡта онотторға ярамай. Шуға күрә, әгәр бер айҙа бурыстарығыҙҙы түләргә квитанция килмәһә лә, аҡсағыҙҙы икенсе ай өсөн һалып ҡуйығыҙ һәм ике ай өсөн түләргә әҙер булырһығыҙ.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

## КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП

# ЙӨҘ ҠАРТАЯ ИНДЕ...

## күңелде ҡартайтма

**Һеҙгә нисә йәш? Был һорауға, әлбиттә, икеләнмәйенсә яуап бирерһегеҙ, сөнки тыуған көнөгөҙҙө яҡшы беләһегеҙ. Ләкин ашыҡмай тороғоҙ, кешенең йәшен бит был донъяла йәшәгән йылдар иҫәбе генә билдәләмәй.**

Психологтар, мәҫәлән, кешенең өс төрлө йәше була, тип иҫәпләй: хронологик, биологик һәм психологик. Хронологик йәште тыуыу тураһында таныҡлыҡҡа, йәғни йәшәлгән йылдар иҫәбенә ҡарап билдәләп була. Биологик йәште табибтар тән һаулығына ҡарап әйтә ала. Беҙ үҙебеҙ ҙә ҡай берәүҙәргә "Оло булһа ла, һаулығы йәштәрҙеке кеүек", тип әйтәбеҙ түгелме? Тест ярҙамында кешенең психологик йәшен билдәләп була. Тестан тыш та һеҙ уны күңелегеҙ менән тояһығыҙ. Мәҫәлән, һеҙгә илле йәш, ти. Күңелегеҙ бит күпкә йәшерәк. Шулай түгелме? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡай берәүҙәр үҙен йәшенән олораҡ итеп тойоуы ла мөмкин. Ни хәл итәһең, тормош бит: күңел торошон нәҡ тормош үҙгәртә, ә йәшәлгән йылдар иҫәбе түгел. Дөрөҫөрәге, тормош үҙгәртмәй, ә ошо фани донъялағы тормошҡа һәм эргә-тирәләге кешеләргә ҡарата мөнәсәбәт үҙгәртә. Бала саҡта, мәҫәлән, тиҙерәк үҫеп, ҙур булғы килә. Ана шул ҙурайғандар аҙаҡ бәләкәй балаларға "Күп аша, ҙу-ур булып үҫерһең", тип ҡабатларға ярата. Шулай бит? Шундай мөнәсәбәтебеҙ менән баланы программалайбыҙ һәм баланың, әлбиттә, тиҙерәк ҙурайғыһы килә. Артабан ул, үҫмер ҡорона етеп, тормоштоң башҡа ҡыҙыҡлы яҡтарын тиҙерәк татығыһы килә башлай. Тормош шулай дауам итә.

Кеше үҙ ғүмеренең үҙгәрешен, әлбиттә, еңел кисермәй, төрлө йәштәге кризистар аша үтә - ҡасандыр тиҙерәк ҙурайырға теләгән бала, олоғая килә, бала сағын һағынып иҫкә ала башлай... Владимир Лермонтовтың "Дельфания" китабындағы бер өҙөк хәтергә ныҡ уйылып ҡалған. Ҡыҫҡаса ул ошолайыраҡ: "Бала йоҡлағанды күҙәткәнегеҙ бармы? Иғтибар менән ҡарағыҙ әле: йоҡо аралаш йылмайғанда ул шундай матур. Унан әсә һөтө еҫе килә... Бына шул уҡ бала 40-45 йылдан һуң йоҡлап ята. Бәй, ул шул хәтлем үҙгәргән, йөҙө йыйырсыҡтар менән ҡапланған. Хәҙер ул йоҡо аралаш йылмаймай... Ул бит ауырый. Был ауырыуҙың исеме - ҡартайыу. Ҡартайыу эпидемияһы бөтөн Ер шары буйлап таралған".

Ҡурҡыныс, эйеме? Ләкин ҡурҡырға ярамайҙыр ул. Ана бит, ҡурҡҡандар йәшәрергә теләп, күпме стресс кисерә. Тормошто, кешеләр менән мөнәсәбәтте нисек бар, шулай ҡабул итергә, кисерергә, тойорға кәрәктер ул. Минеңсә, шулай ҡулайыраҡ. Һәр хәлдә, мөхиткә адекват ҡараште булыу аң даирәһен киңәйтә, ә ҡурҡып сәбәләнеүҙәр уны сикләй, ғүмерҙе ҡыҫҡарта.

Ошо темаға ҡағылышлы бер кинәйә һөйләйем әле, һығымтаһын үҙегеҙ яһағыҙ.

### Мин һаман да көслө



Өс бабай йәш саҡтың матурлығы, ҡартлыҡтың шатлыҡ түгеллеге тураһында һөйләшеп ултырған. "Мине аяҡтарым тыңламай башланы, - тип уфтана икән береһе. - Эх, йәш саҡтарҙағы кеүек, эләгеп-йығылып йүгереп йөрө икән ул. Бөгөн аяҡтарымды көскә-көскә һөйрәп йөрөйөм". "Дөрөҫ әйтәһең, ҡорҙаш, - ти икән икенсеһе. - Минең дә көсөм көндән-көн тамсылап юҡҡа сыға бара. Ваҡыт тирмәнендә беҙ ҙә үҙгәрҙек, замана ла үҙгәрҙе".

Был икәүҙән артыҡ бер ни яғы менән дә айырылмаған өсөнсө бабай уларҙың һөйләшкәнен тыныс ҡына тыңлап ултырған да: "Мин һеҙҙең нимә тураһында һөйләшкәнегеҙҙе аңламайым, - ти икән. - Мәҫәлән, мин бынан ҡырҡ йыл элек ни тиклем көслө булһам, бөгөн дә шулаймын". Тәүге икәү һаҡалдарын һелкә-һелкә кеткелдәп көлгән. "Ниңә көләһегеҙ, ысынлап та шулай, - тип ныҡышҡан "көслө" бабай. - Быға мин кисә тағы бер тапҡыр инандым. Минең өйҙәге имән шкафты күргәнегеҙ бар бит. Бынан ҡырҡ йыл элек мин шуны күтәреп, икенсе урынға күсереп ултыртырға уйлағайным, ләкин көсөм етмәгәйне. Кисә шуны тағы күтәреп ҡараным. Нимә тип уйлайһығыҙ? Эйе, тағы ла көсөм етмәне. Тимәк, бынан ҡырҡ йыл элек мин ни тиклем көслө булһам, бөгөн дә шулай көслөмөн..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ә һеҙгә нисә йәш, йәмәғәт? Әйттем бит, йәшегеҙҙе билдәләп, үҙегеҙҙе сикләмәй тороғоҙ - тормош дауам итә.**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

✓ *Ҡатын ҡыҙҙың нуры - ҡояш (көн) нуры, сәселеп тора. Күрәһегеҙ, бында һәр билдә, һәр символ бер мәғлүмәт менән ингән, бер нәмә лә артыҡ йәки бушҡа түгел.*



*РУХИӘТЕБЕҘ*

# СИБАЙҘА...

## башҡорт кейеме тантанаһы

**Сибай ҡалаһының шул төбәк башҡорттары өсөн бәләкәй баш ҡала ролен үтәүе яңылыҡ түгелдер. Үҙенә күрә мәҙәни үҙәк тә, рухи тупланыш урыны ла һәм шул төшөнсәләрҙе йөшәтеүсе һәм үҫтереүсе шәхестәр төйәге лә ул. Шунлыҡтан, башҡорт кейеме көндәренең дә башлап сибайҙар тарафынан үткәрелеүе бәрәүҙе лә хайран итмәҫ. Быйыл ул бында икенсе тапҡыр уҙғарылды.**



Әлеге яҙҙың көйһеҙ холҡо был көнгә мәрхәмәтле булды. Иртәнсәктән ҡояш көлдө, иркә ел яңы асылып күҙен асҡан ыуыҙ япраҡтарҙы тирбәтте, күк йөҙө салт булып, кәйефтәрҙе күтәрҙе. Беҙ килеп еткәндә ҡаланың үҙәгендә урынлашҡан сәнғәт колледжы алдында аллы-гөллө балитәкле ҡатын-ҡыҙ ҡайнаша ине инде. Уртаға киң урындыҡтар ҡуйып, үҙҙәре шулар тирәләй теҙелешеп ултырышып, ҡатын-ҡыҙҙар селтәр (йәки яға, түшелдерек, күкрәксә тиергә була) яһау бәйгеһенә тотонғандар. Улар ҙа, йәштәр ҙә бар. Кем иң беренсе булып өлгөнө мәрйендәр менән ҡамап бизәй - шул еңеүсе. Оҫтабикәләрҙең ҡулына күҙ эйәрмәй. Үҙҙәре хәбәрләшеп, көлөшөп ултыралар, йырлап-таҡмаҡлап та ебәрәләр, бармаҡтары төсләө мәрйендәрҙе энә күҙе аша үткәреп, нағышҡа теҙә бара. Оҙаҡ ҡына күҙәтеп тороп, был эштең үтә лә мәшәҡәтле, хәл, нескә икәнен төшөндөм. Күҙ көсө лә, ҡулдар тилберлеге лә, сабырлыҡ та, хатта математик һәләт тә кәрәк икән.

Артабан колледж залына оҫталыҡ дәресенә йыйылдыҡ. Уны сәсәниә, әйткәндәй, ошо сараның һәм тағы ла башҡа бихисап данлы-шаулы сараларҙың идея хужабикәһе Асия Солтан ҡыҙы Ғәйнуллина үткәрҙе. "Үткәрҙе" тип кенә әйтеү үтә лә ябай булыр ине. Ул беҙҙе мәғлүмәтле итте. Бығаса "башҡорт кейеме, башҡорт кейеме" тип йөрөп тә, бөтөн ошо биҙәүестәрҙе бары матурлыҡ билдәһе итеп кенә күрһәк, бары әле килеп биҙәүестәрҙең ысын тәғәйенләнешен, серҙәрен, хатта кодтарын төшөндөк. Һәр биҙәүескә ҡарата ҙур булмаған характеристика бирҙе фольклор белгесе:

- Селтәр дүрт өлөштән тора. Селтәр, тәңкәләр ҡаҙалған өлөшө, унан өҫкө яғы. Аҫта бер буй, ике буй селтәр менән суғы эшләнә. Өҫкө яҡтағы йәйғор, ҡояш кеүек итеп эшләнгән һыҙмалар ябай ғына биҙәк түгел. Улар үҙҙәре бер күренеш. Мәҫәлән, улар ир-егеттәрҙең йәки ҡатын-ҡыҙҙарҙың билдәләрен йөрөтөргә мөмкин. Ир-егеттәрҙең нуры - ай нуры. Ул туп-тура ғына һыҙылып төшә һәм унын осонда - орлоҡ. Был символ кешеләргә лә, үҫемлектәр донъяһына ла ҡағыла. Орлоҡ - йәшәү, тереклек билдәһе. Ҡатын ҡыҙҙың нуры - ҡояш (көн) нуры, сәселеп тора. Күрәһегеҙ, бында һәр билдә, һәр символ бер мәғлүмәт менән ингән, бер нәмә лә артыҡ йәки бушҡа түгел. Шунлыҡтан, ҡайһы берәүҙәрҙең селтәргә ҡурай, сәскә кеүек уйлап табылған биҙәктәр индереүе дөрөҫ түгел, - тигән кәңәш тә булды Асия Солтан ҡыҙынан. Шулай итеп, милли кейемдәребеҙҙә бер нәмә лә юҡтан бар ителмәгән, уларҙың һәр береһе үҙ урынында файҙалы икәненә бик яҡшылап төшөнөлдө..

Төштән һуң байрамдың иң тантаналы өлөшө - милли кейемдәрҙә ҡала урамынан үтеү ойошторолдо. Бында мәктәп һәм балалар баҡсалары балалары ла ҡатнашты. Халыҡтың ҙур ғорурлыҡ менән милли кейемдәрҙә ҡала урамдары буйлап атлауы күңелдәрҙе нескәртерҙәй, әллә ниндәй хистәргә һалырҙай бер һоҡланғыс күренеш булды. Артабан төркөмләп тә, айырым-айырым да оҫталар хеҙмәт емештәрен тамашасы хөкөмөнә сығарҙы. Бәйгегә яраш-лы, әлбиттә, урындар ҙа билдәләнде, бүләктәр тапшырылды, әммә байрамдың төп маҡсаты еңеү һәм еңелеүҙә түгел, ә ошо мөхитте, милли үҙаң уятырлыҡ тойғоларҙы тыуҙырыуҙа ине. Һәм был маҡсат моратына барып етте. Быны ни тине ҡатнашыусылар үҙҙәре:

***Әнүзә Исхаҡова, Силәбе өлкәһе Магнитогорск ҡалаһы:*** Магнитогорск ҡалаһының Дуҫлыҡ йортонда башҡорт мәҙәниәте бүлеген етәкләйем. Бында "Яйыҡбикә" этно-музыкаль төркөмө менән килдек.

Байрамға үҙенсәлекле өлгө алып килдек - гәләпүш. Был баш кейемен ҡаҙаҡтыҡы тип уйлай күптәр. Тик улай түгел, был беҙҙең халыҡтың боронғо фотоларында ла бар. Беҙ уны Палластың, Янгужиндың китабынан ҡарап тектек, тейешле булғанса итеп биҙәнек. Башлыҡ бик үҙенсәлекле, күрәһегеҙ. Ул түбәлә тигеҙ ултырһын өсөн дә тегеү формаһын боҙмаҫҡа кәрәк, югиһә, түбәһе артҡа йә алға ауышасаҡ. Бөгөн беҙгә күптәр иғтибар итте, киләсәктә был баш кейеме лә популярлыҡ яулар, тип уйлайбыҙ.

***Зәлиә Ишморатова, Сибай ҡалаһы:*** Байрамға ололар, үҫмерҙәр һәм бәләкәй ҡыҙҙар кейемдәре тегеп алып килдем. Ике ҡыҙым менән ҡатнашабыҙ. Ҡыҙҙарҙың һәм үҙемдең өҫтөгө барлыҡ биҙәүестәрҙе лә, селтәр-ҡашмау, еләң һәм башҡаларын үҙ ҡулдарым менән эшләнем. Мәҙәниәт өлкәһенә артыҡ ҡатнашлығым булмаһа ла, милли кейемдәр менән йәштән ҡыҙыҡһынам, хәҙер инде ҡыҙҙарыма өйрәтәм был оҫталыҡты. Бөгөн хатта беҙгә урыҫтар иғтибар итеп, ҡайһылай матур икән милли биҙәүестәрегеҙ, тип һоҡланды. Был үҙе күп нәмә хаҡында һөйләй. Үҙем диндәмен һәм милли кейемде ошо юҫыҡта ла тегергә кәрәк тигән пландар ҡороп торам әле.

***Миләүшә Моратова, Йылайыр районы Юлдыбай ауылы:*** Беҙ Юлдыбай ағинәйҙәренән туғыҙ кеше килдек. Милли күлдәк һәм биҙәүестәр беҙҙең барыбыҙҙа ла бар. Беҙ хәҙер селтәр-ҡашмауҙар эшләргә башҡаларҙы ла өйрәтәбеҙ. Башта, әлбиттә, был кәсепкә сәйерһенеберәк ҡаранылар. Ул хәҙер кемгә кәрәк, тип әйтеүселәр ҙә булды. Әммә аңлаусылар ҙа, белергә теләүселәр ҙә күберәк. Үҙем дә, бындай биҙәүестәр һәр башҡорт ҡыҙында, хатта ҡыҙсығында булырға тейеш, тип иҫәпләйем. Шуға ҡыҙыма ла, хатта, Алла бирер әле, тигән өмөт менән буласаҡ ейәнсәрҙәргә лә эшләп һалдым уларҙы.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1438 һижри йыл.***

| Май - Июнь (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (3) дүшәмбе | 2:52 | 3:22 | 5:52 | 13:30 | 20:06 | 21:36 | 23:06 |
| 30 (4) шишәмбе | 2:51 | 3:21 | 5:51 | 13:30 | 20:07 | 21:37 | 23:07 |
| 31 (5) шаршамбы | 2:49 | 3:19 | 5:49 | 13:30 | 20:08 | 21:38 | 23:08 |
| 1 (6) кесе йома | 2:48 | 3:18 | 5:48 | 13:30 | 20:10 | 21:40 | 23:10 |
| 2 (7) йома | 2:48 | 3:18 | 5:48 | 13:30 | 20:11 | 20:41 | 23:11 |
| 3 (8) шәмбе | 2:47 | 3:17 | 5:47 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 4 (9) йәкшәмбе | 2:46 | 3:16 | 5:46 | 13:30 | 20:13 | 21:43 | 23:13 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**27 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+
**30 май "Антигона"** (Ж. Ануй), драма 12+
**31 май "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**1 июнь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро), әкиәт. Башлана 10.30 0+
**2 июнь "Буратино-remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. Башлана 10.30 0+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 июнь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 10.30, 12.00 0+
**2 июнь "Как Колька двойку исправлял"**, әкиәт. Башлана 10.30 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**27 май "Три поросенка"** (С. Михалков). Башлана 12.00, 14.00 0+
**28 май "Девочка и пришелец"** (Б. Хан). Башлана 12.00, 14.00 0+

*НИӘТ ИТ!*

# ҠУРАЙ ЕЛӘГЕ



**Ҡурай еләге баҡсамда 10х2,5 м майҙанды алып тора. Унан 8 биҙрә емеш тиреп алырға була.**

Ҡурай еләге үҫентеләрен бер рәткә бер-береһенән 70 см арауығында сәсергә кәрәк. Рәт аралары 2,5 м булһын. Үҫентеләрҙе киңлеге 70 см булған махсус түтәлгә сәсегеҙ. Түтәлдең ситен шифер киҫәктәре менән "кәртәләйем", унын бейеклеге 20 см. Был осраҡта уларға һыу һибеүе лә, ашлауы ла унайлы. Яҙ түтәлде тиҙәк, һалам, компост менән ҡаплайым, мочевина һәм көл менән ашлайым. Был ҡатлам аша сүп үләндәре лә үҫеп сыҡмай, ул ҡурай еләген тапалыуҙан һаҡлай, шул уҡ ваҡытта йылыта ла. Шуға ла емештәр ҙә ғәҙәттәге мәлдән 7-10 көнгә иртәрәк өлгөрә.

Миҙгел эсендә ҡурай еләге ботаҡтарын 3 тапҡыр ҡыҫам. Беренсе тапҡыр 25 май - 5 июндә. Бөтөн йәш үҫентеләрҙе 5 см ҡыҫҡартам. Бынан һуң улар буйға үҫеүҙән туҡтай. Бер нисә көндән япраҡтар эргәһендә ян үренделәре барлыҡҡа килә. Уларҙың һаны 3-5, унан да күберәк булыуы ихтимал. Ошо рәүешле ҡырҡып торһағыҙ, ҡурай еләге ҡыуаҡтары артыҡ буйға китмәй, тәпәш була.

Икенсе тапҡыр ботаҡтарҙы емеше йыйып алынғас ҡырҡырға. Бөтөн емеш биргән һәм насар үҫешкән ботаҡтарҙы йәлләмәй ҡырҡып ташлағыҙ. Ҡыуаҡта яҙын ҡырҡылған 4-5 ботаҡ ҡалһа, етә. Һөҙөмтәлә ошо ботаҡтар тейешенсә туҡлыҡлы матдәләр аласаҡ. Ҡыуаҡ һирәгәйеп ҡалғас, яҡтылыҡ та яҡшы үтеп инә, 7-10 көндә уларҙың ботаҡтары алһыу-көрән төҫкә инәсәк.

Августың 20-29-ҙарында ян үрентеләренән барлыҡҡа килгән ботаҡтарҙы 15-20 см-ға ҡыҫҡартам. Был ботаҡтарҙы киптереп, сәй итеп ҡулланырға ла була. Әгәр ҙә ҡырҡмаһаң, был үҫентеләр өлгөрөп етмәйенсә ҡышҡа инә һәм ҡышын туңа. Быны ошо рәүешле артыҡ көс түкмәй генә ҡурай еләге үҫтерергә була.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

Һөйөклө әсәһе **Наилә Иштимер ҡыҙының** вафаты айҡанлы хеҙмәттәшебеҙ Ләйсән Нафиҡованың ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп китҡән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

**"Киске Өфө"ләр.**

*✓ Ғаилә бәхетенә һуҡыр ҡатын менән һаңғырау ир генә өлгәшә ала, тип әйткән кеше бик аҡыллы булғандыр.*

*(М. Монтень).*



*ИҒТИБАР: АКЦИЯ!*

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**59. Динис Бүләковтың "Эҫе ҡар" повесы.** "Яҙыусының балалар һәм үҫмерҙәр өсөн мауыҡтырғыс, фәһемле башҡа әҫәрҙәре лә күп. Ләкин "Эҫе ҡар" повесында бер башҡорт ауылы кешеләре яҙмышында бөтә ил тормошо сағылдырыла. Автор Ирмәк исемле малайҙың кескәй йөрәгендә ауыр эҙ ҡалдырған хәтирәләре тураһында ҡыҙына һөйләй. Повесть аҙағында әҙип "Бик белгең килһә - ул малай мин инем", - тип яҙа. Был китап үҫмерҙәрҙе кешелекле булырға, ысын дуҫ ҡәҙерен белергә, хаҡты нахаҡтан айырырға өйрәтә. Хайуандарға ғына түгел, кешеләргә ҡарата ла изге мөнәсәбәттә булырға кәрәк икәненә төшөндөрә Динис Бүләков", - тип яҙа Өфө ҡалаһынан Зәлиә Сабирова.

**60. Ҡәҙим Аралбайҙың "Рух яҙыуы" һәм "Таналыҡ тауышы" китаптары.** "Был йыйынтыҡтарҙа шағир рух төшөнсәһе, илһөйәрлек, тормошта үҙ юлыңды эҙләү, туған тел яҙмышы һәм башҡа бер ҡасан да актуаллеген юғалтмаясаҡ темаларҙы күтәрә. Поэма һәм шиғыр формаһынан тыш, халыҡ ижадының бәйет, ҡобайыр, робағи жанрҙарына ла мөрәжәғәт итә.

"Ҡайҙа барабыҙҙыр? -
Ут-замандың
Дауылдары ҡаға елкәгә,
Уйламайбыҙ:
Тормош каруаныбыҙ
Ҡайҙа морон төртөр иртәгә?" - тип яҙһа ла, Ҡәҙим Аралбайҙың ошо йыйынтыҡтарында башҡорт халҡының киләсәгенә, ил яҙмышына ҡағылышлы һорауҙарға яуап табырға мөмкин", - тип яҙа Хәйбулла районынан Әлфиә Мәмбәтова.

**61. Әнүәр Бикчәнтәевтың "Ҡарасәй юлы", "Ожмах вәғәҙә итмәйем" романдары.** "Әнүәр Бикчәнтәевтың "Әҫәрҙәр" йыйынтығы беренсе томына индерелгән был ике романы һәм **"Яр буйы малайҙары"** повесын "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә индерергә тәҡдим итәм. Дөйөм әйткәндә, был әҫәрҙәр Совет замаңында башҡорт ауылдарының тормошо, производство, хөкүмәт сәйәсәте, халыҡтың көнкүреше, кешеләрҙең хыялдары, тормошо һәм эштәре тураһында. Ил өсөн кәрәкле бөйөк эштәр эшләргә ашҡынып йәшәгән "бәләкәй" кешеләрҙең, тотош ауылдарҙың яҙмышы тасуирлана. "Ҡарасәй юлы" романында шундай юлдар бар: "Борон замандан минең халҡым үҙенең яҙмышын юлдарға бәйләгән: башҡорт нәҫел-ырыуҙарының ҡайҙа тороуына ҡарап, Себер юлы башҡорттары, Ҡаҙан юлы, Нуғай юлы башҡорттары тип йөрөткәндәр. Ә хәҙер башҡорттар ниндәй юл менән баралар һуң?" - шулай тип уйланып киләә күпте күргән, күпте кисергән Шайморат бабай. Был һорау бөгөн дә көнүҙәк, бөгөн халҡыбыҙ ниндәй юлдан, ҡайҙа табан китеп бара? Әҫәрҙә Әнүәр Бикчәнтәев заманына күрә үҙенсә яуап бирә, ә беҙгә уйланырға ғына ҡала. Романдарҙы олораҡ быуын кешеләре уҡыһа, "Яр буйы малайҙары" повесын балаларға уҡып ишеттереү ҡыҙыҡлы буласаҡ", - тип яҙа Рәлиә Сәхипгәрәева.

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына** ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индерән һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнеештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы"** тип аталған фекер алышыу битендә **"#башкитап"** хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

*ВИКТОРИНА*

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР



**Был юлы шағирә, композитор, драматург Зөһрә Фәйзуллинаның тормошо һәм ижады буйынса һорауҙар тәҡдим итәбеҙ.**

**1. Зөһрә Фәйзуллинаның ниндәй йыры мәктәп сығарылыш кисәләренең гимнына әйләнгән?**
а) "Һау бул, мәктәп!";
б) "Уҡытыусыма";
в) "Мәктәп вальсы".

**2. Зөһрә Фәйзуллинаның тыуған ере?**
а) Баймаҡ районы;
б) Әбйәлил районы;
в) Сибай ҡалаһы.

**3. Зөһрә Фәйзуллинаның Гөлсөм Бикбулатоваға "Урал моңо" конкурсында еңеү килтергән йырын күрһәтегеҙ.**
а) "Аҡ сәскәләр";
б) "Аҡ болоттар";
в) "Арҡайым"?

**4. Зөһрә Фәйзуллинаның, кассеталарынан тыш, 2017 йылда сыҡҡан аудио дискыһының исеме нисек атала?**
а) "Тоғролоҡ";
б) "Онотмайыҡ";
в) "Изгелек".

Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем беҙгә 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул уҡыусыбыҙға Зөһрә Фәйзуллина үҙенең автографы ҡуйылған "Үҫеп етербеҙ әле" китабын бүләк итмәксе. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса Зөһрә Ҡотлогилдинаның автографы ҡуйылған "Ялан сәскәләре" китабын Лилиә Яҡупова отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?

**Викторинаны Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

# КОТЛАЙБЫҘ!

Май айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Белорет районы** Инйәр ауылынан Әлфирә Мөхәмәткилдина, Рәйфә Низамова, Ҡаһарман ауылынан Фәнзиә Хәйруллина, Рысаҡай ауылынан Вәсилә Дәүләтбаева, **Өфө ҡалаһынан** Мәхтүмә Яхина, Зәлифә Юнысова, Римма Ғәбәйҙуллина, **Әбйәлил районы** Атауҙы ауылынан Маһинур Ямалетдинова, Йәнгел ауылынан Фәниә Ғәлләмова, Аҫҡар ауылынан Гөлсирә Зарипова, Гөлсирә Ғарипова, **Салауат районы** Мөрсәлим ауылынан Миңзәлә Ҡорбанғәлиева, **Стәрлетамаҡ районы** Мырҙаш ауылынан Нурия Минлегужина, **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Ғәлийән Төхфәтуллин, **Учалы ҡалаһынан** Римма Усманова, **Белорет ҡалаһынан** Вәдүт Йомағужин, **Баймаҡ районы** Яйыҡбай ауылынан М. Байегетова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ҡотлайбыҙ! Һеҙгә ғүмерҙең оҙонон, бәхеттең иң ҙурын, шатлыҡтарҙың иң олоһон теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠСА СЫҠМАЙ...

## аҡса кермәй

Йүнһеҙ кеше булғансы, юҡҡа сыҡҡан булһансы!

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡсаһы аҙ булып та күңел күтәренкелегендә йәшәгән кеше - бәхетле, аҡсаһы күп булып та йән тыныслығы тапмағандар - бәхетһеҙ.

**(Демокрит).**

Тәбиғәттән бирәү ҙә түбән йә бейек булмай, бары тик хеҙмәте генә кешене түбән йә бейек итә.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Ахмаҡтың тормошо ҡурҡыу менән тулы, сөнки ул бер эшен дә бөгөн эшләмәй, ә барыһын да иртәгәгә ҡалдыра.

**(Кесе Сенека).**

Әгәр ҙә бәхет йорто тәҙәргә тура килһә, ундағы иң ҙур бүлмәне көтөү өсөн тәғәйенләргә тура килер ине.

**(Ж. Ренар).**

Ғаилә бәхетенә һуҡыр ҡатын менән һаңғырау ир генә өлгәшә ала, тип әйткән кеше бик аҡыллы булғандыр.

**(М. Монтень).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарт донъя ҡуйыр алдынан улына шундай васыятын әйткән. "Мин һиңә өс кәңәшемде бирәм, шуны тотһаң, һин бай ҙа, сәләмәт тә, бәхетле лә, мөхәббәтле лә булырһың. Һин иртән берәүгә лә үҙең башлап сәләм бирмә, барыһы ла һиңә сәләм бирһендәр - быныһы тәүге кәңәшем. Ауыл һайын йорт һал - икенсе кәңәшем шул. Ай һайын кәләш ал - быныһы өсөнсө васыятым". Атаһы үлгән. Улы атаһын юғалтыу ҡайғыһынан бер аҙ арынғас, уның баяғы өс васыяты тураһында уйлана башлаған. Уйлай торғас, тағы ла олораҡ ҡайғыға ҡалған был. "Ҡара әле, атайым миңә ҡалай насар васыят ҡалдырған. Уларҙы нисек үтәмәк кәрәк? Нисек кешеләргә сәләм бирмәй үтеп булһын? Нисек итеп ауыл һайын йорт һалмаҡ кәрәк? Нисек итеп ай һайын өйләнергә була?" Шулай оло ҡайғыға ҡалып йөрөгәндә был бер аҡыллы аҡһаҡалға тап була. Уға үҙ хәлен һөйләп бирә. Аҡһаҡал уға былай ти: "Улым, һин бит атайыңдың васыятын дөрөҫ аңламайһың. Иртән берәүгә лә сәләм бирмә, тигәне, бар халыҡтан алда йоҡонан тор, эштәреңде теүәллә, һинән һуң йоҡонан торғандар һиңә сәләм бирһен, тигәнде аңлата. Ауыл һайын йорт һал, тигәне, ауыл һайын яҡшы дуҫтарың булһын һәм һин уларҙың йортона үҙ йортоңа барып ингәндәй инерһең, тигәнде аңлатыр. Өсөнсө васыяты шул: ир кеше гел генә өйҙә ултырмай, ил гиҙә, мал таба, ана шул эш менән йөрөп килгәндән һуң ҡатының һағынып ҡайта, һәр ҡайтҡан һайын күрешеү яңынан ҡауышыу һымаҡ була..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 1055/05